# шоңқар



4*2011

ДУҪЛЫҠ икән –
уның иҫкеһе хуп.
МӨХӘББӘТТЕҢ иһә
тәүгеһе!

Ш. Бикҡол



Дуҫтар!

Дуҫтар!
Икенсе ярты йыллыҡҡа яҙылыу дауам итә!

№4(129)*2011

ОС ИРЕККӘ, БАШҠОРТОСТАН!

1994 йылдың 1 ғинуарынан башлап нәшер ителә.

*Башҡортостан йәштәренең айлыҡ ижтимағи-сәйәси, әҙәби-нәфис журналы*

БАШҠОРТОСТАН ЙӘШТӘРЕ ЖУРНАЛЫ
шоңҡар

## БЫЛ ҺАНДА:

**БЕР КӨНЛӨК СӘХИФӘ**
Миңзәлә АСҠАРОВА.
Тормош иркә ҡыҙҙы ла донъя күтәргә өйрәтте. 2

**ИЛҺАМ**
Лариса АБДУЛЛИНА.
Шиғырҙар. 8

**СӘСМӘҮЕР**



Рамай ҠАҺИР.
Декабристка. Хикәйә. 10

**ӘРМЕЛӘРҘӘ ЙӨРӨП СӘС ЕТКЕРҘЕМ**
Г. ӘХМӘТЙӘНОВ.
Билдәһеҙ һуғыштың онотолған ветерандары. 15
Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.
Беҙ – туғыҙынсы ротанан. 18
Марсель ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВ.
Һуғыш ҡалдырған һағыш. 20

**ИМАН НУРЫ**
Алтынгөл.
Иман психологияһы. 24

**БИЗМӘНГӘ ҺАЛЫП**
Земфира ТАҺИРОВА.
Туғандарҙың күп булыуы отошломо? 31

**ӘСӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ**
Гөлсинә БАЙҒУЖИНА.
Уйынсыҡтарын йыймаған балаларға әкиәт. 34

**ИЛАҺИӘТ**



Гөлшат ҠАҺАРМАНОВА.
Беҙҙе сағылыштың режиссеры, тиҙәр. 36

**БЕҘҘЕҢ АШ-ҺЫУ**
Төмән яктары һыйлай. 41

**ИЛҺАМ**
Инсур АРТУР.
Шиғырҙар. 42

**ИЖАД КУХНЯҺЫ**
Гөлнара ҒӘЙЗУЛЛИНА.
«Яҙып ҡарау»ҙан башланған юл. 44

**БӨРӨЛӘР**
Альбина ҠОТЛОГИЛДИНА.
Күперҙә. Хикәйә. 48
Гүзәл ҒӘЗИЗОВА.
Тоғро йөрәк. Нәсер. 49

**ҒИБРӘТ**
Рәхимә ХӨСӘЙЕНОВА.
Әсә бәхете. 51

**ҺАҠЛАНҒАНДЫ ҺАҠЛАРМЫН**
Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.
Процентҡа акса алыу. 56
Альбина САДЫҠОВА.
«Уйынсыҡ акса»лар ҡурҡынысмы? 58

**ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ ТАП**
Ләйлә ЗАКИРОВА.
Тормоштоң төп романы. 60

**БЕҘҘЕҢ ЖУРНАЛ ТЫШЫНДА**



Ш. ЯУБАСАРОВ.
«Ҡалъя» – иттең майлы ғына өлөшө ул. 65

**СӘЙЕР КЕШЕЛӘР**
Лилиә МОСТАФИНА.
Ул әруахтар менән аралашҡан. 74

**ҠЫРҠТАРТМА**
Г. ҒӘЙЗУЛЛИНА.
Был ҡалалар тиҙҙән булмаясаҡ. 76

шоңҡар ИНТЕРНЕТТА: WWW.SHONKAR.RU
www.video.shonkar.ru
www.music.shonkar.ru
http://vkontakte.ru/club13743478
http://www.facebook.com/#!/profile.php?id=100000936043132

# «ТОРМОШ ИРКӘ ҠЫҘҘЫ ЛА ДОНЪЯ КӨТӨРГӘ ӨЙРӘТТЕ»

**БЫҒА ТИКЛЕМ РУБРИКАНЫҢ ГЕРОЙҘАРЫ ХАЛҠЫМДЫҢ ӨФӨЛӘ ЙӘШӘГӘН КҮРЕНЕКЛЕ УЛДАРЫ ИНЕ – РӘСӘЙҘЕҢ ҺӘМ БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ХАЛЫҠ АРТИСЫ ХӨРМӘТУЛЛА ҮТӘШЕВ, БӨТӘ ДОНЪЯ БАШҠОРТТАРЫ ҠОРОЛТАЙЫ БАШҠАРМА КОМИТЕТЫ РӘЙЕСЕ ИЛГИЗ СОЛТАНМОРАТОВ. ЛӘКИН БАШ МӨХӘРРИРҘЕҢ ТӘҠДИМЕ МЕНӘН АУЫЛ ЕРЕНДӘ ЛӘ ҮРНӘК БУЛЫРҘАЙ ДӘРТЛЕ, ЭШЛЕКЛЕ ЙӘШТӘРҘЕ ЭҘЛӘРГӘ БУЛДЫМ. ШУЛАЙ ИТЕП, АРТАБАНҒЫ СӘХИФӘ ЕМЕРТЕП ДОНЪЯҺЫН ДА КӨТКӘН, ЭШЕНДӘ ЛӘ ӨЛГӨРГӘН, БАЛАЛАРЫН ДА ТӘРБИӘЛӘГӘН АУЫЛ КЕШЕҺЕ ХАҠЫНДА.**

Азалия Рим ҡыҙы ӘҺЕЛОВАҒА **31 ЙӘШ. ӘБЙӘЛИЛ РАЙОНЫ ҮҘӘГЕ – АСҠАР АУЫЛЫНДА ЙӘШӘЙ. ТОРМОШ ИПТӘШЕ РАДМИР АҒАЙ МЕНӘН ИКЕ ҠЫҘ ҮҪТЕРӘЛӘР. НИ ӨСӨН ТАП УНЫ РУБРИКАНЫҢ КИЛӘҺЕ ГЕРОЙЫ ИТЕП ҺАЙЛАНЫММЫ? МОҒАЙЫН, АЗАЛИЯ АПАЙҘЫҢ АЛСАҠЛЫҒЫ, МӨЛӘЙЕМЛЕГЕ ЙӘЛЕП ИТКӘНДЕР. КЕШЕ КҮҢЕЛЕНӘ ЙЫЛМАЙЫУЫ МЕНӘН АСҠЫС ТАБЫУСЫЛАРҘАН УЛ. ЭШЛЕКЛЕ ХАНЫМ, БУЛДЫҠЛЫ ҠАТЫН, ИҒТИБАРЛЫ ӘСӘ МЕНӘН БЕР КӨН ТӘҠДИМ ИТӘМ.**



## ИРТӘНСӘК

Район үҙәге минең тыуған ауылымдан егерме саҡрым тирәһе алыҫлыкта ята. Иртән тороп юлға сыкканда, көн яктырып, нурға сорналған ине. Ауылдан сығып етмәҫ борон уҡ Аскарға китеп барыусы ауылдаш апа* ултыртып алды. Ауыл кешеләренең эскерһеҙлеге һәм ихласлығы! Ун биш минут эсендә барлык яңылыктар билдәле булды.

## 09:06

Бына ул бина. Барлык район халкы, йылына бер генә тапкыр булһа ла, ошонда инеп сығалыр ул. Нисә карама, бина алдында ла, эсендә лә халык мыжғып тора. Дүртенсе катка күтәреләм... Иртә булыуға ҡарамаҫтан, оҙон коридор буйынан-буйына сиратта тороусылар менән шығырым тулған. Ара-тирә әрепләшеп киткәндәре лә ишетелә. Һәр кемдең үҙ ҡайғыһы, үҙ хәсрәте...

- Миңзәлә! Килеп тә еттеңме?

Әллә ҡайҙан, халыкты йырып, бөгөнгө көнөмдөң геройы килеп сыкты. Өҫтөндәге ҡара водолазкаһы менән итәге килешеп тора үҙенә. Күпертеп өҫкә йыйып ҡуйған бөҙрә сәстәре лә йәшлеген, матурлығын тағы ла сағыуырак күрһәтә. Ул – Халыкты социаль хеҙмәтләндереү үҙәге хеҙмәткәре. Һәр ваҡыттағыса, мөләйемлеге менән арбап ҡаршы алды:

- Әйҙә, түрҙән уҙ... Тик беҙҙең ултырған бүлмә һалҡын инде, бәлки, өҫ кейемеңде һалмаҫһың?

* *Апа – диалект һүҙ, атайҙан оло ир заты.*

Ауыр кейем менән йөрөгөм килмәне, сисеп, шкафка элеп ҡуйҙым, ә үҙем шунда уҡ өшөй башланым – бүлмәләре ысындан да һалҡын ине. Унан тыш, бигерәк ҡыҫыҡ, алты кеше ултыралар, етмәһә. Өҫтәлдәр араһында иркенләп йөрөрлөк тә түгел. Азалия Римовна эште хеҙмәттәштәре менән таныштырыуҙан башланы:

- Һинең һул яғыңда – Ҡаландарова Тәғзимә Рафаил ҡыҙы, уның янында – Нурмөхәмәтова Таңһылыу Миҙәхәт ҡыҙы, ә бынһыһы Земфира Мөнир ҡыҙы Мансурова булыр. Улар халыҡты өйҙә хеҙмәтләндереү бүлегенең ауылдарҙағы бүлексә мөдирҙәре. Ҡалған ҡыҙҙар – Дилбәр менән Гүзәл – бөгөн юҡ. Бында өс бүлек урынлашҡан. Мин ғәриптәр, күп балалы ғаиләләр менән эшләйем. Йыш ҡына комиссия составында ауылдар буйлап ауыр ғаиләләрҙең хәлен белергә сығып китергә лә тура килә. Беҙҙең бүлек тиҙ социаль ярҙам күрһәтеү менән шөғөлләнә. Бөгөнгә көндән шифахана-курорт юлламалары, мөмкинлектәре сикләнгәндәргә кәрәкле ҡоролмалар би-реү буйынса эште лә алып барам. Дилбәр ауыр йәшәүсе ғаиләләр өсөн кейем-һалым кеүек әй-берҙәр ҡабул итә. Гараж көн-төн тиерлек асыҡ, мохтаждар шунан үҙҙәренә кәрәкле нәмәне килеп ала. Гүзәл – психолог.

Үҙе һөйләй, үҙе бер минутка ла бушамай – коридорҙа торған кешеләр берәм-берәм инеп, йомошон йомошлап тора. Күбеһенсә шифахանала ял итер өсөн ҡағыҙҙар йүнләргә оло йәштәгеләр килә. Мин элек бының өсөн әллә күпме ҡағыҙ артынан йөрөргә кәрәк икән тип уйлай торғайным. Ысынбарлыҡ улай уҡ ҡурҡыныс булып сыҡманы. Әбей-бабайҙар, инвалидтар ауырлыҡһыҙ документтарын ҡалдырып, ғаризаларын яҙып сығып тора. Уларҙың ҡағыҙҙарының күсермәһен эшләтеү өсөн Азалия апай, коридорҙағы сиратты йырып, күрше бүлмәгә йүгерә. Был хәл һәр ун-ун биш минут һайын ҡабатланғас, үҙе лә арыны, буғай:

- Таня, әйҙә ксерокты үҙебеҙгә күсереп торайыҡ. Гүзәлдең өҫтәленең бер мөйөшөнә. – Таня тип башҡортса ауырыраҡ һөйләшкән Тәғзимә апайҙы йөрөтәләр.

- Бәлки коридорҙа торған ирҙәрҙең береһенә әйтерһегеҙ? Ауыр ғына бит!

- Үҙебеҙ ҙә булдырабыҙ беҙ уны!

Күп тә үтмәй, коридорҙа Азалия Римовнаның “Юлдан китегеҙ!” тигән тауышын ишеттек һәм ксерокс буш өҫтәлгә менеп ҡунаҡланы. Ауыл ерендә шулай инде, ҡатын-ҡыҙ кемдәндер ярҙам көтөп ултырырға күнекмәгән.

Азалия Римовна кешеләрҙе хеҙмәтләндергән арала, мин бүлмәне тағы бер ҡат байҡайым. Тәҙрә төбөндә күкрәп гөлдәр үҫә, һыуыҡ булһа ла. Береһенең хатта япраҡтары һелкенеп тора тәҙрәнән иҫкән елгә. Геройымдың ултырған урыны бүтәндәрҙекенә ҡарағанда күпкә ҡыҫығыраҡ, өҫтәле бәләкәсерәк. Янында бөхтә генә итеп ҡағыҙҙар өйөп ҡуйылған кәштәһе бар. Иң ныҡ күҙгә ташланған әйбер бында – ҙур, матур көҙгө. Ҡатын-ҡыҙҙың эш урыны бит! Ҡышҡы иртәнең, ҡояшлы булһа ла, яҡтыһы самалыраҡ. Бүлмәлә дүрт лампочканың өсөһө яна, ләкин уның да яҡтыһы һүрән генә. Мине сессияла булыу сәбәпле эшкә килмәгән ҡыҙҙарҙың береһенең урынына ултыртып ҡуйҙылар. Тәҙрә төбө булғас, айырыуса һалҡын, ләкин ризаһыҙлыҡ белдереп торор ер түгел, урын юҡ икәнлеген күреп торам. Хан заманындағы компьютерға ҡарап ҡуйҙым да иғтибарымды инеп-сығып йөрөүселәргә йүнәлттем. Бына урта йәштәрҙәге апай килеп инде. Ҡыҙын шифаханаға ебәрергә йыйынып йөрөй.

Килеүселәр инмәй торған арала, ә ундай мәлдәр бик һирәк, бүлмәлә ҡағыҙ ҡыштырлауынан башҡа бер ни ҙә ишетелмәй тиерлек. Бөгөн канцелярия тауарҙарын бирә торған көн тип, апайҙар бухгалтерҙан үҙҙәренә тейешлеһен барып алып килде. Гүзәл менән Дилбәрҙекен дә алдылар. Азалия Римовна аңлата:

- Былар беҙгә бер йылға бирелә инде. Папкалар, файлдар, юйғыс, ҡәләм, ручка, дәфтәрҙәр... – Өҫтәлгә өс блокнотты теҙеп һалды ла миңә ҡарай. – Ҡайһыныһын һайлайым?

Ҡыҙыҡ инде ҡатын-ҡыҙ халҡы. Ир-егеттең блокнот тышында нимә төшөрөлөүенә ҡарап ултырырға әллә ни теләге лә булмаҫ ине, ә беҙгә һәр ваҡ-төйәк мөһим. Ана, Земфира Мөнировнаның да тауышы сыға:

- Ә мин ҡыҙҙар өсөн махсус тәғәйенләнгән блокнотты һайланым. Уның эсендә файҙалы кәңәштәре лә бар...

- Елемдәре эшкинмәй... – ти Таңһылыу апай ризаһыҙ тауыш менән. Һәр яңы әйберҙәренә шунда уҡ тамға итеп үҙ исемдәрен яҙып ҡуйҙылар – бүлмә эсендә күсеп йөрөгәндә юғалыуы ла ихтимал, буталһа ла ҡыйын.

Ишекте туҡылдатып бер йәш кенә егет килеп инде. Тартына биреберәк йәшел пакетынан ҡағыҙҙарын сығарҙы:

- Һеңлемде санаторийға ебәрергә ине... – Азалия Римовна ихлас уның ҡағыҙҙарын тикшерә. Барыһы ла бар, тик шулай ҙа нимәһендер килештереп етмәне.

- Әйҙә әле, хужаға инеп сығайыҡ, һеңлеңде шифаханаға ебәреп булмаҫ кеүек. Табиптың дауа кәрәклеге тураһындағы ҡағыҙы юҡ бит. Өсәүләшеп коридорҙан этелә-төртөлә ошо “организмдың” “мейеһенә” барабыҙ. “Директор Ғайсин Наил Ғәли улы”. Ишек төбөндәге ошо яҙыу күренгәс, Азалия Римовна беҙҙе туктата ла, үҙе ишек артында юғала:

- Көтөгөҙ, хәҙер...

Уны көткән арала егет менән аралашам. Исеме – Рөстәм, Ныяҙғол исемле бәләкәс кенә ауыл-

дан, бер туған һеңлеһенә психо-неврологик дауаланыу үтергә кәрәк. Бер нисә минуттан Рөстәм менән мин дә Наил Ғәлиевич янына үтәбеҙ. Олпат ҡына, урта йәштәрҙәге был ағай егеттең ҡағыҙҙарын ентекләп уҡый.

- Ҡустым, табиптың ҡағыҙы булмай тороп, беҙ бер ни ҙә хәл итә алмайбыҙ. Һеңлеңде Өфөгә алып барып тикшертергә кәрәк тәүҙә.

Кире бүлмәгә әйләнеп ҡайтабыҙ. Кешеләр килеүҙән туҡтамай, Азалия Римовна һәр береһе менән иғтибарлы, яҡшы мөғәмәләлә. Йөрәгенә зарланған ағайҙы хеҙмәтләндергән арала, сиратын көтмәйенсә, бер бабай килеп инде. Кеше барлығын күреп, шунда уҡ сығырға уҡталһа ла, бабайҙы Азалия апай үҙенең урынына ултыртып ҡуйҙы.

- Көтөп тороғоҙ, йәме, хәҙер...

Инеүселәр Гүзәлдең буш өҫтәле артына ултырып тултыра ғаризаларын, шуға Азалия Римовнаға ике өҫтәл араһында орсоҡ кеүек әйләнергә тура килә. Әле бына ниндәйҙер ҡағыҙ артынан кире бабай янына әйләнеп килгәс, уныһы йәһәт кенә һикереп торҙо. Шулай бер нисә ҡабат.

- Апа, ҡайһылай йәш егеттәр шикелле еңел һөйәклеһегеҙ! Ултырығыҙ, һеҙ миңә ҡамасауламайһығыҙ!

- Мишәйтәм тиҙер, – ти быларҙы күҙәтеп ултырған Таңһылыу апай.

Тынғыһыҙ бабайҙың да сираты етте.

- Һеҙгә юллама кәрәкме әле, апа? Беренсегә йыйындығыҙмы?

- Эйе, баштап килеп торам. Әле һорашырға ғына ине нимәләр кәрәк икәнен.

Азалия Римовна, онотмаһын өсөн, ҡағыҙ киҫәгенә кәрәкле документтар исемлеген яҙып бирә.

- Ниндәй көндә килһәгеҙ ҙә, көтәбеҙ...

Яңылышып бүлмәне бутап килеп инеүселәр ҙә етерлек. Бына әле бер ағай килеп инде:

- Һеҙҙең бүлмәгеҙҙә бирәләрме балалар аҙығын? – ти. Уны кәрәкле еренә өйрәтеп ебәрҙеләр:

- Алдында кеше иң күп торған ишеккә инегеҙ, йәме.

Бына тағы ишектән таныш йөҙ күренде. Рөстәм икән.

- Паспортымдың күсермәһен генә эшләп сығайым әле? – ти ксероксҡа ымлап. Кеше күп булһа ла, егеттең дә үтенесен кире ҡаҡмайҙар.

Халыҡ араһында ҡайнап, әллә күпме хәбәр ишетергә лә тура килә. Ана, Аһылай яҡтарынан килгән бер апай ауылының яңылыҡтарын һөйләй:

- Беҙҙең эргәнән итальян байы ер һатып алды. Тотош ауыл шуны һөйләп шаулай...

Былтыр йыл аҙағында интернет селтәрендә (http://bashgazet.ru/blog/archives/3429 – бында ла Аһылай халҡының проблемалары күтәрелгән) уҡыған хәбәр иҫемә төшә. Магнитогорск ҡалаһынан – 50, Асҡарҙан – 90, Белореттан 40 км алыҫлыҡта ятҡан был ауыл янындағы ғәүғә аша бөтә донъяға билдәле профессор Менегеттиҙың резиденцияһы төҙөләүе хаҡында ине ул. Имеш-мимештәр буйынса, олигархтарҙы консультациялаусы был бәндә башҡорт ерендә үҙенең лекцияларын уҡымаҡсы. Уның уңыш сере хаҡындағы лекциялары Европа һәм Рәсәй байҙары араһында бик популяр. Рәсәйҙә бындай резиденциялар тағы ла ике урында бар – Санкт-Петербург һәм Екатеринбург янында. Антонио Менегетти – итальян психологы, фәйләсуф, рәссам, онтопсихологияға* нигеҙ һалыусы. 1998 йылда Италия хөкүмәте онтопсихологияны хәүефле культтар рәтенә индерә. "Ҡатын-ҡыҙ ялҡаулыҡтан ғына бала таба", "Балаға көнөнә 15 минут ата-әсәһе менән аралашыу етә, унда ла ата-әсәһе яҡшы кәйефтә булһа ғына", "Ғаилә өсмөйөшө юҡҡа сығасаҡ" тип өйрәткән "гений" ниндәй йоғонто яһар башҡорттар күпләп йәшәгән был төйәккә? Һәр ваҡыттағыса, шау-шыу күп, ә эш күрһәтеүсе юҡ. Өфөлә лә әллә ниндәй болғаныштар булып ята, ә халыҡтың проблемалары һаман ситтә ҡала килә.

Берауыҡ ваҡытҡа борсоулы күренгән йөҙҙәр апай сығып китеү менән кире элекке хәленә ҡайта. Эш ҡайнай, донъя хәстәре барыһын баҫа.

Бына тағы ишек асылды. Был юлы бүлмәгә бәләкәс кенә ҡыҙсыҡ килеп инде. Регина – Азалия Римовнаның өлкән ҡыҙы. Таһир Күсимов исемендәге Асҡар гимназияһында икенсе синыфта уҡый. "Төшкә хәтлем буш була, шуға бейеү түңәрәгенә яҙҙырҙым", – ти әсә, тәтелдәп яңылыҡтарын һөйләгән ҡыҙына ҡыуанып. Регина килгәс, ҡумаҡлашеп торт менән сәй эсеп алдыҡ – Земфира апайҙың тыуған көнө булып сыҡты бөгөн.

- "Чтение"ңды онотма, уҡы, йәме, ҡыҙым, – тип оҙатып ҡалды әсәһе. – Гәүһәр апайыңа ин, юл ыңғайы берәй таксиһына ултыртып ебәрер.

Кеше булмай торған арала, бүлмәлә хәбәр йорт-ҡура тирәһендә әйләнә.

- ...Беҙҙең ауылда бер ҡатын халыҡтан йомортҡаһын, һөт-майын һатып ала ла, городка апарып һата. Ауыл халҡына ыҙалап йөрөйһө лә түгел, – тип ишетеп ҡалам Земфира апайҙың һөйләгәнен. "Город" тип беҙҙең яҡта Магнитогорск ҡалаһын күҙ уңында тоталар.

- Премия булмаҫ, тиҙәр...

- Алло, Гәүһәр апай, ҡайттымы минең ҡыҙ? ... Алло, Регина, ҡайттыңмы? Атайың өйҙәме? – Азалия апай борсолоп ҡыҙын белешә.

** Онтопсихология – итальян авторы Антонио Менегеттиҙың дини-фәйләсуф тәғлимәте. Нигеҙ һалыусының һүҙҙәре буйынса, был тәғлимәт үҙ эсенә психик процестарҙы тикшереү эштәрен ала. Автор раҫлауынса, онтопсихология – кешенең тормош, ысынбарлыҡ менән аңлы бәйләнешенең нигеҙҙәрен һалыусы көнкүреш психологияһы. Онтопсихология хәҙерге көндә билдәле фәндәрҙең береһенә лә инмәй. – Википедиянан.*

Ә тышта болотһоҙ кояшлы көн. Тәҙрәнән юл ашаһындағы универмаг, почта бүлексәһе күренә. Йәйәүлеләр күп тә түгел, ә бына банк, универмаг ҡаршыһына туҡтаған машиналарҙың һанына иҫ китерлек.

## 11:11

Рөстәмдең әсәһе килеп инде. "Улым һеҙҙә бер ҡағыҙҙы онотоп ҡалдырған булһа кәрәк, алһыу төҫтә", – ти. Күмәкләп ҡағыҙ араһынан ҡағыҙ эҙләйҙәр. Азалия Римовна йүгереп хужаға барып килде. Унда ла юҡ. Тыңлап ултырһаң ҡыҙыҡ. Бербереһенә ҡушаматтар менән дә өндәшәләр.

- Һаумыһығыҙ, таяҡҡа ғаризаны ошонда яҙалармы?

- Йөҙөгөҙ таныш, элек килгәнегеҙ бар инеме?

- Юҡ, мин Кейекбаева Нәбирә булам, Ишколдан. Һеҙгә барырға танышым өйрәтте.

- Дөрөҫ килгәнһегеҙ, әйҙәгеҙ, ошо бланкты тултырығыҙ.

- Яҙа белерменме икән?

Земфира апай Азалия Римовнаға телефон трубкаһын һуҙа.

- Яғымлы тауышлы бер егет һине һорай.

Ҡустыһы икән.

## ТӨШ

Ниһайәт, көтөп алған төшкө аш етте. Апайҙар бер-бер артлы көҙгө алдында биҙәнеп-төҙәнеп сығып киттеләр. Азалия Римовна менән икәүләп ҡайтырға йыйындыҡ.

- Ярай, һау тор, – тип бүлмәһен бикләп ҡуйҙы Азалия апай.

- Бүлмәнең эйәләре менән һаубуллаштығыҙмы әллә? – тип йылмайып ҡуйҙым, эштән ҡайтҡан һайын "Матбуғат йорто"ноң эйәләре менән һаубуллашҡан таныш журналист апайҙы хәтерләп.

Тышҡа сыҡтыҡ. Көндөң матурлығы! Бөгөнгө ҡояш нурҙары бүлмәлә өшөп-туңып ултырғандарҙы рәхәтләндерер өсөн генә яралған, тиерһең. Туҡталышҡа табан атлаған саҡта юл ыңғайы "Алтынай" кафеһына һуғылабыҙ.

- Кафе ла, уның янындағы таксиҙар ҙа – ике туған Гәүһәр апайымдыҡы. Әле ҡустым уға ярҙамлашыр өсөн килгән. Хәҙер янына инеп кенә сығайым да...

Туҡталышҡа етмәҫ борон тағы бер ергә туҡтаныҡ – аҙыҡ-түлек кибетенә. Асҡарҙың Көнсығыш микрорайонына йөрөгән берҙән-бер газелдә көткән арала ла тынғы юҡ. Ҡайҙа эшләгәнен белгән кешеләр әле был, әле теге йомош менән янына киләләр. Азалия Римовна һәр береһенә ихлас, матур яуап ҡайтара, белгәненсә өйрәтә.

- Мәктәптә эшләгән сағығыҙҙы һағынмайһығыҙмы? – тим, беҙҙең ауыл мәктәбендә эшләгән саҡтарын хәтерләп.

- Һағынам әлбиттә, – тип бер аҙ моңһоуланып китә героиням. – Үҙем уҡытҡан балалар хәҙер танып хәл белешеп китһәләр, бигерәк тә.

Азалия Римовна – төп белеме буйынса уҡытыусы.

- Асҡарға күсеп килгәс, мәктәптә эш булмағанға ғына ошонда урынлашҡайным. Нимәһе рәхәт, бында мәктәптәге кеүек өйгә эш ҡайтмай, дәфтәр тикшерәһе лә түгел. Шулай ҙа тәүҙә бик һағындым. Бына беҙҙең Көнсығыш микрорайонында ла мәктәп төҙөп яталар, бер уйлаһаң, балалар уҡытыуға кире ҡайтырға мөмкинлек тә бар. Тик мин ҡайтмаҫмын ул...

Көтөп алған газелебеҙ ҙә килеп етте. Күҙ асып йомғансы, ҙур ағас йорт ҡаршыһында инек инде. Күҙгә салынғаны – урамда яңы йорттар ғына. Азалия апайҙарҙың әле ҡапҡалары юҡ, һарайҙәлән дә күренмәй, әммә йорт шәп. Өй эсендә беҙҙе ике ҡыҙ һәм йорт хужаһы – Радмир ағай ҡаршы алды. Сәй ҡайнағансы, Азалия апай йүгереп йөрөп Регинаһын уҡыуға әҙерләне, сәсен үрҙе, әйберҙәрен йыйышты.

- Әсәй, минең башлығым ҡайҙа ул?

- Ҡыҙым, мин һинең башлығыңды эшкә кейеп йөрөмәйем бит! Каткаға ла барырға булғас, иҫке курткаңды кей, яңыһын йыртып ҡуйырһың. – Үҙе шул арала зарланып ала. – Балаларҙың кейем-һалымы хәҙер ололарҙыҡына ҡарағанда ла ҡыйбатыраҡ бит...

Радмир ағай телевизор ҡаршыһына барып ултырҙы. Ә беҙ дүрт йәшлек Айлина менән икәүләшеп ғаилә фотоальбомын ҡарайбыҙ. "Бына минең әсәйем", "быныһы атайым", – тип һәр фотоға аңлатма бирә. Үҙе бигерәк тиктормаҫ, шаян. Регина менән сағыштырғанда, кесе ҡыҙҙары ут бөрсәһе төҫлө.

Сәй өҫтәле артында һүҙ студент йылдары, йәшлек, ғаиләгә үрелеп ялғанды. Өҫтәл – бәләкәй балалары булған өй бит – тәм-томдан һығылып тора. Ҡай аралалыр Азалия апай тәмле итеп картуф иҙеп бешерергә лә өлгөргән.

- Балаларым минең "студент" ҡыҙҙар ул. Икеһе лә студент сағымда тыуҙылар. Тәүҙә Сибайҙа педколледж тамамланым. Һуңынан юғары уҡыу йортон. Әсәйем үҙе уҡытыусы булғанғамы икән, "пед"ҡа барыуыма бик ныҡ ҡаршы торғайны. Медицина юлынан китергә лә мөмкинлек бар ине, ҡандан ҡурҡҡас, баш тарттым, – ти әңгәмәсем, хәтирәләргә бирелеп. – Сәй әҫе, һыуыҡ һыу ҡойоп алайым әле.

Минең аптырағанды күреп, аңлата:

- Әлеге лә баяғы студент йылдарынан ҡалған унһы ла. Әҫе сәй эсә алмайым.

- Эсегеҙ ауыртмаҫмы?

- Юҡ, өйрәнелгән.

- Малай алып ҡайтырға уйламайһығыҙмы? – тип иплән кенә һорашам.

- Әлбиттә, Радмирға ярҙамсы ул үҫтерергә ниәт бар, – ти хужабикә.

- Хужалык тирәһендә кайһылай өлгөрәһегеҙ?

- Уныһы барыһы ла Радмирҙың елкәһендә. Ҡура булмау сәбәпле, әле мал аҫрамайбыҙ. Ләкин ниәттә бар. Бында килеп йәшәй башлауыбыҙға ла күп түгел бит. Әммә йәшелсә-емеш, картуф үҫтерәбеҙ. Бына былтыр кыҙык өсөн генә карбуз сәсеп карағайным. Туғыҙын үҫтереп алдык, шундай ярмалы, һутлы булдылар, әллә үҙебеҙҙеке булғанға инде. Бындағы ерҙәрҙең хужалык өсөн насарырак булыуына карамаҫтан, тиреҫ һатып алып түктереп, ситтән тупрағын ташып эшкәртәбеҙ. Бушка ғына "Ҡорьятмаҫ" тимәгәндәрҙер инде был ерҙәрҙе. Ҡаҙмашта тағы бер өйөбөҙ бар. Ул әлегә буш тора. Шулай, тормош иркә кыҙҙы ла донъя көтөргә өйрәтте.

Сәй эсеп бөтөүгә, йөрөп инәбеҙ тип сығып киткән Радмир ағай менән Айлина ла кайтып инде. Айлинаның нимәгәлер эсе ауыртыбырак тора. Әсәһе кыҙын еңелсә генә тиргәп, дарыу ашата:

- Әйттем бит мин һиңә тәм-томдо күп ашама тип! – Бәләкәй сакта эс ауырткан сакта әсәйем эсте ыуалай торғайны. Унан ғына ауыртыу үтмәгәндер инде, әммә мин тынысланып йоклап китә инем. Әле Азалия апайҙың шулай һыйпап алыуына Айлина ла диванға рәхәтләнеп һуҙылды.

- Ятып тор, кыҙым, миңә эшкә китергә кәрәк... Нык ауырта башлаһа, атайыңа әйтерһең.

Туктальшка барғанда ла һүҙ кыҙҙары тирәһендә урала:

- Айлина тотошлайы менән атаһының кыҙы булып үҫте. Башка балалар берәй нәмә кәрәк булһа, ғәҙәттә, әсәһенән таптыралар. Ә был юк, атай ҙа атай... "Атай, сәй эсәм", "Атай, тышка сығайык" – телендә гел атаһы.

Ҡыҙҙарының исеме хакында һорашам. Регинаның мулла куштырған исеме Рәғилә. Айлина – ай йөҙлө тигәнде аңлата икән.

Баяғы ултырып кайткан газелебеҙ менән кире юлланабыҙ.

- Әлдә ошо газель йөрөй башланы әле беҙҙең микрорайонға. Әтеү элек йәйәү тәпәйләргә тура килә торғайны. Эшкә генә байтак атлайһы, тағы ла бәләкәс кыҙҙы балалар баксаһына ла илтәһе... Коляска этеп кышкы һыуыкта йөрөгән сактар әле булһа иҫтә.

## 14:00

Бер минутка ла һуңламай эш урынында инек инде. Бүтән хеҙмәткәрҙәр ҙә үҙ урындарында. Тағы ла кешеләр, кешеләр, кешеләр...

- Мөмкинме? – Бер апа ишектә. – Миңә Азалия кәрәк ине.

- Мин – Азалия.

- Санаторийға путевка...

- Бына ошо кағыҙҙарҙы тултырығыҙ... Тәк, һеҙҙең профиль... Ҡайһы ерегеҙ ауырта?

- Инфаркт булғайны.

- Ҡыҙҙарға күп карайһығыҙҙыр, – тип шаярта өйгә кайтып килгәндән һуң күңеле күтәрелеп киткән Азалия Рим кыҙы, сал кереүгә карамаҫтан, бөҙрәләнеп торған сәсле апаны.

## КИС

Эштә ултырһалар ҙа, катын-кыҙҙың күңелендә – ғаиләһе, балалары. Земфира Мөнир кыҙы дауаханала яткан балаһын хәтеренән сығара алмай, һәр минут һайын, нишләй икән, тип борсола. Таңһылыу апай Өфөлә авиация университетында имтихан биреп яткан улының хәлен һорашам тип шылтырата алмай этләнә. Азалия Римовнаның уйында – ауырыкһып калған кыҙы.

- Алмай ине телефонын, килде SMS – был абонент һеҙҙең акса һалыуығыҙҙы һорай, ти. Иртәгә кайта инде – военкоматка барырға повестка килгән үҙенә. Хәҙерге заман балаларына аптырайым, – тип төпкә төшөп китте Таңһылыу апай. – Ата-әсәһе өрмәгән ергә ултыртмай. Бына минең малай ҙа кайтһа, атаһы нишләргә белмәй китә инде – уныһын бешер, быныһын бешер тип аптырата башлай. Шул малайҙы ыҙалаткансы, үҙем генә укыр инем инде, тип ебәрә. Ҡайтһа, йүгереп йөрөп мунсаһын яға башлай, әйтерһең, колғалай малайы үҙе яғып инә алмай!

- Укырға ингән сактарында арттарынан йөрөү бер кайғы инде, – тип күтәреп ала бүтәндәр. – Ҡайҙа ул беҙҙең заманда! Атай менән әсәй укырға ингәнде белмәй ҙә кала торғайнылар. Байрамға кайтканда ун тәңкә бирһәләр шәп әле ул.

- Ә мин иркә кыҙ булдым. Колледжға ингәндә лә, аҙак Өфөлә укығанда ла, әсәйем гел янымда йөрөнө. Шулай баҙнатһыҙ булғанмындыр инде, – тип хәтерләй Азалия апай.

Кәкрегә* Земфира апай табын әҙерләп ебәрҙе тыуған көнө уңайынан. Духовкала бешерелгән тауык, әсе сәй, һут, тәм-том менән күңелле итеп тамак ялғайбыҙ, кырк йәше менән ихлас котлайбыҙ.

Ишек тағы асылды. Был юлы тупһала тукһан йәшлек әбей. Хеҙмәткәрҙәр эй аптырайҙар үҙенә. Иҫ китерлек тә: тукһан йәшеңә етеп, кыбырлап йөрөү генә түгел, дүртенсе катка менеп, һыу буйы сиратты үтеп, үҙеңә кәрәклене йүнләп йөрө әле! Ҡағыҙҙарын йүнәтеп, рәтләп биргәс, әбей кыуанып, минең кеүек тукһанға етегеҙ, тип теләк теләп, шатланып сығып китте.

- Ә һеҙҙең эш көнө нисәгә тиклем?

-17:20.

- Ни өсөн?

---

** Кәкре – төшкө һәм киске аш араһындағы сәй.*

- Сөнки ауыл ере! Ә былай, ысынында бишкә тиклем генә эшләргә тейешбеҙ.

Артабан килеүселәр булманы тиерлек. Күбәрәген бөткәһеҙ ҡағыҙ эше менән булыштылар. Йылғыр Тәғзимә-Таня апай мине лә эшкә егергә уңайын тапты. Уның ҡағыҙҙарын тултырышырға ярҙам иттем аҙ ғына булһа ла. Нисек ялҡмайҙар икән көнө-төнө шулай ниҙер яҙып, урындарынан ҡуҙғалмай ҙа ултырып? Хәйер, ялҡһалар ҙа ни эшләһендәр. Ауылда әле эш һайлау һирәктәр өлөшө. Күптәр булғанына йәбешеп ятырға тырыша.

Бына эш көнө тамам. Бүлмәләштәре күптән инде ҡайтырға сыҡты, ә Азалия Римовна һаман урынынан тора алмай. Бөгөнгө көндөң эшен рәткә килтерәйем, ти. Етмәһә, бер-ике көндән ошоларҙы тотоп Өфөгә китергә үҙенә.

Эш көнөнөң иң аҙағында, инде барыһы ла сығып киткәс, янына хужаһы һуғылып китте.

- Бөгөнгө көндән йөкмәтелгән яңы бурысың нисек, башҡарып буламы?

- Эйе, әгәр ҙә барыһы ла дөрөҫ эшләнһә, әллә ни ауыр ҙа түгел.

- Кесаҙна Өфөгә ҡуҙғалабыҙ, уныһын хәтерләйһеңдер?

- Әлбиттә.

Эшен тәки аҙағына еткерә алманы. Ярай, өйҙә бөтөрөп ҡуйырмын инде, тип һалып алды. – Бая ғына мәктәптән айырмалы рәүештә бында өйгә эш ҡайтмай, ти инегеҙ... – тип шаяртам. Арыуына ҡарамаҫтан, ихлас көлә.

Дүртенсе ҡаттан төшкән сакта баяғы тукһан йәшлек инәйебеҙ тап булды. Азалия Римовна уны күреп ҡалыу менән, ихласлығына килеп, баҫҡыстарҙан төшөргә ярҙам итте. Әбейҙең рәхмәтенең сиге юҡ.

- Беҙгә ғәриптәр, оло йәштәгеләр күп килә. Бүлекте беренсе ҡатҡа күсерһәләр бик яҡшы булыр ине лә...

Шул уҡ газель менән кире Көнсығыш микрорайонына юл тотабыҙ. Беҙҙе был юлы Радмир ағай Айлина менән генә ҡаршыланы, Регина әле мәктәптән ҡайтып етмәгән. Күмәкләп ултырып сәй эсәбеҙ. Азалия апай, бик арыһа ла, яҡындарына бөгөнгө көндөң яңылыҡтарын һөйләй.

## 20:00

**ҠУНАҠСЫЛ ҒАИЛӘ МЕНӘН ХУШЛАШЫП, ҠАЙТЫРҒА СЫҠТЫМ. ТИМӘК, БӘХЕТ ӨСӨН ЫСЫНЛАП ТА КҮП КӘРӘКМӘЙ. ЭШЛӘГӘН ЭШЕҢДӘН ТӘМ ТАБА БЕЛҺӘҢ, ҒАИЛӘҢ ТҮҢӘРӘК БУЛҺА, КҮҢЕЛЕҢ ДӘ БӨТӨН ИКӘН. АЗАЛИЯ АПАЙ ҮҘ МИҪАЛЫНДА РАҪЛАНЫ БЫЛАРҘЫҢ БАРЫҺЫН БӨГӨН.**









*Миңзәлә АСҠАРОВА, m.askarova2011@yandex.ru*

Лариса АБДУЛЛИНА

# ОНОТОЛОУ ДАРЪЯЛАРЫН БЕЛӘМ – УЛ ХЫЯЛҒА ИНЕП ЮҒАЛЫУ



## АҪАЛЫ БАЛАҪ

Нәнәйемдең туй күлдәге бит ул –
Фатир түрҙәрендә балаҫы.
Ете төҫтә балкып ята ана,
Хәҙер уны каййан алаһың?..

Һәр төҫөнә мәғәнәләр биреп,
Һуктырғандыр әле нәнәйем.
Мин бит уның балаһынан былай
Үҙ янында үҫкән тәнәйе.

Үҙе көткән һарыктарҙың йөнөн
Сағыу төҫкә манған сактарҙа
Изге теләктәрен теләгәндер,
Мин булһам да алыҫ яктарҙа.

Аҫалы ла балаҫ алған кыҙҙың
Аҫыл була, имеш, яҙмышы.
Рәхмәттәрең, нәнәй, – балаҫыңда,
Яҙмышымда һинең алғышың.

Өфө түрҙәренә элерлек ул,
Мең алғышлы булыр был кала.
Үҙ кыйығын табып төпләнерҙәр
Ауылдарҙан сыккан һәр бала.

Борондан ук нәнәйҙәре шулай
Ҡәҙер иткән бала балаһын.
...Үҙең күрмәһәң дә төҫөң булып,
Фатирымды биҙәй балаҫың.

## ИЛЕМ ҠАЙҘА?

Мин илһөйәр милләт кыҙы булам,
Ҡанда йәшәй ерем хәтере.
Ошо тойғо беҙҙе халык итә,
Бөгөн бармы аҫыл кәҙере?

Есенинлы Рәсәй кайҙа һуң ул?
Ахматова унда якланған.
Даһиҙары хөкөм ителеп тә,
Килер быуын уны аклаған.

Бөгөн нимә?
Аклау, яклау түгел,
Нәфрәт хисе хатта калмаған.
Әйтерһең дә, илде иргәйелдәр,
Битарафтар, колдар яулаған.

Башкортостан! тиеп башым эйәм,
Мин терәйем уға иңемдә.
Ҙур Ватанда берәҙәклек шомо –
Тоймайым мин артта илемдә...

## РӘШИТ АҒАЙ СОЛТАНГӘРӘЕВ ИҪТӘЛЕГЕНӘ

Әллә ниндәй заманалар килде,
Әллә булған ул гел шулай.
Салауаттар кылыстары кында,
Әпкәләйҙәр тәхет, таж даулай.

Кемдәр күңеленә һүҙем һыйыр?
Өмөт менән кемгә бағайым?
Һөрләгәүҙәр, төңөләүҙәр баҫһа,
Ҡалырмынмы мин дә һағайып!

Дөрөҫләктәр әллә кәрәкмәйме?
Баһаланмаймы ни ғәҙеллек?
Уйланылған хәйлә-мәкерҙәргә
Бармы беҙҙең көрлөк, әҙерлек?

Кемде сакырһам да, шуныһы – юк,
Намыҫ һатыу түгел яңылык.
Зиһендәре аяҙ милләттәштең
Һәр береһен баҫкан яңғыҙлык.

Ҡоштар ҙа бит күмәкләшеп кайта:
Яҙ иртәһе канат осонда.
Миҙгел менән дәртем ташырмы икән.
Ҡыҫыр өмөт юкка осонһа.



Айырылған күстәй был халыктың
Юғалырмы икән үҙ төҫө?
Һүрелгәндә күңел усактары
Баһалаусы бармы һүҙ көсөн?

Айырылған күстәй ул-кыҙҙары
Һибелгәндәр донъя йөҙөнә.
Кем кулына илең-ерең кала –
Тура кара балаң күҙенә.

Ымһындырыр Мәскәү, Питерҙары...
Беҙҙең зиһен кәрәк был ергә.
Ҡаның тамған илдә намыҫ менән
Яҙһа ине ғүмер итергә.

Беҙҙең хистәр кәрәк ошо илгә –
Булһам икән унда мин дә үҙ.
Тағы болғауырҙар аңды бутай –
Рәшит ағай, кәрәк һинең һүҙ!

* * *

Үләһеләр килә, тинем,
Сәбәләнеп һис юкка.
Үҙемде үҙем яндырҙым
Яһалма ялкын утта.

Күтәрә алмаһаң бәхетте,
Һынау ҙур өлөш булә.
Үлем тындары һиҙелде –
Минең йәшәгем килә.

## ДУҪЛЫҠ КӘҘЕРЕ

Күптәр менән хәҙер мин дуҫ түгел,
Мин күптәргә түгел әхирәт.
Шакымайым дуҫлык капкаларын,
Вәғәҙәләр биреү – акиәт.
Юк, кәрәкмәй эштә әшнә булыу,
Башты башка терәп сер бүлеү,
Абынғанды ғына көттө бераү,
Был көн булды – үлеп терелеү.
Бисә төҫлө кай бер ирҙәре лә,
Ир холокло бәғзе катындар.
Мин белгәйнем дуҫлык кәҙерҙәрен,
Дәғүәгә шуға хакым бар.
Хәйер, хәҙер ниндәй дәғүә ти,
Шакымайым дуҫлык капкаһын.
Тойғо кәҙерҙәрен белмәгәндәр
Минең ишекте лә какмаһын.

## БИШЕНСЕ ТАРАФ

Онотолоу дарьяларын беләм –
Ул хыялға инеп юғалыу,
Төҫһөҙләнгән мәлдә төҫтәр эҙләү,
Булмышыңдан үҙең үк алыу.

Онотолған мәлдәр яуап көтә
Бушап калған сакта дүрт тараф.
Ә бишенсе тараф арбай, әйҙәй,
Намыҫыңа тура төҙ карап.

Әйтерһең дә терегөмөш кеүек
Тараланың...
Йәнә һин бөтөн.
Тик һүҙ менән яҙып булыр кеүек
Шул бишенсе тараф һүрәтен.

## БАБИЧКА

Шиғырҙарың “кейеп” караным мин,
Шиғриәтең йәнем яуланы.
Ғәййәр рухың бик килешеп китте,
Мөхәббәтле моңоң яраны.

Көлә-көлә шиғыр ятланым мин,
Илай-илай шиғыр һөйләнем.
Йән кылдарын мандолина итеп,
Шул дәүерҙең көйөн көйләнем...

Ни ғәләмәт!
Мең ғазапка сумып,
Мең бәхеткә шул сак төрөндөм.
Һинең йырың уртак бер юл булып,
Айың яктыһында күренде.

Нур сәсерлек усак кабынғанда,
Ҡабул кыла шағир яҙмышын.
Быуындарға быуындарҙы бәйләп,
Быуаттарға быуаттарҙы бәйләп,
Милләт үҙе йырҙар яҙышыр.

Бөтәһе лә үтә икән, беләм,
Тик йыр кала!
Ҡала мөхәббәт!
Шиғырҙарың “кейеп” карағайным,
Йөрәгемдә калды йәрәхәт...
Бер йәнемдә мең-мең йәрәхәт!..



*Рамай ҠАҺИР*

# ДЕКАБРИСТКА

Хикәйә

**1990** йылдың ҡояшлы матур йәйе ине. Өйҙә гәзит-журналдар ҡараштырып ултырһам, сәйер генә бер иғлан күҙгә салынды: “Миңә 28 йәш. Геолог-разведка экспедицияһында эшләйем. 25-35 йәштәрҙәге ҡатын-ҡыҙ менән танышып, ауыл ерендә матур итеп донъя көткөм килә. Иренән айырылған, балалы ҡатындар яҙһа ла була. Иркутск ҡалаһы, Писарев урамы, 13, Каширов Радик”.

Ниңә был егет үҙенә тиң ҡыҙҙар таба алмай икән, тип уйлап ҡуйҙым. Үҙем шул уҡ көндә фоторәсемем менән ҡыҫҡа ғына йөкмәткеле хат яҙып һалдым.

“Һаумыһығыҙ, Радик! Миңә 31 йәш. Кейәүҙә булманым. Екатеринбург ҡалаһында атай-әсәйем менән бергә йәшәйем. Аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһында эшләйем. Буйым – 151 см. Музыка тыңларға, һүрәт төшөрөргә яратам. Әгәр теләгегеҙ булһа, яуап яҙығыҙ. Роза”.



Яуап килеренә өмөтләнмәһәм дә, бер аҙна үтеүгә Иркутскиҙан фоторәсем менән хат килеп төштө. Фотола – сик буйы ғәскәрҙәре кейемендә төшкән мыкты кәүҙәле, аҡ йөҙлө, зәңгәр күҙле бынамын тигән шәп егет!

Шатлығымдың иге-сиге юҡ, күңелем ҡанатланып китте. Эй, Аллаҡайым, ҡөҙрәтең киң шул! Ҡыуаныстан шаян күбәләктәй осоп-ҡунып ҡына йөрөйөм. Өйҙә – әсәйем, эштә әхирәттәрем аптырай.

- Һиңә, Роза, нимә булған? – тиҙәр. Күҙҙәремдән сихри нур урғыла, йөҙөмдә ҡояш балҡый. Ә Радиктың хаты һуң, яҙған хаты ниндәй йылы, ниндәй мауыҡтырғыс!

"Һаумы, Роза! Исемең есемеңә тура килеп тора икән! Рауза гөләндәй, матурһың. Буйыңдың бәләкәй булыуына һис тә ҡайғырма, мин һине ҡулдарымда ғына күтәреп йөрөтөрмөн! Әгәр мөмкин булһа, бөгөндән үк эргәңә осоп барыр, хуш еҫле ҡара сәстәреңдән, нурлы күҙҙәреңдән үбер инем. Тик әлегә юлым төшмәй тора. Ләкин һинең менән танышыуым – минең өсөн ҙур ҡыуаныс, бөтмәҫ шатлыҡ! Һине бик нык оҡшаттым, ҡояшым минең! Зинһар, хаттар яҙып тор йәме, хат эсенә буш конверт та һал, сөнки беҙҙең тайгала конверт табыуы ҡыйын. Һинең биттәреңдән үбеп, ихлас күңелдән, Радик".

Тайга ҡыҙырып алтын-көмөш эҙләгән танышыма аҙна һайын хаттар яҙам. Фоторәсеме ҡулдарымдан төшмәй. Үҙемдең хыялым – тиҙерәк уның менән осрашыу. Мин, һантый, донъя матурлығын тик сәскә-гөлдәрҙә күргән күбәләктәй, тормоштоң мәғәнәһен уның яҙған тылсымлы, иҫерткес хаттарында күрәм. Их, тиҙерәк осрашһаҡ ине... Ошо матур уй-хыялдарҙан ғына бөтә тәнем буйлап ниндәйҙер рәхәтлек тулҡындары йүгерә. Бит алмаларым ҡыҙарып, алһыуланып китә, тын алышым йышая. Үҙ-үҙемдән оялып та ҡуям...

Сентябрь башында отпуск алдым да: "Әллә эргәңә киләйемме?" тип хат яҙҙым. Яуап хатын илай-илай, ҡалтырай-ҡалтырай уҡыйым: "Роза! Йөрәккәйем минең! Әгәр хәлеңдән килһә, тәүге көндәрҙә үк янына барып еткән булыр инем. Бына, бөгөн һиңә, кәҙерлем, ҡыйын булһа ла, дөрөҫөн яҙам. Зинһар, үҙеңде ҡулға ал, тыныслан. Мин геолог булып эшләмәйем, ә холоҡ төҙәтеү колонияһында яфа сигәм. Егерме дүрт йәшемдә йәшлек хатаһы менән енәйәт ҡылып ошонда килеп эләктем. Тәүҙә үк дөрөҫөн яҙмағаным өсөн, зинһар, кисерә күр мине, ғәфү ит. Сөнки һине мәңгелеккә юғалтырмын тип ҡурҡтым. Роза, ә һинһеҙ мин бары тере мәйет кенә. Сөнки ошо кескәй генә арауыҡта һине шундай нык яратырға өлгөрҙөм. Һин минең күңел түремдә мәңгелеккә урын алдың. Һинһеҙ бер көн дә, бер сәғәт тә йәшәй алмаясаҡмын. Роза, әгәр аҙ ғына сабыр, түҙемле була алһаң, был ҡурҡыныс ваҡиға беҙҙең һөйөүебеҙгә кәртә була алмаҫ ине. Миңә иреккә сығырға күп ҡалманы – бары дүрт йыл ғына. Әгәр, һылыу, теләгең булһа, беҙ бында ЗАГС-та яҙылышып, никахҡа инеп, ярты йылға бер тапҡыр өс тәүлек "свиданка"ла осраша, бергә була алабыҙ. Бәлки, бөтәһе лә һәйбәт барһа, мине алдараҡ иреккә сығарып та ҡуйырҙар... Башҡортостандың Әҡҡүл районындағы бер төпкөл ауылда әсәйем йәшәй. Унда барып әсәйем менән танышып, бер-ике көн ҡунаҡ булып, беҙҙең бергәбергә һөйөнөшөп-һөйөлөшөп йәшәр ауылыбыҙҙы, йортобоҙҙо күреп йөрөп ҡайта алаһың. Ә әлегә иҫән-һау бул, һиңә түҙемлек теләп, һине яратып ҡалыусы Радик".

Их, Радик, ниндәй йәш, аҡыллы егетһең, ә үҙең төрмәгә ултырырға ла өлгөргәнһең... Күҙҙәремдән сөбөрләп әсе йәштәр тама. Йөрәгемә ялҡын һалғас, ниңә уға боҙло һыу һибәһең инде?! Ниңә төрмәлә булыуыңды баштан уҡ яҙманың, ниңә?! Илай торғас, күҙ ҡабаҡтарым шешенеп бөттө. Үҙемде тағы ла нығыраҡ бәләкәсәйеп ҡалғандай тоям. Ярай әле әсәйем сабыр, ул тынысландырҙы.

- Ҡыҙым, улай үҙ-үҙеңде бөтөрөп, өҙгөләнмә. Яҙмыштан уҙмыш юҡтыр. Бәлки, өлөшөңә төшкән көмөшөң шулдыр, балам. Теләйһең икән, эргәһенә барып йөрө. Кеше булһа, ҡәҙереңде белер. Ҡай саҡтарҙа дүрт аяҡлы мал да һөрөнә бит. Уның да бар өмөтө, бәлки, һиндәлер. Улай төшөнкөлөккә бирелмә, ҡыҙым, – ти.

...Тыуған сағымда уҡ Хоҙай Тәғәлә миңә күп нәмәне йәлләп биргән, шикелле. Яҡты донъяға килгәнемдә ни бары 1800 грамм тартҡанмын. Шуға-лырҙа буйға бәләкәс, сибек кенә ҡыҙ булып үҫтем. Балалар баҡсаһына, аҙаҡ мәктәпкә йөрөй башлағас, үҙебеҙҙең Шарташ биҫтәһендә йәшәүсе тиҫтерҙәрем ошо сәбәп арҡаһында мине "Орсоҡ-борсаҡ, бәләкәй ҡурсаҡ!" тип үсекләй торғайны. Мине тик әсәйем генә аңлай, йәлләй ине.

- Ҡайғырма, ҡыҙым, алтын ҙур булмай ул. Иң мөһиме күңелең киң, саф килеш ҡалһын! – тип йәшәйешемә дәрт-сәм өҫтәй ине.

Шулай ҙа бәләкәстән үҙ-үҙемә йомолоп үҫтем. Күберәк ваҡытымды өйҙә, үҙемдән дүрт йәшкә бәләкәйерәк Рита исемле туғаным менән уйнап үткәрҙем. Аҙаҡ, ҙурая төшкәс, һүрәт төшерергә әүәҫләндем.

Инде буй еткергән ҡыҙ булһам да, миңә иғтибар итеүсе, күҙ һалыусы егеттәр осраманы. Апаймдар йәшәгән Һандуғаслы районына ҡунаҡҡа барған саҡтарымда ул мине ауылда йәшәгән буйҙаҡ егеттәр менән таныштырырға маташты. Берәйһе менән дуҫлашып өлгөрәмме-юҡмы, ауылда был хаҡта хәбәр сығып, егеттең яҡындары

беҙҙең дуҫлыҡҡа ҡаршы сығалар ҙа ҡуялар ине. Сәбәбе – минең артыҡ бәләкәс буйлы, тәҫ-башҡа сибәр булмауым...

Әле лә үҙемә йомолоп йәшәйем. Ир-аттың миңә күҙ һалмауына, иғтибар итмәүенә өйрәнеп бөткәнмен. Көҙгө алдына баҫһам, үҙемде мәктәптә уҡыған бала төҫлө тоям. Сөнки ошо бәләкәс буйым арҡаһында күптәр мине ҡыҙ балаға тиңләй. Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөнгө көндә кейәүгә лә сығырға ҡурҡам мин, сөнки ошо үҫешеп етмәгән буй-һыным менән ауырға ҡалып та, тыуасаҡ сабыйымды йөрәгем аҫтында йөрөтөп, имен-аман ғына табыуым бик икеле.

...Уйланым, уйланым да, ни булһа ла булыр тип, Радиктың әсәһе йәшәгән Аккүл районына сығып киттем. Үҙемсә тәүәккәлләнем инде. Шундай гүзәл ер икән Ҡарағаслы ауылы! Ауыл ҡаршыһында ҙур зәңгәр күл. Күл ситендә матур ғына утрау. Кәмәһеҙ утрауға инермен тимә, күл тәрән. Ә шундай серле, ылыҡтырғыс: бейек таш-ҡаялары йыраҡтан күренеп, тартып тора. Ошо ҡаяларҙа тамырҙары менән ташҡа берегеп дәү ҡарағастар үҫә – хас та күлдең тыныслығын һаҡлаусы яугирҙар.

Күл өҫтөндә аҡсарлаҡтар оса. Ҡарағаслы күленең аҡбаш, ярһыу тулҡындары утрау ярында ятҡан көрән-йәшкелт таштарҙы йыуып, йоморайтып бөтөргән. Таштар туп ҡорһаҡлы, әйтерһең, ауырға ҡалған ҡатындар. Шул таштарға ҡарап, уйланып, уфтанып ҡуям.

Их, Ҡарағаслы ауылы, ниндәй матур һин, йөмдәреңә иҫең китерлек! Ауыл артында ҡарағас, ҡарағай урманы менән ҡапланған бейек тау һырттары, йыраҡта Ирәмәл тауының күккә ашҡан, болоттарға уралған ҡарлы күк түбәһе күренә.

Ауылда ике көн йәшәп, Радиктың әсәһе менән танышып, аҙ-маҙ күңелемде тынысландырып ҡайттым. Мәрйәм апай оло йәштәрҙәге, аҙ һүҙле, йомоҡ кеше, улы тураһында артыҡ һүҙ ысҡындырып бармай. Үҙе барын да һөйләр әле, тиеүҙән уҙмай.

...Өс тәүлек юл үтеп, ауыр-ауыр сумкалар күтәреп Радик саҡырған көнгә Иркутск ҡалаһындағы тимер юл вокзалына килеп еттем. Радик хатҡа яҙып аңлатҡанса, колония ҡаршыһында йәшәгән бер яңғыҙ әбейгә фатирға туҡтаным. Унда төн ҡунып, иртән ғариза тотоп, лагерь начальнигына индем.

- Ҡыҙым, һиңә нисә йәш һуң? – тип аптырап ҡаршы алды мине сәстәренә сал төшкән оло ғына йәштәге офицер.

- Утыҙ ике, – тим. Теге ышаныр-ышанмаҫ ҡына паспортымды асып ҡарай, үҙе башын сайҡай.

Беҙҙе, тотҡондар менән никахҡа инергә килгән бер төркөм ҡатын-ҡыҙҙы, уҫал ғына бер контролер ҡатын эске кейемдәргә тиклем ҡапшап, тикшерә. Сумкаларҙағы аҙыҡ-түлекте, ит-колбасаларҙы, икмәк-бәлештәрҙе бысаҡ менән турапкиҫкеләп бөтөрҙө.

- Нимә эҙләйһегеҙ? – тиһәм:

- Ҡай берәүҙәр тотҡондарға наркотик, аҡса индерергә самалай, шуға бөтәһен дә ентекләп тикшерергә тура килә, – ти.

- Эй, Аллам, ундайҙар ҙа була икән, – тим. Үҙем эстән генә контролер ҡатындың Радик йәшереп индерергә ҡушҡан аҡсаларҙы таба алмауына ҡыуанам.

Ниһайәт, беҙҙе, төрлө юлдар менән берен-бере табышҡан ете парҙы, район ЗАГС-ынан бер ҡатын килеп, рәсми рәүештә никахҡа теркәгәс, айырым бүлмәләргә урынлаштырҙылар. Бында аш бешереү бүлмәһе, бәҙрәф, душ ҡына уртаҡ икән. Оҙон коридорҙың осона телевизор ултыртҡандар.

Бына ул, минең яҙмышыма яҙған ирем! Таҙа, мөһабәт кәүҙәле, алсаҡ йөҙлө, инде ут-һыу аша үтеп, өрөп ҡабырға өйрәнгән ир-егет.

- Килдеңме? – тип ҡосаҡлап алды. Күҙҙәремдән, биттәремдән иркәләп үбә. Мин ләззәтлек тулҡындарына сумып, уға тағы ла нығыраҡ һыйынам. Минең әсән мәңге онота алмаҫлыҡ тәүге ләззәтле төнөбөҙ. Ошо йәшемә етеп, һаман ҡыҙ булып йөрөүемә иҫе китә Радиктың. Өс тәүлек буйына һөйөп-һөйөшеүҙән туҡтаманыҡ. Мөхәббәт хистәренән бушай алманыҡ. Төн менән көн, ер менән күк буталды.

Минең менән осрашыу әсән ниндәй генә алдашыу алдына бармаған ул! Етмәһә, ирекҡә сығырға дүрт йыл ғына ҡалды, тип алдашҡан. Дөрөҫөндә уны ун биш йылға хөкөм иткәндәр, әле срогының алты йылын ғына тултырған! Башҡа һыймаҫлыҡ хәл! Кемдәндер көнләшеп, аҡылын юйып, үҙенең йәш, һылыу кәләшенең ғүмерен ҡыйған. Ниндәй ҡырағайлыҡ, ниндәй вәхшилек! Әллә геологтарҙа быраусы булып эшләгән осорҙа, урман-тауҙар араһында йөрөп, ҡырағайланып-иҫәрләнеп бөткәнме икән был, тип уйлап ҡуям.

Бына мин кеше үлтереүсенең наҙлы ҡосағында ятам, уның менән бер өҫтәл артына ултырып ашайым, уның менән ихлас күңелдән аралашам. Миндә ике кеше көрәшә. Береһе уның ҡанға буялған ҡулдарынан, уның зәғиф, зәхмәтле күңеленән ерәнә, уны күрә алмай. Икенсеһе уны үлеп ярата. Үҙен төрмәлә тәртипле генә тотһон инде, уның менән колония-поселениеға ғына түгел, хатта ер сигенә барырға ла ризамын! Тик яҙмыш ҡына айырмаһын беҙҙе. Мин уның шундай ихлас ярата-һөйә белеүенән үҙемдең күпме йылдар буйына мөхәббәт ғишығын, һөйөү-һөйөлөү тәмен татымаған күңелемә ниндәйҙер бөтмәҫ серле

ҡөҙрәт алам. Тәнемдәге һәр бер күҙәнәк ниндәйҙер сихри рәхәтлек кисерә. Аҙналар буйына уның татлы ирендәренең тәме ирендәремдән юғалмай.

Эшкә барһам, бергә эшләгән әхирәтем:

- Роза, һинән ниндәйҙер нурлы энергия урғыла, – ти.

- Йылдар буйына тотҡон иреңде нисек түҙеп көтөргә уйлайһың һуң? – тип ғәжәпләнгәндәр ҙә бар. Етмәһә, миңә "декабристка" тип исем тағып та ҡуйҙылар. Йәнәһе, декабрист ҡатындары кеүек ирем артынан Себергә тиклем барып йөрөйөм.

Осрашыу минуттарын көтөп көндәр, айҙар үтә. Етмәһә, мин эшләгән фабриканы ябып ҡуйҙылар. Ә Радиктан аҙна һайын бер үк йөкмәткеле хаттар килә.

"Роза, тәртип боҙған өсөн мине ун биш тәүлеккә изоляторға яптылар. Бында ашау яғы хөрт, тәмәке, сәй бирмәйҙәр, һин, зинһар, миңә ашығыс рәүештә ошо адрес буйынса шунса-шунса аҡса ебәр. Был беҙҙә эшләгән контролерҙың адресы, ул аҡсаны миңә тапшырыр".

Ярай әле, бәхетемә күрә, күңелемә яткан, минең йәшәйешемә еңеллек биргән бер шөғөлөм бар: таныш-белештәрҙең портреттарын төшөрөп, аҙ-маҙ аҡса эшләйем. Шул аҡсаға донъя көтәм, Радик эргәһенә йөрөйөм, уға посылкалар ебәрәм.

Оҫталығымды тиҙ һиҙҙеләр. Төрлө абруйлы, дәүләт органдарында эшләгән кешеләрҙән заказдар ала башланым. Ҙур вазифа биләгәндәрҙең гонорары ла ҙурыраҡ. Төн йоҡламаһам йоҡламайым, ләкин портреттарын килештереп, ҡойоп тигәндәй эшләп, ваҡытында тапшырам.

Дүрт йыл тигәнең "һә" тигәнсе үтеп тә китте. Радик:

- Минең начальствоның портретын эшләп ҡара, бәлки, берәй ярҙамы тейер, – тигәс, бер айҙан ашыу ваҡытымды лагерҙа үткәрҙем. Көндөҙ портреттар төшөрәм, ә кисен Радик эргәһенә индерәләр. Шулай тырыша торғас, үҙенең минминлеге арҡаһында төрмә администрацияһына буйһонорға теләмәгән, лагерҙа тәртип боҙоп, башы изоляторҙан сыҡмаған, тыңлауһыҙ үҙһүҙле иремде – барыбер поселениеға – яртылаш иреккә сығарырға өлгәштем бит! Рәхмәт инде сал сәсле майорға, һүҙендә торҙо, ярҙам итте.

- Рәхмәт һиңә, ҡыҙым, ireңде ныҡ ҡаты тот. Әгәр уның яҙмышында һин осрамаһаң, ул ғүмеренең күп өлөшөн төрмәлә ултырыр ине... – тип ҡалды хушлашҡанда.

Йәй башында Радикты һаҡ аҫтында Иркутск өлкәһенең Усть-Кут районына алып киттеләр. Эште оҙаҡҡа һуҙмай ғына булған аҡсамды йыйнап, атай-әсәйемдең ризалығын алып, алыҫ юлға сыҡтым. Бер нисә көндән Усть-Кут ҡалаһынан 25 км алыҫлыкта тайга эсендә яткан Минган исемле поселенецтар ҡасабаһына килеп төштөм.

Тәүге көндә үк начальниктарына инеп, ирем менән бергә йәшәргә рөхсәт алдым. Үҙем менән алып килгән барлы-юҡлы һуңғы аҡсама кескәй генә йорт һатып алдыҡ. Белһәгеҙ икән Радиктың нисек ҡыуаныуын! Ул бит ирек тәмен шундай һағынғайны. Хатта ағастарҙы, үләндәрҙе ҡосаҡлап, ергә ятып тәгәрәп илап алды. Ошондай бәхетле көндәрҙе бүләк иткәнем өсөн миңә рәхмәттәр уҡыны, мәңге ҡулдарында күтәреп йөрөтөргә вәғәҙәләр бирҙе.

Ул саҡта беҙҙән дә бәхетле кеше булмағандыр. Тайганың әкиәттәгеләй матур тәбиғәте мине лә ғашиҡ итте. Өй артына ғына сыҡ: мүк өҫтө туптулы ҡыҙыл, күк көртмәле, урыны менән ҡурай еләге. Ул бәшмәктәрҙең иҫәбе-һаны юҡ! Радик пиларамда такта быса. Уның да кире төрмәгә ҡайтҡыһы килмәгәндер инде, тәртип боҙмай ғына тырышып эшләп йөрөнө.

Иш янына ҡуш булһын тип, үҙем дә ашханаға һауыт-һаба йыуыусы булып эшкә урынлаштым. Аҡса йыйнап, иҫкерәк булһа ла телевизор, һыуыткыс алып ебәрҙек. Бик тыныс, бәхетле йәшәнек беҙ ошо осорҙа. Бары тик сабыйыбыҙҙың һаман донъяға яралмауы ғына ҡамасауланы. Шуны күңеле менән һиҙенгәндер инде Рита туғаным. Көтмәгәндә унан:

"Әллә балнистан берәй бәпәй алаһығыҙмы, беҙҙә бер йәш ҡыҙыҡай яңы ғына тыуған балаһынан баш тартты" тигән йөкмәткеле хат килеп төштө.

Радикка ошо турала әйткәс:

- Миңә кеше балаһы кәрәкмәй, күберәк Хоҙайға ялбар, теләгең бойомға ашыр! – тиеүҙән уҙманы. Ысынлап әйткәндерме, әллә юрамал, мине тынысландырыр өсөнмө, нисек кенә булмаһын, мин үҙемдең ауырға ҡалыуымды һорап, Хоҙайға ялбарыуҙан туҡтаманым. Көндәр, айҙар үтә торҙо.

Ниһайәт, ноябрь айында беҙгә бер юлы ике бәхет йылмайҙы. Мин утыҙ алты йәшемдә балаға уҙҙым. Мәскәүҙән Радикты өс йыл алдан шартлы рәүештә иреккә сығарыу – ярлыҡау ҡағыҙы килде. Ярты йыл алда ғына йүгерекләп йөрөп, колония-поселение администрацияһы аша уға ярлыҡау һорап яҙҙырғайным, тәртип боҙмай ғына тырышып эшләп йөрөгәс, улар ҙа ҡаршы булманы: һәйбәт кенә ҡылыҡһырлама һәм үтенесте ҡәнәғәтләндереү ҡығыҙы ебәрҙеләр.

Эстән генә, был донъяла беҙҙән дә бәхетлерәк кешеләр юҡтыр, тип уйлайым. Ләкин күңелем ниҙер һиҙенә: иремдең хәүефле, борсоулы йөҙөн тойомлайым.

- Ниндәй ҡайғың бар һуң? – тип иремә һыйынам.

- Юҡ, былай ғына... – тиеүҙән уҙмай Радик.

Мин ауырыйым, күңелем болғана. Был ауырға ҡалыуымдың тәүге билдәләре. Йә, Хоҙайым, мең рәхмәттәр яуһын үҙеңә! Ҡеҙрәтең киң һинең: ялбарыуҙарымды ишетеп, ризалығыңды бирҙең, шөкөр! Сабыйымды ғына иҫән-һау табырға яҙһын инде, тип төндәр буйы Хоҙайыма ялбарам.

Радикка нимә? Үҙенең ирлек теләктәрен ҡәнәғәтләндерә лә, миңә арҡаһын тереп, рәхәтләнеп йоклай. Ә мин үҙемсә белгән доғаларымды уҡып, шатлыҡ-ҡыуаныстарымдан бөтмәҫ рәхәтлек тойғолары кисерәм.

Тик илар, һағышланыр көндәрем алда булған икән.

Бер аҙнанан ҡулыбыҙға кәрәкле документтарҙы тотоп, йомарт Себер ере менән хушлашып, поезда Екатеринбург ҡалаһына юлландыҡ. Радик уйлағанса, тәүҙә мин уны атай-әсәйемдәр менән таныштырам, шунан ул үҙҙәренең Аккүл районына ҡайтып, милицияға учетка тороп, эшкә урынлашкас, Яңы йыл алдынан мине килеп ала, йәнәһе.

Атай-әсәйемдең пенсияһына Радигымды энәһенән ебенә тиклем өр-яңынан кейендереп, автобуска ултыртып: “Тиҙерәк кил!” – тип оҙатып ҡалдым.

...Эй, Хоҙайым, ҡатын-ҡыҙҙың бер ҡатлылығы! Радикты һуңғы тапкыр күреүем булды был. Якындары, дуҫтары эргәһенә минең кеүек бәләкәй генә буйлы, сибек ҡатынды эйәртеп ҡайтҡыһы килмәгәндер инде! Ул бит үҙен шундай нык яратҡан кеше! Ундайҙарҙың эргәһендә мотлаҡ һөйкөмлө, башҡаларҙы үҙенең зифа буйы, гүзәллеге менән көнләштерерлек йәш, сибәр ҡатын-ҡыҙ булырға тейештер бит!

Их, аңғыра һарыҡ бәрәсе, тип үҙ-үҙемде әрләйем, һулҡылдап илайым. Ҡайғы-һағыштан һарғайып, бәләкәсәйеп ҡалдым хатта.

Көтөп алған Яңы йыл да үтеп китте. Радиктан исмаһам берәй генә хат-хәбәр булһасы. Төндәрем көндәр менән, шатлыктарым һағыш менән буталды. Яҙған хаттарыма яуап килмәгәс, түҙмәнем, ауырға ҡалыуыма дүртенсе ай тигәндә Аккүл районына сығып киттем. Килһәм, күреп торам, ҡәйнәм килеремде көтмәгән, ҡырыҫ ҡаршы алды. “Мин Радиктан йөклөмөн” тигәнде ишеткәс:

- Ул инде күптән Нуриман районында, Раушания исемле ҡатын менән йәшәй, – тине. Көтөлмәгән хәбәрҙән ер аҫтына инеп китерҙәй булдым. Күҙ алдарым ҡараңғыланды, саҡ-саҡ ҡолап китмәнем. Ярай әле, карауат тотҡаһына йәбешеп ҡалдым.

...Бер нисә йылдан һуң Ҡара диңгеҙ буйында улым менән ял иткәндә, Нефтекамск ҡалаһынан килгән бер ҡатын менән танышырға тура килгәйне. Унан мин Радик тураһында күп яңылыктар ишеттем.

Төрмәлә сағында уҡ Радик үҙенең ваҡытын бушка үткәрмәгән, минән башка әллә күпме ҡатын-ҡыҙ менән хат алышкан. Матур, наҙлы һүҙҙәр яҙып, ул бахырҙарҙың да баштарын әйләндергән. Һәр береһенә тик һине генә һөйәм, оҙаҡламай эргәңә ҡайтам, тип тегеләрҙән йә акса, йә посылка таптырған. Хатта бер ҡатлыраҡтары уның эргәһенә ике сәғәтлек ҡыҫка “свиданка”ға килеп, сумкалап аҙыҡ-түлек ташып йөрөгән. Үҙе уларҙың фоторәсемдәрен, адрестарын бер дөйөм дәфтәргә туплап барған. Ирекkә сыҡкас, бер ҡатындан икенсеһенә күсеп, кунаклап йөрөгән. Ленинградтан – Лена, Ҡарағалпаҡстандан – Руфия, Архангелдән – Зәйтүнә... Ҡыҫкаһы, ике тиҫтәнән ашыу алданған ҡатын-ҡыҙ...

Улыма йәш ярым булғас, уны Рита туғаныма ҡалдырып, буяу, ҡылҡәләмдәр алып, Аккүл районына һүрәт төшөрөргә барҙым. Их, гүзәл яктар ҙа инде. Ошондай хозур тәбиғәттә тыуған кешеләрҙең дә күңелдәре шундай матур, һоҡландырғыстыр ул! Ә Радиктың миңә булған хыянаты берәй яңылышлыҡ ҡыналыр. Мин уны инде күптән ғәфү иткәнмен. Ул булмаһа – мин ошондай гүзәл, мөғжизәле тәбиғәт күренештәрен ҡайҙан табыр инем?! Йә булмаһа, һөйөү-һөйөлөү тәмен, әсә булыу, бала табыу тойғоларын ғүмерҙә лә кисермәҫ инем...

Өс йыл эсендә Аккүл районында ун бишләгән һүрәт төшөрҙөм. Уларҙың ун бере – Мәскәү ҡалаһында галереяла ойошторолған “Тирә-яктағы донъям!” күргәҙмәһендә урын алды, ике номинация буйынса еңеүсе булдым. Ә “Ҡарағаслы күле”, “Ирәмәл түбәһендә”, “Әүәләктәге ҡояш”, “Ҡурайсы ҡарт” исемле һүрәттәрем Лондонда үткән Бөтә донъя рәссамдар конкурсында Гран-при яуланы.

Тимәк, беҙҙең яктың тәбиғәтенең гүзәллеге төрлө милләт кешеләрен хайран иткән, тип ҡыйыу әйтергә була! Бына ҡайҙа ул мөғжизә!

...Шарташтағы дуҫтарым үҙемде һаман да “декабристка” тип йөрөтә. Мин ысынлап та “декабристка” кеүек. Тормош минең юлыма ауырлыктар ташлай, ә мин шикләнмәйенсә шул ауырлыктарҙың иң уртаһына сумам. Уларҙы еңеп сығам һәм тағы ла алға – тормош киңлегенә атлайым.

Тормош ауырлығынан ҡурҡмайым мин, йәшенмәйем, ә уға ҡаршы барам. Үҙемде йәлләмәйем, ярҙам һорап ялбармайым. Киреһенсә, хәлемдән килгәнсә башкаларға ярҙам итергә тырышам. Үҙем бәләкәй генә булһам да, күңелем киң минең. Әсәйем әйтмешләй: “Алтын ҙур булмай”.

# БИЛДӘҺЕҘ ҺУҒЫШТЫҢ ОНОТОЛҒАН ВЕТЕРАНДАРЫ



Икенсе донъя һуғышынан һуң беҙҙең армия 18 меңдән артыҡ кешеһен юғалтып 20-нән ашыу илдә һуғышта ҡатнаша. Бөгөн Рәсәйҙә 30 миллиондан ашыу төрлө категориялы хәрби ветеран бар. Уларҙың күптәре әле булһа был тормошта үҙ урынын тапмаған. Дәүләт һәм йәмғиәт тарафынан хәрби хәрәкәт ветерандарына иғтибар етешмәү, элекке хәрбиҙәрҙең үҙ хоҡуҡтарын белеп бөтмәүе сәбәпсе был хәлгә.

Ысынлап та, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының социаль хәлен яҡшыртыу мәсьәләләре бөгөн дә ауыр хәл ителә. Шулай уҡ афған, чечен ғәрәсәтен үткәндәрҙең көнкүреше лә еңелдән түгел. Бынан тыш йәмғиәттә нисәмә йылдар инде “ветеран — ул фәҡәт Бөйөк Ватан һуғышында ғына ҡатнашыусы” тигән хаталы фекер йәшәп килә. Юридик нормалар буйынса өс категория бар: Бөйөк Ватан һуғышы, хәрби хәрәкәт һәм хәрби хеҙмәт ветерандары. Ҡайһыһын алһаҡ та, бер үк күренеш — һуғыш инвалидтары, атайһыҙ ҡалған ғаиләләр… Улар ҙа торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға, һаулыҡтарын нығытыуға, ҡурсауға, ярҙамға, иғтибарға мохтаж. Хәрби бурысын үтәп ғүмерен ҡорбан иткән геройҙарыбыҙ рухына хыянат итергә лә ярамай, үҫеп килгән быуынды хәрби-патриотик рухта тәрбиәләү ҙә ҙур иғтибар талап итә.



**Афғанстанда граждандар һуғышы башланғас хөкүмәт яҡлы СССР Афғанстандың эске эштәренә ҡоралды ҡыҫылыш булдыра (интервенция). *“1979-1989 йылдарҙағы Совет-Афған һуғышы”* — киң таралған хаталы атама. Юридик яҡтан Советтар Союзы менән Афғанстан бер ваҡытта ла һуғыш хәлендә булмай. Совет яҙмаларында хәрби хәрәкәттәр “Афғанстандың туғандаш халҡына” “интернациональ ярҙам” тип исемләнә. Шуға ла Афған һуғышы ветерандарын йыш ҡына “яугир-интернационалист” тип йөрөтәләр.**

**Ун йыл дауамында барған Афған һуғышында 15 мең самаһы Совет һалдаты һәм офицеры һәләк була. Башҡортостандан 9 меңдән ашыу егет утҡа инә. 300-ҙән ашыуы тыуған яғына әйләнеп ҡайтмай.**

Шөкөр, хәрби хәрәкәт ветерандарына мөмкин тиклем ярҙам күрһәтеү, йәш быуында илһөйәрлек тойғоһон үҫтереү маҡсатында республикабыҙҙа ғына бер нисә хәрби хәрәкәттәр ветерандары ойошмалары эшләй. Әммә улар тураһында күптәргә мәғлүм түгел. Журнал уҡыусыларҙы Өфө ҡалаһында ойошторолған “Хәрби хәрәкәттәр ветерандарының Башҡортостан союзы” төбәк йәмәғәт ойошмаһы менән таныштырмаҡсыбыҙ. Уны **Тимерйән Рәжәп улы РӘЖӘПОВ** етәкләй. Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылынан хәрби хеҙмәткә саҡырылып, Афған һуғышын үтергә мәжбүр булған ул ваҡытында. Ойошманың тәүмаҡсаты, әлбиттә, “ҡыҙыу нөктә”ләрҙән ҡайтҡандарға, бигерәк тә үҙебеҙҙең башҡорт егеттәренә ярҙам күрһәтеү.

“Йәмәғәт ойошмалары, нигеҙҙә, бағымсылар, изге күңелле замандаштарының ярҙамы менән йәшәй. Беҙ ҙә тәү сиратта шәфҡәтлелек эштәрен атҡара алыуыбыҙ өсөн эшҡыуар Богданов Хәтип Хәмзә улына рәхмәтлебеҙ. Ойошма 2008 йылда барлыҡҡа килһә лә, былтыр ғына ныҡлап эшләп китте. Миәкә, Ғафури, Ейәнсура, Күгәрсен райондарында, Стәрлетамаҡ, Салауат, Баймаҡ ҡалаларында филиалдарыбыҙҙы ла булдырҙыҡ. СССР ваҡытында Афған һуғышы ветерандарына дәүләт тарафынан иғтибар булды. Бөгөн иһә барыһын да үҙ көсөбөҙгә таянып хәл итергә генә ҡала. Быйыл Афғанстандан ғәскәрҙәрҙе алып сығыуға 22 йыл тулды, шуны билдәләп үтмәксе инек. Юғарылағы органдарға ярҙам һорап яҙған хатыбыҙға “22 йыл юбилей түгел, 25, 50 йыл тулғас мөрәжәғәт итегеҙ” тигән яуап алдыҡ. Бынан тыш, “Һеҙҙе унда беҙ ебәрмәнек” һымаҡ яуаптар ишетергә тура килгән саҡтар булды. Шулай ҙа юғалып ҡалмайбыҙ, ҡулдан килгән тиклемен атҡарып сығырға тырышабыҙ. Башҡа ойошмалар кеүек төшөнкөлөккә бирелеп музейҙарҙа күргәҙмәләр үткәреү менән генә сикләнмәйбеҙ. Райондарҙан хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашҡандарға һәйкәл ҡуйҙырыуыбыҙҙы үтенәләр. Красноусол ҡасабаһында һәйкәл урынлаштырҙыҡ, ошо ниәтте тормошҡа ашырыуҙы тағы бер нисә районда көтәләр.

Шәфҡәтлелек акциялары ла үтеп тора. Февраль айында Миәкә районында урынлашҡан Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн социаль приют тәрбиәләнеүселәренә Өфөгә иҫтәлекле экскурсия ойошторҙоҡ. Бала күңеленә ятырлыҡ итеп бай программа төҙөнөк. Төп маҡсат – йәш быуынды ватансылыҡ рухында тәрбиәләү, үҫмерҙәрҙә тыуған төйәгенә ҡарата һөйөү уятыу, баш ҡаланың иҫтәлекле урындары менән таныштырыу ине. Балалар Салауат Юлаев, Ҡайғылы әсә һәйкәленә, Хәрби дан музе-



йына, “Ләлә-Тюльпан” мәсетенә һәм планетарийға сәфәр ҡылды. Бүләктәр тапшырып ҡыуандырҙыҡ. Өфө буйлап сәйәхәт барышында балалар ҡаланы иғтибар менән күҙәтте. Урамда халыҡтың мыжғып тороуы, автомобилдәрҙең күплеге, төрләлегә лә ҡыҙыҡ тойолдо уларға”, – тип, етем балалар өсөн һөйөнөүен белдерҙе Рәжәп ағай.

Афғанстан һуғышын үткәндәр әле булһа бер-береһенә терәк булырға тырыша. Яуҙаштарының балаһын уҡырға индерергә, эшкә урынлаштырырға һәм башҡаһы менән дә ярҙам итергә әҙер улар. Шулай ҙа, хәрби хәрәкәттәр ветерандары ойошмаларының үҙ көстәре менән генә хәл итә алмаҫлыҡ проблемалары ла етерлек. АҠШ, Бөйөк Британия, Германия, Ҡытай, Япония илдәрендә ветерандар менән эшләгән министрлыҡ йәки агентлыҡтар кимәлендәге дәүләт структуралары булдырылған. Уларҙың эштәре күпкә һөҙөмтәле икәнлегенә шик юҡ.

*Г. ӘХМӘТЙӘНОВ.*



# Ә БАШЛАНҺА?..

70-се йылдар. Предприятиела халыҡ-ара хәл тураһында лекция бара. Лекторҙың оҙон һәм эс бошорғос докладын барыһын ялҡытҡан: кемеһелер йоҡлап ултыра, ҡайһыһы минут һайын сәғәтенә ҡарай. Бына, ниһайәт, лекция тамамлана. Алып барыусы тороп баҫа:

– Лекторға һорауҙарығыҙ бармы?

Ниндәй һорау ти инде ул! Тиҙерәк өйгә саптырырға кәрәк! Шул саҡ, һис көтмәгәндә, арттағы рәттә бер йолҡош ҡына ир заты ҡулын күтәрә һәм ул заман өсөн ғәҙәттән тыш ҡыйыу һорау ырғыта:

– Иптәш лектор, һеҙ бик күп һөйләнегеҙ, әммә конкрет бер нимә лә әйтмәнегеҙ. Борғаланмай ғына яуап бирегеҙ әле: Өсөнсө Донъя һуғышы булаcаҡмы, юҡмы?

Һуңғы егерме йылда бындай әрһеҙлек менән осрашҡанлығы булмағанлыҡтан бер аҙ ҡаушап ҡалған лектор, зиһенен йыйғас, яуап бирә:

– Халыҡ-ара хәлдең хәҙерге торошон анализлаусы эксперттар һығымталарынан күренеүенсә, Өсөнсө Донъя һуғышы башланыу ихтималлығы ҙур, шуға күрә буласаҡ тип әйтергә ярайҙыр.

Теге ир һаман тынысланмай:

– Иптәш лектор, башлағас-башлағас, әйтеп бөтөрөгөҙ инде: һуғыш сыҡһа, ул кем менән кем араһында буласаҡ?

Лектор:

– Донъя сәйәсәтендәге тенденцияларҙан һәм халыҡ-ара тормош белгестәре һығымталарынан күренеүенсә, һуғыш, моғайын, беҙҙең ил менән Ҡытай араһында сығыр. Тағы ла һорауҙар бармы?

Теге ир:

– Тулыраҡ яуап бирһәгеҙ ине, иптәш лектор. Әгәр Өсөнсө Донъя һуғышы башланһа, унда кем еңер? Беҙ 250 миллион, ә ҡытайҙар һаны инде бер миллиард ярым.

Лектор:

– Уҙған һуғыштарҙан айырмалы булараҡ, хәҙерге ваҡытта һан күрһәткесе хәл иткес роль уйнамаҫҡа ла мөмкин. Миҫалға Яҡын Көнсығышты ғына алайыҡ. 5 миллион йәһүд 50 миллион ғәрәпкә ҡаршы һуғыша һәм туктауһыҙ еңеп килә. Тағы ла һорауҙар бармы?

Теге ир:

– Бар! Ә беҙҙә йәһүдтәр етерлекме һуң?

# «БЕҘ — ТУҒЫҘЫНСЫ РОТАНАН...»



## «ҺУҒЫШ... УНЫҢ ТУРАҺЫНДА ҺӨЙЛӘҮЕ БЕР КЕМГӘ ЛӘ ЕҢЕЛ ТҮГЕЛДЕР. ҠАН ҠОЙОШТО ЯБАЙ ҺҮҘҘӘР МЕНӘН ҺҮРӘТЛӘП, АҢЛАТЫП БУЛМАЙ. БИГЕРӘК ТӘ ЯУГИРҘАРҘЫҢ ҮҘҘӘРЕН ҒӘЙЕПЛЕ ИТЕҮҘӘРЕН ИШЕТЕҮЕ АУЫР. Ә ҺАЛДАТ — ВАТАНЫ ҠУШҠАНДЫ ҮТӘЙ. ШУНЫҢ ӨСӨН ДӘ ӘРМЕ БИТ УЛ...»

**Әкрәм Хөрмәт улы АМАНГИЛДИН** – Афғанстандың иң ҡаты һуғыштарында ҡатнашып, иптәштәрен мәңгегә юғалтыуына әле лә ышана алмаған яугир. Эшлекле, аҡыллы малай 1960 йылда Баймаҡ районы Темәс ауылында донъяға килгән. Алтынсы класты тамамлағас, һәр йәйге каникул мәлендә эшләй. Ат менән магазинға аҙыҡ-түлек ташый, бесән тырмата... Мәктәпте тамамлағас, водитель һөнәрен үҙләштерә. 1978 йылда Совет Армияһы сафына алына һәм Ҡазан юғары танк команда училищеһында БТР водителенә уҡый.

"1979 йылдың декабрендә беҙҙе Афғанстанға оҙаттылар. Шул уҡ ваҡытта Салангта тәүге һуғышты кисерҙек. Беҙҙе көслә утҡа тоттолар. Шулай ҙа Ҡабулға барып еттек. Әммә, дошмандарҙың ябырылыуы арҡаһында, аҙыҡ-түлек еткереү ауырлашты. Бер взводҡа бер түтәрәм туңған икмәк, ике консерва, ярты көрөшкә сәй һәм ярты котелок клейстер бирә торғайнылар. Артабан ашау мәсьәләһе күпкә яҡшырҙы. Тәүҙә беҙҙең 9-сы рота Ҡабул ҡалаһындағы 12 күперҙе, Сурубиҙағы 98 метр бейеклектәге платинаны һаҡланы".

Афғанстанда ҡар һәм һыуыҡтар булмай, әммә ул йылда совет ғәскәрҙәре килгәс, ҡыш башлана. Төнөн ҡар яуа, көндөҙ ирей, әммә ҡиҫкә тағы һыуытып ебәрә. Урындағы халыҡ ҡышҡы кейемдәре булмау сәбәпле, милли кейемдә, аяҡтарына галуш кейеп йөрөй. Совет һалдаттары уларҙы йәлләп бушлат, бүрек, итек бүләк итә. Һалдаттарҙы Афғанстан халҡының ярлылығы, әммә шул уҡ ваҡытта иҫ киткес ныҡ, һуғышсан булыуы ғәжәпкә һала.

Әкрәм Амангилдин хеҙмәт иткән ротаны күперҙәрҙе һаҡлауҙан алып бар ил буйынса барған хәрби рейдтарға йүнәлтә башлайҙар. Улар Джелалабад, Герат, Гардез, Баграм, Кундуз һуғыштарында ҡатнаша. Йәш һалдаттар ошо мәлдә "Альфа" спецназсыларының яуҙы нисек оҫта ойоштора

белеүен, күренмәй эш итеүҙәрен, буш ҡул менән тороп ҡалғанда ла, дошмандың боғаҙына йәбешеп, уларҙы үлтереүен күреп таң ҡала.

Әкрәм ағай йөрәгендә мәңгелек эҙ ҡалдырған күп яуҙар кисерә. Ҡамауға эләккән 180-се полкты азат иткән көн-төндәре айырыуса хәтерендә уйылып ҡалған.

"1980 йылдың 5 майында Гиндикуш янында урынлашҡан часыбыҙға Иосиф Кобзон үҙенең төркөмө менән концерт алып килде. Совет һалдаттары алдында сығыш яһау өсөн популяр йырсы Мәскәүҙәге концерттарын ҡалдырып киткән икән. Ә 12 майҙа беҙҙең 181-се полк дошмандарҙы юк итеү өсөн рейдка сыкты. Тәүге көндө үк күп юғалтыуҙар кисерҙек. Бар ерҙә ыңғырашыу, үлемесле яраланған һалдаттарҙың ауазы яңғырай ине. 38 көн эсендә ярты полкыбыҙҙы юғалттык. Беҙҙең БТР экипажында ла 8 кешенән 3 кеше – мин, Анатолий Попов, Евгений Панин тороп ҡалды. Рейд ваҡытында иптәшебеҙ Ринат хәбәрһеҙ юғалды. Уны икенсе көндө йылғала һал өҫтөндә табып алдык. Иптәшебеҙҙең тән ағзалары айырым киҫәктәргә бүлгеләнгән ине. Ринаттан бер аҙна элегерәк юғалған Дацконы ла шул рәүешле язаланған, тән ағзаларын усаҡта ҡыҙҙырылған килеш таптык. Уның ҡул суғы ғына имен ине, шунда эшләнелгән татуировкаһынан таныныҡ. Әсиргә эләккәндәрҙе дошмандар йыртҡыстарса язалап, ғазаплап үлтерә торғайны. Шуға күрә һәр һалдат әсиргә төшеүгә ҡарағанда, пулянан, шартлауҙан үлеүҙе мең артык күрҙе. Әлбиттә, яугирҙар үҙенең тыуған яғына имен-һау әйләнеп ҡайтаһағына ышанды. Кем 18-20 йәшендә үлем тураһында уйлаһын инде? Шулай ҙа ҡаты һуғыштарҙа бихисап иптәштәребеҙҙе юғалттык. Был йөрәккә уйылып ҡалған мәңгелек яра, ауыр тойғолар. Ваҡыт барыһын да дауалай, тиһәләр ҙә, уңалмаҫ яралар ҙа була икән..."

Әкрәм Амангилдин ҡаты алыштарҙың береһендә яраланып, контузия ала. Уның юғары көстәргә ялбарыуы ишетелеп, йәш һалдат әсирлеккә түгел, ә госпиталгә эләгә. Һауыҡҡас, Әкрәм ағай хеҙмәтен дауам итә.

Күкрәгең миҙалдар биҙәгән яугир тыуған яғына әйләнеп ҡайта һәм водитель булып эшләй. Белем алыуҙың мөһимлеген аңлап, Өфө автотранспорт техникумын тамамлай. Сәксәй урман участкаһында, Темәс кирбес заводында, Өфө ҡалаһында автобус водителе булып эшләй. Заманалар үҙгәреп, эшһеҙлек, аксаһыҙлык көсәйгәс, ғаиләһен лайыҡлы тәьмин итеү өсөн, Себер яктарына барып эшкә урынлаша. Әкрәм ағай ике улына хәстәрлекле атай ҙа, үрнәк тә булып тора. Уларҙың береһе табип, икенсеһе, Рәсәй армияһында хеҙмәт иткәндән һуң, юрист һөнәрен үҙләштерә.

"Минең йәш быуынға бер генә үтенесем бар – бала сак иле менән хушлашып та өлгөрмәй ҡанлы, ҡурҡыныс һуғышка барып эләгеп башын һалған малайҙарҙы онотмағыҙ. Улар тураһындағы якты иҫтәлек һәр быуындың күңелендә һаҡланһын. Тыныслыктың ҡәҙерен белегеҙ, һуғыш сығыуына юл ҡуймағыҙ".

Эйе, бар һуғыш ғәрәсәтен күңеленән үткәргән туғыҙынсы рота яугиры Әкрәм Амангилдиндың төштәренә һуғыштың һирәгерәк инеүен, тормошонда тик бәхет-шатлык тойғолары ғына кисереп йәшәүен теләгебеҙ килә.

*Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.*



# ҺУҒЫШ ҠАЛДЫРҒАН ҺАҒЫШ

БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫ ҠАҺАРМАНДАРЫ МЕНӘН БЕРГӘЛӘП, БЕҘ ҘӘ, ЕҢЕҮ КӨНДӘРЕНДӘ БУЛҺА ЛА, ҮҘЕБЕҘҘЕ ЕҢЕҮСЕЛӘР ТИП ХИС ИТЕП ҠАЛАБЫҘ. БЫЛ ТОЙҒО ЯУГИРҘАР ҺӘМ ТЫЛДАН ТОРОП ФРОНТ ТОТКАН ҠӘҘЕРЛЕ ВЕТЕРАНДАРЫБЫҘ ӨСӨН АЙЫРЫУСА МӨҺИМ. СӨНКИ СӘЙӘСИ КАМПАНИЯЛАР, ҒӘҘӘТ БУЙЫНСА, НИНДӘЙҘЕР САРАЛАР ПЛАНЫН ҮТӘҮ ҺӘМ КЕМ АЛДЫНДАЛЫР ИҪӘП-ХИСАП БИРЕҮ ӨСӨН ҮТКӘРЕЛӘ. БАЙРАМДЫҢ ОШО БЕР НИСӘ КӨНӨНДӘ БӨРКӨЛГӘН РӘСМИ ЙЫЛЫЛЫҠ, ИТӘҒӘТЛЕК, ОШО МӘЛДӘРҘӘ ҺИБЕЛГӘН НУР, МӨҒЖИЗӘ БУЛЫП, ОЛО КЕШЕЛӘРЕБЕҘҘЕ ҒҮМЕР БАҠЫЙ ОҘАТА БАРҺА ИКӘН... ЮҒИҺӘ, БӨЙӨК ЕҢЕҮҘЕҢ СИРАТТАҒЫ ЙЫЛЛЫҒЫНА АЯҠ БАҪЫУ БӘХЕТЕНӘ ЭЙӘ БУЛҒАН БАТЫРҘАРЫБЫҘҘЫ БӘҒЕРҺЕҘ ЧИНОВНИКТАР ТУҒЫҘЫНСЫ МАЙҘЫҢ ИРТӘГЕҺЕНӘ ҮК БӨТӨНЛӘЙ ИКЕНСЕ СЫРАЙ МЕНӘН, АЯҠ АҪТЫНДА БУТАЛЫП ЙӨРӨҮСЕ ҠАРТ-ҠОРО ТИП КЕНӘ ҠАБУЛ ИТӘ. БАЙРАМ КӨНДӨ ГЕНӘ ҺЕҘҘЕҢ АЛДА МӨХӘББӘТЕНӘН СӘСӘРГӘ ЕТЕШКӘН ДЕПУТАТТАР ӨСӨН ОЛО ЯУГИРҘАР ЙӘНӘ “ЭЛЕКТОРАЛЬ БЕРӘМЕК” КЕНӘ БУЛЫП ҠАЛА.



*Еңеү килде. Ҡылысҡа ял бирҙек.*
*Усағымда – ут. Икмәк еҫтәре...*
*...Еңеү үҙе һаман түбәнерәк,*
*Һәйкәл баҫҡыстары – өҫтәрәк.*

Сәйәсәт мәсьәләләренә бигүк тәрән инге килмәй. Донъяның тотҡаһы хәҙер шул булһа ла, тормош яралғыһы ул түгел әле. Ана, ярҙарына һыймай, йылғалар таша. Ҡар һыуҙары менән яҙғы йылы ямғырҙар ер өҫтөнә йыйылып өлгөргән күпме әшәкелектәрҙе упҡындарға йыуып алып китте. Улар, әлбиттә, йыуылғас та юҡҡа сыҡмаҫ, бәлки, бүтән даръяларҙы буръякландырыр, башҡа тарафтарҙы бысратыр. Тән яраһы уңалған хәлдә лә, йән йәрәхәте йөрәктәрҙе барыбер өйкәп торор. Күҙ йәше менән бит йыумайҙар шул.

Был донъяла күп нәмә осраҡлы. Ошо юлдарҙы яҙа башлауым да туғыҙынсы май алдынан тура килде. Ул иртәнге, салт аяҙ һәм оло байрам көнө булһа ла, ҡояшлы күңел менән, ғәмһеҙ кәйеф-сафала ҡаршылау мөмкин түгел. Хәләлем менән сәй эсергә тип кухняға сығып, ғәҙәтләнгәнсә, телевизор тоҡандырҙыҡ. «Башҡортостан» телевидениеһында әҙмәүерҙәй ир-ат, ике ҡулын тултырып балдаҡ кейгән йәш ханым аш-һыу әҙерләү серҙәренә өйрәтә. Икенсе каналда – осһоҙ-ҡырыйһыҙ сәйәсәт тураһында бөтмәҫ-төкәнмәҫ сафсата. Йәнә ары китһәк, Мәскәү мәҙәксеһе үҙ һүҙенә

үҙе ауыҙ йыра. Бына экрандар урамда аҡырышып йөрөүсе йәш-елкенсәк менән тулды. Күптәренең ҡулында – шешә, иңбаштарына дәүләт әләмдәре уралған. Кемдәр һуң улар – әләмдәргә төрөнөп, һөрән һалып урамға сыҡҡан әҙәмдәр? Бактиһәң, футбол фанаттары икән. Рәсәй футболсылары тап Бразилия командаһын ҡыйратып һалғандыр.

Туктағыҙ, бөгөн ниндәй көн һуң әле? Ҡатыным менән күрмәгән атайҙарыбыҙҙы хәтерләп ултырабыҙ. Уның атаһының да, минекенең дә фотоһүрәттәре һаҡланмаған, шуға күрә килеш-килбәттәрен үҙебеҙсә, күркәм, мөһабәт рәүештә күҙ алдына килтерәбеҙ. Әсәйҙәребеҙ улар тураһында һөйләр ине лә, үҙҙәре күптән үк баҡый илендә. Хәйер, беҙ атайҙарыбыҙҙың үҙ фантазиябыҙ, хыялыбыҙ тыуҙырған образына күнегеп тә бөткәнбеҙ икән, улар тиҫтәләрсә йылдар беҙҙең менән йәшәгән. Сөнки үҙебеҙҙе белә башлағандан бирле атай тураһында уйламаған көн булмаған.

Сәйәсәткә ҡағылмаҫҡа ант итеүем ашығыс ғәмәл булып сыҡты, сөнки һуғыш менән сәйәсәттең һәр даим ҡушарлап йөрөүе мәғлүм бит инде. Гәзит хәбәрҙәренә ышанған хәлдә, Европала, Америка Ҡушма Штаттарында икенсе донъя һуғышы ваҡиғалары йәшерәк быуын хәтерендә бөтөнләй тоноҡланған икән. Бик теләгәндә, онотмаҫты – онотторол, бахырҙы батыр итеп тә була. Фашистик Германияны Совет халҡы, уның ҡоралды көстәре теҙ сүктерҙе, тип ышанып йөрөһәк, Көнбайышта Гитлерҙың арт һабағын американ-инглиз-француз һалдаттары уҡытты, тип раҫлайҙар. Хәйер, сәйәсәт ялғанға – хәҡикәт кейемен, ә хәҡикәткә ялғанлыҡ кейемен кейҙерә, тиҙәр бит. Заман һәм ысынбарлыҡ быны раҫлай килә. Ул ғына ла түгел, бер яктан, Көнбайыштағы даирәләр икенсе донъя һуғышы һөҙөмтәләрен йә онотторорға, йә бөгөнгө сәйәси конъюнктура мәнфәғәттәренән сығып баһаларға ынтылһа, икенсенән, үҙ халҡыбыҙ араһында ла Бөйөк Ватан һуғышын, изге Еңеүҙе кәмһетергә маташыу күренә. Йәш быуында халыҡтың фажиғәһе һәм ҡаһарманлығы беҙ аңға һәм ҡанға һеңдереп үҫкәнсә тетрәнеү уятмай. Бәлки, был минең генә шәхсән тойомлауымдыр.

Ҡайғы-хәсрәтте йөрәгеңдә тамырландырмау хәйерле. Яугирҙар, тол ҡатындар, етемдәр былай ҙа һәр июнь таңындағы шәфәкте – янғын шәүләһе, майҙағы ләйсән ямғырын күҙ йәштәре менән сағыштырып ғүмер кисерҙе. Рәсми сәхифәләрҙә кешелекте тетрәндергән яу "икенсе донъя һуғышы" тип теркәлһә лә, беҙҙән алдағы һәм беҙҙең быуын йөрәгендә ул Бөйөк Ватан һуғышы буларак һаҡлана. Эйе, нәҡ Бөйөк һәм Ватан.

Етем үҫеүҙең, матди мохтажлыҡтар менән бәйләнгән булыуынан бигерәк, ҡанатһыҙ икәнлегеңде тойоу ауырыраҡ. Ғүмереңдең ҡайһы бер мәлдәрендә "әсәйем!" тип иңрәгәндә был өндәшеү-һыҙланыу атайыңа ла төбәлә. Уны һис ҡасан да күрмәһәң дә, ҡулынан һыныҡ икмәк алмаһаң да. Һуғыш сыҡҡанда ҡатынымдың атаһы Ғәзәйер Сәғитовка 36 йәш булған. Тәүге көндәрҙә фронтҡа йәшен-ҡартын һепергән мәлдәрҙә лә уға ҡағылмағандар. Мәсьәлә шунда: XX быуат баштарында уҡ әле Әбйәлил районының Күсем, Айыуһаҙы, Йәлембәт, Ниязғол ауылдары тирәһендә ифрат бай марганец мәғдәне ятҡылыҡтары асылған. Мәғдәнде бер юлы бер нисә урында сығара башлағандар. Күсем руднигында, мәҫәлән, мәғдәндең тәүге партияһы 1916 йылда уҡ алынған. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Күсемдә генә 350 шахтер эшләгән. Магнитогорск металлургия комбинатына ай һайын 4-5 мең тонна мәғдән оҙатылып торған. Ә марганец ҡушмайынса, броня ҡоросон иретеү мөмкин түгеллеге мәғлүм.

Ғәзәйер Сәғитов әлеге шахтала эшләгән һәм бер ни ҡәҙәр ваҡыт бронь уны фронтҡа саҡырыу ҡағыҙынан һаҡлаған. Ябай аҡыл менән уйлағанда, дәүләт өсөн кем кәрәгерәк: йүнләп ҡоралланмаған, рәтләп өйрәтелмәгән һалдатмы, әллә броня өсөн марганец сығарыусы таусымы? Нисек кенә булмаһын, түрәләрҙең фекерләү логикаһы үҙенсә һәм ҡырҡ икенсе йылдың башында әлеге бронь юҡҡа сығарылып, шинель кейгән таусы, 287-се уҡсы дивизия рядовойы Ғәзәйер Сәғит улы Сәғитов шул уҡ йылдың 8 сентябрендә һәләк булған. Баҡый илендәге төйәге – Орел өлкәһе Мценск районының Зеленый Холм ауылында.

Совет историографияһы һәм, уға эйәреп, нәфис әҙәбиәт, кинематография, минең ҡарашҡа, фактологик һәм әхлаҡи хата ебәрҙе, шикелле. Хәтерегеҙҙәлер, һуғыштан һуң байтаҡ ваҡыт алман хәрби хеҙмәткәрҙәре – аңра, тупаҫ, ҡурҡаҡ итеп, ә Адольф Гитлер үҙе ене ҡупҡан бер йүләр рәүешендә күрһәтелә килде. Национал-социалистик идея, әгәр миллиондарса кешене мауыҡтыра алған икән, ифрат етди идеологияның нигеҙен тәшкил иткән. Меңдәрсә йыллыҡ тарихы, мәҙәниәте булған алман халҡы, нацистик идея менән тома-

ланған хәлдә лә үҙенә хас зирәклекте, зыялылыкты, хәрби сәнғәт оҫталығын, тәртипте һәм алдына ҡуйған бурысты мотлаҡ үтәргә әҙер тороу һәләтен юғалтмаған. Бер генә ҡәүемдең дә генетик тамырҙары яҙын-көҙөн төшә лә үтә торған ҡырауҙарға ғына бирешеп бармай.

Етемлек яҙмышы нисек кенә әсе булмаһын, әсәһе иҫән сакта бала үкһеҙ ҡалмай. Үҙебеҙ ғүмер юлының һуңғы аҙымдарын һанау осоронда булһаҡ та, ҡатыным менән мин әсәйҙәребеҙҙең сабырлығына һәм рухи ныҡлығына һаман хайранбыҙ. Улар үҙҙәренең әсә бурысын дәүләт иңенә күсереп һалыу тураһында уйлап та ҡарамаған. Дәүләттән ярҙам булһа, рәхмәт, юҡ икән, тимәк, уның беҙҙән дә булайыраҡ хәстәрҙәре барҙыр. Әсәйҙәребеҙгә, мөғәллимдәребеҙгә йәнә бер яктан рәхмәтлебеҙ: улар беҙҙә һуғыш үткән һәр кемгә ҡарата эскерһеҙ ихтирам тәрбиәләне. Һәр яугирҙа беҙгә атайҙарыбыҙ рухы күренгәндәй булды һәм, ысындан да, ғүмер юлыбыҙҙа элекке фронтовиктарҙан ифрат күп изгелектәр татыныҡ.

1941 йылдың июнендә матди ике көс кенә түгел, бәлки донъяға, йәшәүгә, киләсәккә ике төрлө ҡараш бер-береһенә ҡаршы сыҡты. Һәр агрессив ниәттең дә үҙенә күрә аҡлаусы сәбәптәре була. Гитлерҙың да “Минең көрәш” тигән китабында, табын янындағы әңгәмәләрендә, Йозеф Геббельс, Альберт Шпеер һәм башҡаларҙан ҡалған яҙмаларҙа “алман халҡы алдына Хоҙай үҙе ҡуйған миссия, донъяны үҙгәртеп ҡороу, англо-сакс булмаған халыҡтарҙың кешелек ғаиләһендәге урыны” һ.б. күп төрлө мәсьәләләр хаҡындағы фәлсәфәне табырға мөмкин. Нацизм идеологияһының үҙәген тәшкил итеүсе был “хеҙмәттәр” күптән инде рус телендә баҫылып сыҡты. Уларҙы күрмәмешкә һалышыу, уҡымау, ғөмүмән, нацистик идеологияның барлығын инҡар итеү генә улар юҡ тигәнде аңлатмай. Киреһенсә, әле лә хәүефле көс булып ҡалыусы был идеологияның тамырҙарын һәм уларҙы туйындырыусы мөхитте нығыраҡ белергә кәрәк. Дошмандың ниндәй ҡоралға эйә булыуын, тылдағы хәлдәрен, сәнәғәт һәм аҙыҡ-түлек базаһын белмәйенсә, уны еңеп булмай. Рәсәйҙең Көнбайыш менән ҡапма-ҡаршы тороуы көсәйә барған һайын, уға илдең эсендә лә, унан ситтә лә неофашизм менән яҡынан осрашыу ихтималлығы көсәйә бара.

Бер ваҡыт, “Хәтер” серияһының һуңғы томын әҙерләү сираты еткәс, миңә мөхәрриәттең эшсе төркөмө етәксеһе полковник Рафиҡ Вәлиев шылтыратты. “Һуңғы томды ниндәйҙер йомғаҡлау һүҙе менән ябыу кәрәк. Ғалим кеше, хөрмәтле бер һуғыш ветеранына мөрәжәғәт иткәйнек, Марсель атаһын яуҙа юғалтҡан егет, һуғыш темаһына ул ихлас мөнәсәбәттә, яҙырға тейеш, тип яуап бирҙе. Ризаһыңмы?”

Бындай осраҡта ризалыкты һорап тороу – артыҡ эш. Әҙәм балаһының хәтере ныҡ та, игелекле лә булырға тейеш. Һуғыштан һуң байтаҡ ғүмер хәтерҙе юйып йәшәүебеҙгә әле булһа үкендерә. Әйтерһең, кемдер ҡасандыр үткән һуғыш тураһында хәтерләүҙе шик аҫтына ҡуйырға тырыша. Был, әлбиттә, тиктомалға түгелдер, сөнки Бөйөк Еңеүгә алты тиҫтә ярымдан ашыу йыл тулһа ла, күптәр кешелекте һуғышҡа дусар иткән ысын сәбәптәрҙе, һуғышҡа ҡәҙәрге, һуғыш осорондағы һәм унан һуңғы ҙур сәйәсәттең йәшерен пружиналарын, совет халҡының юғалтыуҙары ҙурлығын һаман белмәй. Кешелек үҙ тарихындағы ғәйәт оло фажиғә тураһында һәр яклап хәбәрҙар түгел.

Яҡындары араһындағы сафсаталарының береһендә Гитлер шундай тезисты алға ҡуя: “...Рейхтың көнсығыштағы ерҙәрендә үҙебеҙ буйһондорған халыҡтар өҫтөнән хакимлыҡ иткәндә төп бер принципҡа таянырға кәрәк. Аныҡлап әйткәндә, шәхсән азатлыҡтар менән файҙаланырға теләүселәргә ирек бирелһен, ниндәй ҙә булһа дәүләт контроле булмаһын һәм, шулай итеп, әлеге ҡәүемдәр мәҙәни үсеш йәһәтенән мөмкин ҡәҙәр түбән дәрәжәлә ҡалһын өсөн, барыһын да эшләргә кәрәк”.

Күренеүенсә, фюрер һуғыштағы йырткыслыҡтар, халыҡтарҙы физик юҡ итеү тураһында асыҡтан-асыҡ фекерҙәр әйтмәй. Әммә был ғына Гитлер тормошҡа ашырған сәйәсәттең гуманлылығы тураһында һөйләмәй. Мәсьәлә нескәрәк тә, тәрәнерәк тә. Интеллектуаль үсеше тотҡарланған йәки туктаған ҡәүем милләт булып ойошоп йәшәүгә, үҙ дәүләтселеген булдырыуға, цивилизациялы халыҡтар ғаиләһенә инеүгә дәғүә итә алмай. Ундай халыҡ, ахыр килеп, ирекһеҙ ассимиляция ҡорбаны була, телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, традицияларын юғалта, ҙур милләт эсенә йотолоп юғала.

Ҙур нәмәнең ололоғо алыҫтаныраҡ яҡшы беленә. Беҙ, әле булһа яугирҙар ҡаһарманлығының сығанаҡтарын асырға, йәштәрҙе шул сығанаҡтарға яҡынлаштырырға тырышабыҙ. Ҡоласын фекер менән дә, ҡараш менән дә иңләй алмаҫлыҡ һуғыш хаҡындағы хәтирәләр кешелек йәшәгән сакта һәр ваҡыт киләсәк бы-

уындарҙың хәтерен ҡуҙғытып торасаҡ, тип ышанғы килә. Тарихсылар киләсәктә, бәлки, һуғыштың сәбәптәренә, уның барышына һәм һөҙөмтәләренә икенсерәк күҙ менән ҡарар, әлегә билдәле булмаған яңы фактар һәм хәлдәрҙе асыҡлар, көтмәгән һығымтаға килер. Әммә бер нәмә үҙгәрешһеҙ ҡалыр – ҙур нәмәнең ололоғо һаҡланыр.

Күренекле француз яҙыусыһы Анатоль Франс: "Һуғыш – еңеү менән дә аҡлана алмаған енәйәт", – тип әйтеп ҡалдырған. Бөйөк Ватан һуғышы тураһында һөйләгәндә беҙ, башлыса, Германия яғынан хәрби агрессияны күҙ уңында тотабыҙ. Әммә самолет – осһон, пушка атһын өсөн улар артында иҡтисад булырға тейеш.

Яулап алыу һуғыштары, ҡағиҙә буларак, һөжүмгә дусар ителгән ил халҡына азатлыҡ, демократия алып килеү, шул халыҡтың мәнфәғәттәре өсөн көрәш, прогрессив дәүләт ҡоролошо урынлаштырыу кеүек демагогик фразеология төргәгенә төрөлөп башлана. Ғәмәлдә иһә агрессив һәр сәйәсәттең төбөндә сеймал, милек, геосәйәси хакимлыҡ маҡсаттары ята. Шулай, фашистик Германия етәкселеге лә һуғыштың мөһим маҡсаты итеп Советтар Союзының ғәйәт ҙур милли байлыҡтарын һәм тәбиғи ресурстарын ҡулға төшөрөүҙе, Германияның иҡтисади потенциалын күп мәртәбә арттырыуҙы һәм, шуға таянып, бөтә донъяла хакимлыҡ итеүҙе ҡуйған. Был маҡсаттар һеҙгә ҡайһы бер дәүләттәрҙең хәҙерге тышҡы сәйәсәтен хәтергә төшөрмәйме? "Беҙҙең маҡсат – үҙебеҙ өсөн айырыуса хәрби-иҡтисади ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған бөтә өлкәләрҙе лә яулап алыу", – тип тәкрарлар булған Гитлер. Был тезис та таныш.

Әсә ҡарынында өс аҙна үтеүгә сабыйҙың йөрәге хасил була һәм ул тибә лә башлай, тиҙәр. Әгәр сағыштырыуҙарҙы дауам итһәк, яҙғы айҙар тәбиғәте лә – балаһына көн яҡтыһы күрһәтергә әҙерләнгән әсә һымаҡ. Тәбиғәттә лә бихисап йән тереклек итә, иҫәпһеҙ-һанһыҙ тамырҙар тибә. Беҙгә ошо йәндәрҙең янибыҙҙа булыуын күрергә, йөрәк ҡағыштарын һиҙергә өйрәнергә ине. Сәбәләнеүле бөгөнгө тормош үткәндәрҙе ашыҡмай хәтергә алырға, беҙҙән алда киткәндәрҙең ғүмеренә яҡты күңел менән ҡарарға форсат бирәп бармай. Тиҙҙән иркен баҫыуҙарыбыҙға сит илдәрҙә эшләнгән мөғжизә-культиваторҙар, тырмалар, сәскестәр сығыр, урак еткәс, шулай уҡ мөғжизә-комбайндар елдереп йөрөр. Механизатор хеҙмәтен хәҙер ауыр тип әйтмәҫкә лә ярайҙыр. Ләкин ошо ерҙәрҙе иң башлап кемдәр һөргән, Башҡортостан баҫыуҙарын ил өмөтләнеп торған донъяға кем әүерелдергән?

Онотолоп барған исемдәрҙе һәм фактарҙы яңыртырға теләүемдең сәбәбе ябай: әгәр Бөйөк Ватан һуғышына беҙ көслө рух менән килеп инмәһәк, дошманды теҙ сүктерә алыр инекме икән? Хәйер, һуғыш барған йылдарҙа ла ул рух төшмәгән. Беҙ Дүртөйлә МТС-ы тракторсыһы Фәүзиә апай Ҡаһармpraвaның ошо осорҙа ни ҡәҙәре ҡаһарманлыҡтар күрһәтеп эшләүенә бер аҙ хәбәрҙарбыҙ. Уңғандарҙы дәүләт тә баһалай белгән. 1944 йылда, мәҫәлән, Илеш районының Чеверев исемендәге колхозы рәйесе Андриан Белоусов, Дәүләкән районының "Ҡыҙыл Урал" колхозы рәйесе Ниғмәтбай Зарипов, Саҡмағош МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры Исмәғил Кашаев, Яңауыл районының "Урал" колхозы рәйесе Ғәлимә Мөжипова, Баймаҡ районының "Йылайыр" совхозы комбайнсыһы Василий Солонин, Ғафури районынан 69 йәшлек һауынсы Хәҙисә Рәжәповалар дәүләттең иң юғары Ленин ордены менән бүләкләнгән.

...Урамда, йәкюлағы ҡарғаларҙы өркөтөп, Ҡытай петардаларын шартлаталар. Һәр бер йәш-елкенсәктең тиерлек ҡулында – төрөктәр әсеткән һыра. Егеттәр дәүләт әләмен ҡыҙҙарҙың биленә урай. Ҡырҡ биштең майында минең Йәһүҙә Ибраһимов апам, танкист һәм офицер, беренселәр рәтендә Берлинға ингән. Бер нисә көн үтеүгә Мишкә районы егете сержант Ғәзи Заһитов илебеҙҙең ҡыҙыл әләмен Рейхстаг түбәһенә элгән. Унан күпкә алдараҡ, 1813 йылда, башҡорт һыбайлылары бөйөк алман шағиры Гетеға уҡ-һаҙаҡ бүләк иткән. Туп тибеү йәки сәкән һуғыу милли мәртәбәне күтәрәме-юҡмы, иллә-мәгәр иген игеү һәм ил һаҡлау шул мәртәбәнең иң юғары күтәрелеүе булыуына инанғанмын.

Тормошобоҙ ығы-зығы менән үтә. Беҙ изге хәтерҙе һуғыш батырҙары тураһында яһалма хәстәрлек алмаштырған ҡәһәрле заманға тура килдек. Яугирҙарыбыҙ Сталинград янындағы һуғыштарҙа һәм Берлинды алғанда имен ҡалып та, үҙҙәре ҡотҡарған илдә һаман мохтажлыҡ кисерә, теләнсе рәүешендә йөрөй. Бәлки, бер ваҡыт был да үтер. Тик ул ваҡытта яҡын күргән кешеләребеҙ ҙә, үҙебеҙ ҙә булмабыҙ. Был ерҙә Һеҙҙе ташлап китергә теләмәгән йәнебеҙ генә ҡалыр.

*Марсель ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВ.*

# ИМАН ПСИХОЛОГИЯҺЫ

**Бөгөн күптәр психолог ярҙамына мохтаж. Ысын мәғәнәһендә бәхетһеҙлеккә тарығандарҙан алып оҙайлы декрет ялында ултырған йәш әсәйҙәргә хәтлем. Әммә күңелендә иман нығынған кешегә ул белгестәрҙең кәрәге бармы икән? Сөнки динебеҙҙең үҙ психологияһы. Кеше ауырлыҡтарҙы һынау итеп ҡабул итә белһә, булғанына шөкөр ҡылһа, үҙен хәллерәк йәшәгәндәр менән сағыштырмаһа, тирә-яҡтағы яманлыҡтан ғибрәт алһа, көфөр итһә, йән тыныслығы, көс табыр. Сабыр, түҙемле булыр һәм һәр ваҡыт Аллаһ яҡлауын тойор.**



## ИМАНДЫ НЫҒЫТЫУСЫ СИФАТТАР:

- кешеләргә йылы өләшкән ихлас йылмайыу;
- матур мөнәсәбәттәргә күпер һалған йылы һүҙҙәр;
- мохтаждарҙы ҡыуандырып Аллаһ ризалығын алыу;
- Ҡөрьән уҡыу. Уның аша тормош, йәшәү мәғәнәһе тураһында уйланыу;
- Хоҙайҙы һәр сак күңелдә йөрөтөү. Доға ҡылыу, гонаһтарға ысын күңелдән үкенеү, уларҙың кисерелеүен һорау;
- балаларҙы иманлы итеп тәрбиәләү;
- асыҡ, ҡыҫҡа, үтә күренмәле кейемдәр кеймәү;
- юғары ҡиммәттәрҙе хөрмәт иткән, иманлы, белемле ҡатын-ҡыҙ менән дуҫлашыу;
- атай-әсәйгә йылы мөнәсәбәт, туғандар менән ара өҙмәү, күршеләрҙе хөрмәт итеү, етемдәрҙе иғтибарһыҙ ҡалдырмау;
- фәһемле, ҡыҙыҡлы китаптар уҡыу.

## ИМАНҺЫҘЗАРҒА ХАС СИФАТТАР:

- буш бәхәстәр, ғәйбәттәр менән ваҡытты әрәмгә уҙғарыу;
- аҡсаға хырызлыҡ, мәғәнәһеҙ рәүештә байлыҡ йыйыу;
- кешеләрҙең етешһеҙ яҡтарын эҙләү, бер-береңде яманлау;
- вайымһыҙ, буш ҡыуыҡ әҙәмдәр менән ваҡыт сарыф итеү, шулай уҡ күп ваҡытты байрамса үткәреү;
- гигиена талаптарын үтәмәү, өйҙәге тәртипһеҙлек;
- тыйылған харам эсемлектәр, тәмәке, наркотиктар ҡулланыу;
- үткәндәрҙә булған хаталарҙы йыш иҫкә төшөрөү;
- аҡсаны тыйылған нәмәләргә сарыф итеү;
- намаҙ, ураҙаны ҡалдырыу.

## КҮҘ ТЕЙЕҮҘӘН ҠУРСАЛАУ ӨСӨН УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

بِسْمِ اللهِ اللَّهُمَّ أَذْهِبْ حَرَّهَا وَبَرْدَهَا وَوَصَبَهَا قُمْ بِإِذْنِ اللهِ

**Бисмилләһир-рахмәнир-рахим.**
**Бисмилләһ. Аллаһүммә әҙһиб хәрраһә үә бәрдәһә үә үәсәбәһә. Ҡум би иҙнил-ләһ.**
**Мәғәнәһе: “Бисмилләһ. Эй, Аллаһ! Был күҙ тейеү сәбәпле миңә килгән тән ҡыҙыулығын, туңып ҡалтыраныу биҙгәген һәм сиремде юҡ итә күр”.**

## БЫЛ ХАҠТА УЙЛАНЫУ МӨҺИМ

- Аллаһы Тәғәлә һорағандарға ярҙам бирер, ысын күңелдән үкенеп тәүбәгә килгәндәрҙе ғәфү итер. Уға яҡынайыуҙан бер кемгә лә, бер ҡасан да зарар юҡ, тик файҙа ғына;
- көсһеҙҙәргә итәғәтле булығыҙ, аҡсаһыҙҙарға ярҙам итегеҙ, күңелегеҙҙә асыу йөрөтмәгеҙ;
- һәр ваҡытта ла оптимист булып ҡалығыҙ, сөнки Юғары Көс һеҙҙең янда;
- гел хәйерлеһен теләгеҙ. Ни өсөн тигәндә, кешегә нимә хәйерле икәнен тик Аллаһ белә;
- йәштәрегеҙҙе һөртөгөҙ, зарҙарығыҙҙы ситкә ҡыуығыҙ. Аллаһ тураһында уйлағыҙ, ул һеҙҙе ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫ;
- был донъя кемдәргәлер гел бәхет өләшә тип яңылышмағыҙ, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәгеҙ. Бөтә нәмәһе булып та, һис бойоҡмаған, эсе бошмаған бер әҙәм дә юҡ;
- һәр ваҡыт юғары маҡсаттар ҡуйығыҙ;
- борсолғандың хатаһын төҙәткәнен йә ҡайғырғандар юғалтҡанын тапҡанды ишеткәнегеҙ бармы? Ауыр һынауҙар, хәсрәттәр көтмәгеҙ, һаулыҡҡа, тыныслыҡҡа, бәрәкәткә ышанығыҙ;
- йөрәгегеҙҙәге күралмаусанлыҡ утын һүндерегеҙ, һеҙҙе ҡасандыр ҡыйырһытҡан кешеләрҙе ғәфү итегеҙ;
- ғөсөл ҡойоноу, тәһәрәт алыу теләһә ниндәй борсолоуҙы дауаларлыҡ ҡиммәтле дарыу – шуны онотмағыҙ. Быларға өйрәнеү өсөн китаптар етерлек;
- хуш еҫле сәскәләргә генә ҡунған бал ҡорто һымаҡ, гел яҡты уйҙар, яҡшы ниәттәр менән йөрөгөҙ;
- һеҙ кеше ғәйебен, етешһеҙлеген тикшереү өсөн ваҡыт әрәм итергә тейеш түгел;
- бер нәмәнән дә ҡурҡмағыҙ, сөнки Аллаһ һәр кемдең дә янында. Ҡурҡҡандарға тағы ла күберәк һынауҙар ебәрермен тигән Ул;
- көнләшеү шәхесте үлтерә, ә ҡыҙғаныу дөрләп янған утҡа тиң;
- бөгөн әҙер түгелһегеҙ икән, иртәгә лә бер нәмә лә эшләй алмаясаҡһығыҙ. Иртәгәне көтмәгеҙ;
- буш бәхәстәр, ғәйбәт ҡупҡан урындан тыныс ҡына китегеҙ;
- гел изге эштәр ҡылығыҙ – бәхетле булырһығыҙ;
- көнсөлдәрҙе, һеҙгә яуызлыҡ эшләгән дошмандарығыҙҙы Аллаһ ҡарамағына тапшырып, онотоғоҙ;
- хәләл булмаған рәхәтлектәр, ләззәт аҙағынан оло юғалтыуҙар, үкенеүҙәр, бәхетһеҙлек килә – шуны гел иҫегеҙҙә тотоғоҙ.

## БӘХЕТ БАЙЛЫҠТА ТҮГЕЛ...

Бернард Шоу былай тигән: “Мин ҡасандыр ысын мәғәнәһендә ярлы булдым тип әйтә алмайым. Һәр ваҡыт кәләмем менән икмәк таптым, Британ музейының ҙур китапханаһына, Трафальгар майҙанындағы иң шәп галереяға йөрөү мөмкинлегем булды. Тағы нимә өсөн аҡса түҙҙыра алыр инем икән? Тәмәкегәме? Тартмайым. Шампанғамы? Эсмәйем. Һуңғы мода буйынса тегелгән костюмдар алыуғамы? Ул саҡта байҙар үҙ һарайҙарына кисәләргә саҡыра башлар ине. Был миңә кәрәкме? Юҡ. Аттар һатып алыуғамы? Улар хәүефле. Машиналармы? Уларҙы йәнем һөймәй. Хәҙер ошоларҙың барыһын бер юлы һатып алырлыҡ аҡсам бар, ләкин ихтыяжым шул уҡ. Бәхет байлыҡта түгел ул. Ми-ңә уҡыр өсөн – китап, уйланыр өсөн – картина, яҙыр өсөн тема кәрәк”.

## РӘХМӘТ ТОЙҒОҺО

Бәхеттең иң еңел рецебы, нервыларҙы тынысландырыуҙың иң шәп ысулы – Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле булыу. Уйлап ҡарағыҙ әле: Ул беҙгә ишетеү, күреү, уйлау, һөйләшеү, йөрөү һәләте, күптәргә талант, далан биргән. Балалар, йәшәр урын насип иткән! Ҡайһы берәүҙәр ошо ниғмәттәрҙе һиҙмәй ҙә. Асарбаҡ, ҡот осҡос ғәрип, сирлеләрҙе күрһәләр, үҙ хәлдәре өсөн шөкөр итерҙәр ине. Хатта палатҡаларҙа,

балсыҡ өйҙәрҙә, сүллектәге ағас аҫтында йәшәгәндәр ҙә рәхмәтле булыр ине, валлаһи. Беҙҙе камил итеп яратҡан Аллаһы Тәғәләне данлау, уға сикһеҙ рәхмәтле булыу мөһим. Йән, тән ауырыуҙары менән ыҙаланғандар, күреү, йөрөү һәләтен юғалтҡандар, балаһыҙ ҡалғандар менән сағыштырығыҙ үҙегеҙҙе. Күршенекенән шәберәк йорт йыһаздары, машина, дәрәжә тип ҡыумағыҙ!

## БӘХЕТЛЕ ҠАТЫН

Орисон Свит былай тип яҙған: “Наполеон Европаны баҫып алырҙан алда уҡ Жозефинаға өйләнеп шәп иткән. Уның иғтибарлы мөнәсәбәте, арыу холҡо иренең эшенә ыңғай йоғонто яһай. Был ҡатын бөтәһен дә үҙенең бәхете менән нурландырған, ялсыларына ла ауыр һүҙ әйтмәгән, бойормаған”. Ысынлап та, кешенең изгелеге янындағыларҙы бәхетле итә. Күркәм холоҡ иҫ киткес көскә эйә. Ә ҡатын-ҡыҙҙың матурлығын был сифат көсәйтә генә. Әсә кеше бәхетле икән – балалар ҙа шат, ирең дә ҡәнәғәт. Мәҫәлән, ошондай ҡатындар ҙа була: ире ҡыуанып эштән ҡайта, бала-сағаһы ла шау-гөр килеп өҫтәл артына ултыра. Рәхәтләнеп һөйләш, көләш, әлхәмдүлилләһ, ризыҡ етерлек. Тик ҡатын ошо мәлде генә көткәнме ни! Балалары алдында хужалыҡ мәсьәләләре, көнкүреш мәшәҡәттәре, эштәге проблемалар тураһында хәбәр ҡуйырта, ирен игәй башлай. Был саҡта тамаҡҡа аш үтәме икән? Сабыйҙар күңелһеҙ генә ашыҡ-бошоҡ ҡапҡылай ҙа тиҙерәк тороп китә һала, ирҙең дә ашағаны таштыр. Ҡатын ғаиләһен бәхетһеҙ итә, шулаймы?

## РИЗА БУЛЫУ

Дейл Карнеги былай тип яҙа: «Бер осор минең көсөм етмәҫтәй мәсьәлә килеп тыуҙы. Ҡайғырҙым, тән йоҡоларым осто, ҡыҫҡаһы, ни эшләргә лә белмәнем. Шулай бер йыл үтте. Мәсьәлә үҙгәрешһеҙ ҡалды һәм мин яҙмышыма күндем. Баштан уҡ үҙемдә шағир Уолт Уитмен тәҡдим иткәнсә тотһам яҡшыраҡ булғанлығын аңланым. Бына нимә ти ул: “Ҡараңғылыҡты, стихия бәләләрен, аслыҡ, бәхетһеҙлекте хайуандар һәм ағастар кеүек ҡабул итеү һәйбәтерәк. Ун ике йыл көтөү көттөм һәм бер һыйырҙың да көтөүлек янғанға, үлән ҡойто булғанға, үгеҙҙең икенсе һыйыр янына киткәненә борсолғанын күргәнем булманы. Хайуандар бөтә бәләләрҙе лә тыныс ҡабул итә. Шуғалырмы, уларҙа нервы ауырыуҙары, ашҡаҙан язваһы сире бик һирәк осрай”.

**Был донъяла бөтә нәмә Аллаһы Тәғәлә ҡушыуы буйынса хәл ителә. Унан уҙып бер ни ҡылыу мөмкин түгел.**

АЛТЫНГӨЛ.



шоңҡар

**“ЭЙ, БЕҘҘЕҢ РАББЫБЫҘ! ҮҘЕМДЕ, АТА-ӘСӘМДЕ ҺӘМ БАРСА МӨЬМИНДӘРҘЕ ЯРЛЫҠА. ҠИӘМӘТ КӨНӨНДӘ ХУРЛЫҠҠА ТӨШӨРӘ КҮРМӘ”.**

*“Ибраһим” сүрәһе, 41-се аят.*

шоңҡар





# ДАРЫУ ҮЛӘНДӘРЕ



шоңҡар китапханаһы



Әремдән әҙерләнгән төнәтмәне аппетит асыу, ашҡаҙан эшмәкәрлеген әүҙемләштереү һәм тын алыу органдарын дауалау өсөн эсәләр. Тағы ла ул үт һыуын ҡыуыу, һейҙерткес, ауыртыуҙы баҫыу, тынысландырыу һәм селәүсен төшөрөү (глистогонное) сифатына эйә. Бынан тыш, әремде быуын сыҡҡанда, һеңер тартылғанда тиҙ уңалтыу сараһы итеп ҡулланалар.



## ЮЛ ЯПРАҒЫ

Был үләндең таҙа, бөтөн япрактарын сәскә атҡан саҡта уҡ йыйып алып, ҡояш төшмәгән ерҙә киптерәләр. Ҡара йәшел төҫкә ингәндәре дауалау өсөн яраҡлы. Япраҡтан әҙерләнгән төнәтмә ашҡаҙан һәм эсәк сей яраһына (язва), бронхит, колит ауырыуҙарына ҡаршы ҡулланыла. Шешкән тамаҡты йомшарта, ҡаҡырыҡ сығарыуға булышлыҡ итә. Шулай уҡ йәшел япраҡ төрлө яраларҙы тиҙ арала уңалтыуға һәләтле.

* * *





**кеүек бер һәм ике йыллыҡ үҫемлектәргә ҡағыла.**

**— Ағас йәки ҡыуаҡ ботаҡтарын һындырмай, сәскәләрен генә киҫеп алығыҙ.**

**— Тамыр һәм тамырһабаҡтарҙы (корневище) емештәре өлгөрөп, орлоҡтары ҡойолоп бөткәндән һуң ғына ҡаҙып алырға рөхсәт ителә. Йәш үҫентеләргә бөтөнләй ҡағылмау хәйерле. Үҫемлек орлоҡтарын сәсеп китегеҙ.**

**— Бөрөләрҙе үҫеп ултырған ағастан түгел, ә ҡырҡылғандарынан ғына йыйырға кәрәк.**

**— Ағасты ҡоротмау өсөн ҡабыҡты олон төбөнән йәки төп олондан түгел, ә ботаҡтарынан йәки бысылған ағастан алығыҙ.**

**— Бер нисә йыл рәттән шул уҡ ерҙән һары мәтрүшкә, мәтрүшкә, кейәү үләне (чабрец) кеүек үҫемлектәрҙе йыйырға тырышмағыҙ. Улар өс-дүрт йыл көс тупларға тейеш.**

* * *

Билдәле булыуынса, үҫемлектең шифалы матдәләре бөрө, ҡабыҡ, япраҡ, сәскә, емеш, орлоҡ, тамырҙың өлгөргәнлек осоронда ғына туплана.

Бөрөләрҙе (ҡайын, тирәк, ҡарағай) иртә яҙ менән март-апрель айҙарында йыйырға кәңәш ителә. Был ваҡытта улар ҡабарған, әммә япраҡ ярмаған була.

**БАШҠОРТОСТАНДА ҮҪКӘН ШИФАЛЫ АҒАС, ҮҪЕМЛЕК-ҮЛӘНДӘРҘЕҢ ИҪӘБЕҺАНЫ ЮҠ. БЕҘ УЛАРҒА ЛАЙЫҠЛЫ ИҒТИБАР БҮЛЕП, ТӘРБИӘЛӘП ҠУЛЛАНҺАҠ, ҺАУЛЫҒЫБЫҘҒА НИ ТИКЛЕМ ҘУР ФАЙҘА КИЛТЕРЕР ИНЕК. ҠЫҘҒАНЫСҠА ҠАРШЫ, БЕҘ БАРЫБЫҘ ҘА ҠАЙҺЫ ҮЛӘН НИНДӘЙ АҒЗАНЫ ДАУАЛАЙ АЛЫУЫ ХАҠЫНДА ХӘБӘРҘАР ТҮГЕЛ. ШУҒА КҮРӘ КИЛӘҺЕ КИТАП-ҠУЛЛАНМАБЫҘ ШИФАЛЫ ҮЛӘН-ҮҪЕМЛЕКТӘРҘЕҢ ҮҘЕНСӘЛЕГЕНӘ, УЛАРҘЫ ДӨРӨҪ ЙЫЙЫУ, ҺАҠЛАУ ҺӘМ ФАЙҘАЛАНЫУҒА БАҒЫШЛАНА.**

**Шифалы үлән төрҙәре бихисап, шулай ҙа улар менән һаҡ эш итергә кәрәк. Кәмендә түбәндәге дарыу үләндәрен йыйыу буйынса дөйөм ҡағиҙәләрҙе үтәү мөһим:**

**— Япраҡтарҙы ағастан өҙмәй, бысаҡ менән һаҡ ҡына киҫегеҙ. Ҡыуаҡтағы бар япраҡтарҙы ла алырға ярамай, кәмендә дүрттән өс өлөшө ҡалырға тейеш.**

**— Күп йыллыҡ үҫемлектәр икенсе йылға ла орлоҡ бирһен өсөн, уның тамырын ҡалдырып, өҫтөн һаҡ ҡына киҫеп алығыҙ.**

**— Дарыу сәскәһен йыйырға ниәтләйһегеҙ икән, бер аҙын орлоҡҡа ҡалдырығыҙ, бигерәк тә был аҡ сәскәгә (ромашка) һәм аҡ әнис (тмин)**





**ТӘБИҒӘТТӘ ҺӘР НӘМӘ КЕШЕ ӨСӨН ЯРАЛТЫЛҒАН. ХАТТА АЯҠ АҪТЫНДА ҮҪКӘН ҮЛӘНДӘРҘЕҢ ДӘ ҺАУЛЫҠ ӨСӨН БАШҠАРҒАН РОЛЕ БАҺАЛАП БӨТКӨҺӨҘ. ШУҒА УЛАР МЕНӘН АҠЫЛЛЫ ФАЙҘАЛАНА БЕЛЕРГӘ КӘРӘК, ЙӘҒНИ ТИРӘ-ЙҮНГӘ ҺАҠЛЫҠ КҮРҺӘТЕРГӘ, ТӘБИҒӘТ БАЙЛЫҠТАРЫН ИСРАФ ИТМӘЙ, КИЛӘҺЕ БЫУЫНДАРҒА ҠАЛДЫРЫУ ТУРАҺЫНДА ЛА ХӘСТӘРЛЕК ҠЫЛЫРҒА ТЕЙЕШБЕҘҘЕР.**







Бөрөләрҙе ҡул менән йыялар, тик ҡарағайҙыҡын ғына үткер бысаҡ менән киҫеп алыу зарур. Киптереү урыны һалҡын булырға тейеш, сөнки йылыла уларҙың шытыуы ихтимал.

Ҡабыҡтарҙы ғәҙәттә яҙ башынан уҡ әҙерләйҙәр. Япраҡ ярмаған, ағас һуты күбәйгән мәлгә ҡабыҡ еңелерәк айырыла. Дарыу өсөн киҫелгән йәш ағастарҙы һайларға кәрәк.

Япраҡтарҙы үҫемлек сәскәгә томалған йәки сәскә атҡан сағында аҫҡы япраҡтарын ғына йыялар. Ә өҫтәгеләренә тейеү сәскә атыу һәм емеш биреү процесын тоткарлауы йәки бөтөнләй юкка сығарыуы ихтимал.

Сәскәләр бигерәк тә атыу мәлендә шифалы матдәләргә бай була һәм һаҡлағанда ла ҡойолоп бармай. Шуға уларҙы тап ошо осорҙа йыйырға кәрәк.

Үләндәрҙе лә сәскә атҡанда йыялар. Үлән остары 15-30 см оҙонлоғонда бысаҡ менән киҫеп алына.

Емеш-орлоктарҙы йыйыу өлгөрөү ваҡытына тап килергә тейеш. Тик үтә бешкәндәрен йыймағыҙ, уларҙа шифалы матдәләр кәмерәк.

Тамырҙарҙы яҙ башынан йәки йәй аҙағы-көҙ ҡаҙып алалар. Уларҙы тупрактан таҙартып, һалкын һыу менән йыуырға кәрәк.

* * *







## ҺАРЫ МӘТРҮШКӘ

Һары мәтрүшкә дарыуын июль-август айҙарында емеш бирер алдынан әҙерләргә кәңәш ителә. Япрактары менән сәскәле өҫкө өлөшөн 25-30 см оҙонлоғонда киҫеп алалар ҙа 40-60 С°-лы еләҫ ерҙә киптерәләр. Уны йыш ҡына әйләндереп торорға кәрәк. Киптән үләнде ботактарынан таҙартып ыуалар ҙа, иләк аша үткәрәләр.

Һары мәтрүшкә ревматизм, үпкә туберкулезы, ҡан ағыу, төрлө гинекологик ауырыуҙар, нервы, яҙва ауырыуҙарын дауаларға яраҡлы. Уны шулай уҡ ауыртыуҙы баҫыусы һәм һейҙерткес сара буларак та кулланалар. Хроник гастрит, ашкаҙан-эсәк ауырыуҙарынан, ауыҙ тиресәһенең шешеүенә ҡаршы файҙаланалар.



## ӘРЕМ

Төрлө сырхауҙы дауалау өсөн эремдең япрағы менән үләне файҙалы. Уны йыйыу сәскә атыу осоро башында башкарыла. Үләнде 25 см оҙонлоғонда киҫеп алып, күләгәлә киптерәләр.



## БӘПЕМБӘ

Бәпембәнең шифаһы – тамырында. Уны көҙ көнө, япрактары һулып бөткәс ҡаҙып алалар. Тамырҙы башта елләтәләр, аҙаҡ уны 40-50 С° ҡыҙыулыктағы мейестә йәки күләгәлә киптерәләр. Ул аппетитты аса, ашҡаҙан-эсәк юлының эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, бауыр ауыртыуы ваҡытында үт ҡыуыусы, каталаған ваҡытта эс йомшартыусы дарыу буларак кулланыла. Шулай уҡ бәпембә тамыры йокоһоҙлоҡ менән яфаланғандар өсөн файҙалы. Ул хатта организмды йылан ағыуынан таҙартыу һәләтенә эйә.



## БЕСӘЙ ҮЛӘНЕ (ВАЛЕРЬЯН)

Был дарыу үләненең дә тамырҙарын файҙаланалар. Уны көҙ көнө, емештәрен ҡойоп бөткәс, ҡаҙып алалар. Таҙартып йыуғас, тамырҙы буйына киҫеп тағы ла бер сайкаталар. Аҙаҡ уларҙы ике тәүлеккә еләҫ ергә таратып һалып торалар. Тамырҙарҙы киптереү өсөн 35 С°-тан да артмаған ҡараңғы ҡоро ер талап ителә. Уларҙы яйлап киптергән сакта ғына татлы еҫе һаклана.





Валерьянды йокоһоҙлок, стенокардия, истерия булғанда, баш ауыртканда (мигрень), ашкаҙан-эсәк юлы елһенгәндә, климакс ваҡытында һәм тынысландыра торған дарыу итеп кулланалар.



## ЕР ЕЛӘГЕ

Ер еләгенең емеше менән япрактары һаулык өсөн файҙалы. Еләкте иртән, ысык кипкәс йыялар. Аҙаҡ уны япрактарынан таҙартып, йока ғына итеп иләккә йәйеп һалалар. Башта уларҙы бер тәүлек тышта елләтергә, ә аҙак 4-5 көн 25-30 С°-та киптереп алырға кәрәк.

Ер еләге сәскә аткан сакта япрактарын киҫеп алалар ҙа, еләҫ ерҙә киптерәләр. Емеш һәм япрактар ашкаҙандың эшмәкәрлеген якшырта, аппетитты аса, һейҙерткес, ауырытыуҙы баҫыусы, ҡанды арттырыусы сара.

Төнәтмә бөйөр, талак, үт ҡыуығы, ашкаҙан-эсәк юлы, атеросклероз ауырыуҙарынан дауаланыу өсөн ҡулланыла.

Геморройға ҡаршы төнәтмәнән клизма эшләргә, кан һауған яраларҙы дауалау өсөн тәнгә һөртергә кәрәк. Еләктең һуты иһә һипкел, шеш һәм пигмент таптарын бөтөрә.





алырға кәрәк. Үтә эҫелә емештәрҙең ҡурышып бөтөүе бар. Артыш емештәрен шеш кайтарыусы, аппетит асыусы, һейҙерткес сара буларак кулланалар. Спиртта төнәткән емештәрҙе ревматизмдан дауаланғанда һөртәләр.



**АРЫҪЛАН ҠОЙРОҒО (ПУСТЫРНИК)** июнь-июль айҙарында сәскә ата, ә емештәре июль-августа өлгөрә, шуға ла уны ошо айҙарҙа йыйыу уңышлы. Үләндең өҫкө өлөшөн 30-40 см оҙонлоғонда ҡыркып алығыҙ ҙа, еләҫ ергә йока катлам менән йәйеп сығығыҙ. Йыйылған үләнде даими бутап торорға онотмағыҙ. Кипкән үләндең еҫе еңелсә, ә тәме әсе булырға тейеш. Был шифалы үлән йөрәк тибешенең ритмын яйлай, үҙәк нервы системаһын көйләй, артериаль кан баҫымын түбәнәйтә, тын ҡыҫылыуын кәметә, шеште кайтара, йоҡоно якшырта.



## БАЛАН

Дауалаусы саралары – ҡыуак ҡабығы һәм емеше. Ҡабыкты иртә яҙҙан апрель-май айҙарында һыҙырып алалар. Ағасты ҡорот-





яраларҙың тиҙ уңалыуына килтерә. Бронхит, эс китеү, аҙ канлылык (анемия), үпкә туберкулезы ауырыуын да дауалай, хатта сәс ҡойолоуын туктата.



## ҠАЙЫН

Дауалау сараһы буларак ҡайындың бөрөһөн, япрағын, һутын, дегетен һәм бәшмәген файҙаланалар. Ҡайын бөрөләрен иртә яҙ менән ағас япракка төрөлгән мәлдә йыялар. Бәләкәй ботактарын киҫеп, ҡараңғы һалкын бүлмәлә киптерәләр. Аҙак ҡул менән бөрөлрен йыйып, кабаттан ҡоро ергә ҡуялар. Һоро йәки көрән төҫкә ингәс кенә улар әҙер була.

Ҡайын япрағын май айында йыйыу отошло. Был ваҡытта улар йәш, еҫле була һәм бер аҙ йәбешеп тора. Киптереү эшен дә үрҙәгесә үтәргә кәрәк.

Ҡайын бөрөһөнән һәм япрағынан әҙерләнгән кайнатма һәм төнәтмәләр һейҙерткес, тирләткес һәм үт һыуы айырыу сараһы буларак эселә. Шулай уҡ атеросклероз, бронхит, тын алыу юлдарын, ашҡаҙан язваһын дауалау өсөн кулланыла. Ә ревматизм, бешкән урындарҙы уңалтыу һәм тире ауырыуҙарынан ҡотолоу, аяк тирләүен кәметеү өсөн уларҙан ванна, компресс яһайҙар. Ҡайын һуты иһә витаминлы диетик һутты алыштыра һәм бит тиреһен

## ИМӘН



Дауалау сараһы буларак халыҡ имәндең ҡайырын файҙалана. Яҙын ағас ботаҡтарының ҡабығын ғына алалар. Киҫелгән ҡабыҡты йомарлап, йоҡа ғына итеп күләгә ергә йәйеп һалалар. Дөрөҫ киптерелгән ҡабыҡ һығылмаҫҡа, тиҙ һынырға тейеш.

Имән ҡабығының ҡайнатмаһы эс киткән саҡта, ашҡаҙан-эсәк һәм тура эсәк (геморрой), бауыр ауырыуы, күрем, бәшмәк менән ағыуланыу ваҡытында эселә. Шулай уҡ ангина, ауыҙ тиреҫәһе шешеү (стоматит), фарингитҡа ҡаршы уның менән ауыҙ ҡыуышлығын саялар.

## КЕСЕРТКӘН



Июнь-сентябрь айҙарында кесерткәндең япраҡтарын йыйып алырға һәм киптерергә кәрәк. Аҙаҡ ҡара йәшел төҫкә ингән япраҡтар араһынан төҫөн үҙгәрткәндәрен айырығыҙ. Кесерткән ҡан ҡуйылатыу, шәкәрҙе кәметеү, гемоглобинды арттырыу өсөн файҙаланыла. Шулай уҡ матдәләр алышыуын да яйға һала,





мау өсөн ҡабыҡты ботаҡтан ғына алырға кәрәк. Уны 10 см оҙонлоғонда киҫеп, күләгәлә йәйеп киптереү мөһим.

Балан ҡайнатмаһы йәш әсәләргә файҙалы, сөнки ул балаяткы һеңерҙәренең тонусын көсәйтә, ауыртыуҙы ла баҫа. Шулай уҡ балан төнәтмәһе йүтәлде баҫыу, биҙгәк тотоуҙы, уҡшыуҙы бөтөрөү, тирләтеү маҡсатында һәм гастрит, бронхит ауырыуын дауалауҙа ҡулланыла, тимерәүҙе лә юк итә.



## БЕСӘЙ ТЫРНАҒЫ, ҺИҘӘП ҮЛӘН (АЛТЕЙ)

Һаулыҡ өсөн бесәй тырнағының тамыры файҙалы. Уны көҙөн, ер өҫтө ҡорой башлағас ҡаҙып алалар. Тамырҙарҙы һалҡын һыу менән йыуып, ҡабығын әрсейҙәр. Аҙаҡ уны 40 С° ҡыҙыулыҡтағы мейестә (духовкала) киптерәләр. Тамырҙарҙы тик ҡоро ерҙә генә һаҡларға кәңәш ителә, юғиһә дымлы урында күгәреүе ихтимал.

Алтей тын алыу органдары шешкәндә ҡулланыла. Ул тамаҡты тиҙ арала йомшартып, ҡаҡырыҡты сығарыуға булышлыҡ итә. Шулай уҡ һейҙек ҡыуығы, ашҡаҙан ауырыуы ваҡытында ла киң ҡулланыла.





төрлө шеш, һипкел һәм пигмент таптарынан таҙартырға ярҙам итә.



## ПӘЙҒӘМБӘР ТЫРНАҒЫ (КАЛЕНДУЛА)

Календуланың сәскәләрен йыйып, 40 С°-та киптерәләр. Уны ашҡаҙан сей яраһы, үт ҡыуығы, гастрит ваҡытында файҙаланалар. Шулай уҡ элек яман шешкә ҡаршы ҡабул иткәндәр. Тәнгә сыҡҡан шеш, бешкән урындарҙы ла ошо үлән һыуы менән дауаларға мөмкин. Ауыҙ тиреҫәһе шешкәндә ярҙам итә.



## ҮГӘЙ ИНӘ ҮЛӘНЕ

Был үләндең япраҡтарын йәйҙең тәүге яртыһында йыялар. Япраҡ өҫтөнә һоро таптар ултырғандарына тейм әгеҙ. Уны 5 сантиметрҙан да артмаған һабағы менән киҫеп алып киптерәләр. Үгәй инә үләне йүткереүҙе бөтөрә, ҡаҡырыҡты сығара һәм ауырыу кешене тирләтә. Шулай уҡ бауыр, бөйөр ауырыуын да дауалай. Кесерткән кеүек уҡ ул да сәс ҡойолоуынан һәм ҡауаҡтан ҡотолдора.







## АҠ СӘСКӘ

Был үләндең сәскәләрен ашҡаҙан-эсәк ауырыуын, ашҡаҙан елһенеүен, күрем тоткарланыуын дауалау өсөн һәм һалҡын тейгәндә ҡулланалар. Ревматизмдан быуындарға төнәтмәнән ванна, компрестар яһарға, уның менән ауыҙ ҡыуышлығын сайҡатып, теш ҡаҙнаһы шешеүен ҡайтарып, ангинаны бөтөрөп була. Тиҙ уңалтыу йәһәтенән ошо уҡ үлән ҡайнатмаһы менән эренле яраларҙы йыуырға мөмкин. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҙур проблемаһы – сәс ҡойолоуҙы ла ромашка хәл итә: башты төнәтмә менән даими сайҡатып торорға кәрәк.



## АРТЫШ

Артыш үләненең емештәре шифалы. Уны август аҙағынан сентябрь аҙағына тиклем йыйырға була. Был ваҡытка ул тулыһынса өлгөрә. Йыйған саҡта ботаҡтарын ҡырҡырға ярамай, ә ағас тирәләй тауар түшәп, бешкән емештәрен һелкетеп кенә алырға кәрәк. Был саҡта йәшел, әле өлгөрөп етмәгәндәре тороп ҡала. Аҙаҡ уны 30 С°-тан да ашмаған ҡоро ерҙә киптереп

# ТУҒАНДАРҘЫҢ КҮП БУЛЫУЫ ОТОШЛОМО,

## ӘЛЛӘ ЯҢҒЫҘ, АҠСАЛЫ ЕТЕШ ТОРМОШМО?

Бер ойошмала ике ҡатындың һөйләшеүенә шаһит булырға тура килде. Уларҙың береһе икенсеһенән нисә бала үҫтереүе, йәштәрен һораша ине. Яуаптан шулар билдәле булды: йәш ҡатындың бер генә улы бар, быйыл икенсе класҡа уҡырға барған. “Күптән икенсеһен табырға ваҡыт, һин нимә уйлап йөрөйһөң?” – тип һуҡранды тәүгеһе. “Ана бит, мине хужам ебәргеһе килмәй, – тине хеҙмәткәр үҙенең эргәһендә ултырған етәксеһенә ҡарап. – Хәйер, был тарихты әйҙә үҙе һөйләһен”, – тип бүлек етәксеһенә бәхәсле һөйләшеүгә юл асты. 45 йәштәрҙәге ханым шунда уҡ балаларҙы күп табыуға ҡырҡа ҡаршы икәнен белдерҙе.

– Бер бала тапҡан икән – еткән, башҡа тапмаһын. Мин бөтәһенә лә шундай “аҡыл” өйрәтәм, – тине ул. – Уларҙың күплеге нимәгә кәрәк ул, әйтегеҙ әле миңә? Хәйерселекте арттырыуға өлөш индереү генә бит ул. – Шунда һүҙгә был һөйләшеүҙе башлаған ҡатын ҡушылды:

– Һинең үҙеңдең ике балаң бар түгелме һуң? Ни өсөн кешегә ундай аҡыл биреп ултыраһың?

Теге ҡатын да нык тора:

– Быны шул үҙемдең шәхси тәжрибәмдән сығып әйтәм дә инде. Минең бер ҡыҙым, бер улым бар. Бөтә нәмәне лә уларға тигеҙ итеп бүлергә тура килә. Ә хәҙер заманы заманмы һуң? Фатир алырға аҡса етмәй, уларға хактар ямғырҙан һуң ҡалкҡан бәшмәк шикелле үҫә генә. Әгәр беҙ үлеп китһәк, шул йорт өсөн икеһе талаша башлар. Икеһен дә берҙәй яратам, әммә улым ни өсөндөр миңә яҡынырак. Мин үҫкән сакта ғаиләбеҙҙә лә шулай ине. Әсәйем беҙҙе яратты, әммә ағайымды яҡынырак күрҙе.



– Ә бына беҙ ғаиләлә дүрт бала. Әсәйебеҙ беҙгә: “Ҡайһы бармаҡты тешләһәң дә берҙәй ауыртa”, – ти торғайны. Беҙ ҙә үҫтек, һәр кемебеҙҙең айырым донъяһы. Хәҙер иң кесебеҙ атайыбыҙҙы ҡарай (ул ауырып түшәктә ята), тыуған йорт та уныҡы буласаҡ, башҡаларыбыҙҙың өйгә бер ниндәй ҙә дәғүәһе юҡ.

Бармаҡтар тигеҙ түгел шул. Мәҫәлән, сәтәкәй бармаҡтың әллә ни кәрәге лә юҡ, ә һуҡ бармаҡ һәр саҡ кәрәк. Йорт-мөлкәт тураһында һүҙ йөрөткәндә элек кеше быға әллә ни әһәмиәт бирмәгән. Ә хәҙер йәштәргә бөтә нәмә кәрәк. Хатта өй, машина өсөн бар туғандар талашып ҡына ҡалмай, бер-береһен үлтергән осраҡтар ҙа бар. Балаларҙы үҫтереү, төрлө кәрәк-ярак менән тәьмин итеү өсөн хәтһеҙ аҡсаң булыуы зарур. Ә былай бер балаңа бөтә яратыуыңды, иғтибарыңды бүләсәкһең, үлеп-фәлән китһәң, йорт-фатир ҙа уға ғына эләгәсәк. Тағы ла кеше араһында ла әллә ни кәм-хур булмай: матур итеп кейендерергә, башҡа нәмәләрен алып бирергә мөмкинлек бар. Хатта уҡытыу мәсьәләһенә килгәндә лә, Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек ҡалаларға ебәреп була (улар “Как говорится, деньги есть – Уфа гуляем, денег нет – дома сидим” тип тә әйтеп ҡуйҙылар). Ә аҡсаңды башҡа балаларға бүлергә кәрәк булһа, белемдәре лә шул ауылсанан артмаясаҡ йәки бәләкәй ҡалала уҡып, артабан яҡшы эшкә урынлашыу мөмкинлеге булмаясаҡ.

– Юҡ, һинең фекерең барыбер дөрөҫ түгел. Нисек инде матур, һау, йәш ғүмереңде әрәм итеп, бер бала менән генә ҡалмаҡ кәрәк?! Эгоист булып үҫәсәк бит ул. Ә бына һинеңсә булып, ғаиләлә бала яңғыҙы ғына үҫте, ти. Ҙурайғас, ул кемдәр менән аралашасаҡ? Кем менәндер серҙәрен бүлешкеһе, ҡайғыһын да, шатлығын да уртаҡлашҡыһы килер. Ябай ғына итеп әйткәндә, туғандары булыуын теләр, әммә ҡайҙа ғына барһа ла, нисек кенә боролһа ла – яңғыҙ. Бына минең улым менән киленем шуларҙы уйлап, баштан уҡ ике бала таптылар. “Үҫтереүе ҡыйынға тура килер бәлки, уның ҡарауы, яңғыҙ булмаҫтар. Исмаһам, бер-береһенә таянып туғандары булыр”...

– Бала тапҡанға тиклем йәштәрҙең бәләкәй генә булһа ла үҙ “ҡыйыҡтары”, килеме булырға тейеш. Әлбиттә, уға тиклем улар мотлаҡ уҡыу йортон тамамларға, эш табырға бурыслы. Юғиһә, хәҙер студент көйө ауырға ҡалалар ҙа, ни аҡсалары етмәй, ни балаларын үҙҙәре тәрбиәләй алмай мәшәҡәтләнәләр. Аҡса булмағас, йүнле тукланыу тураһында әйтергә лә түгел. Яңы ғына ауырға ҡалған студент (әллә балаһы тыуасаҡ, әллә юҡ, уны белгән юҡ) бала өсөн күпме аҡса аласағын килеп һорай башлай. Ҡайһы ваҡыт миңә был ҡыҙҙарҙың тыуып та өлгөрмәгән балалары аҡса сығанағы булып хеҙмәт иткән кеүек тойола. Баланы табыу менән генә эш бөтмәй бит, уны лайыҡлы итеп тәрбиәләү кәрәк.

Эйе, был ике ҡатын бер-береһенең фекере менән килешмәй таралышты. Уйлап ҡараһың, бәхәс өсөн етди тема шул. Ике ҡатындың да фекере хуплауға лайыҡ һымаҡ. Ысынлап та, әсәлек (ғаилә) капиталын тапшырыу тураһындағы программа эшләй башлау менән тыуым да артты. Бынан бер нисә йыл элек перспективаһыҙ тип табылған ауылдарҙа күҙгә күренеп балалар үҫә башланы, хатта балалар баҡсаларында урын юҡ. Ҡайһы бер бәләкәй ауылдарҙа беренсе класҡа бер бала ғына килә йә бөтөнләй булмай сыға. Әлбиттә, был әсәлек капиталының “тәүге ҡарлуғастары” эшкингәнсә тағы 4-5 йыл тирәһе ваҡыт кәрәк буласаҡ әле. Хәҙер оптималләштереү маҡсатында мәктәптәр ябыла, ә уларҙың күптәре яңы – биналар, төҙөлгәненә әллә ни күп ваҡыт үтмәгән. Эйе, мәктәптәр ябыла, ә балалар баҡсаларында урын юҡ. Перспективаһыҙ ауылдарҙа уларҙы ябыр булғас, нимәгә аҡса әрәм итеп төҙәтергә кәрәк булды икән? Шул уҡ ваҡытта уны ҡала ерҙәрендәге балалар баҡсаларына тотонорға мөмкин ине бит. Йәштәрҙе ауылдарға йәлеп итеү тураһында һүҙ барһа ла, был һөҙөмтәле күренеш түгел.

Аҡса “эләктереп” ҡалыу өсөн йәштәр нисәшәр бала тапмаған, тәүгеләре күптән ҙурайып бөткән, йәштәре 40-ты уҙған ҡатындар ҙа бихисап. Эйе, демографияны күтәрер өсөн уйлап сығарылған проблемаға өлгөрөп ҡалайыҡ тип балалар һанын арттырыусылар күбәйҙе. Тик бындай үҙгәреш (ыңғаймы ул, түгелме һәр кемдең үҙ фекере) менән бергә проблемалар ҙа үҫеш алды. Башында эскелек тороп, артабан ул үҙе артынан эшһеҙлек, тәртипһеҙлек, төрлө енәйәттәрҙе эйәрткән ғаиләләр үҙ балаларын яҙмыш еленә ташлай. Ә кейәүгә сыҡмайынса, законһыҙ рәүештә бәпес табып, унан бала табыу йортонда уҡ баш тартыусылар? Йә булмаһа хәҙер ауылдарҙа IX-XI класта уҡыусы ҡыҙҙарҙың ауырлы йөрөүенә ниндәй яуап табырға? Бынан бер нисә йыл элек ҙур ҡалаларҙа яңы тыуған сабыйҙарын пакет-сумкаларҙа ташлап китеүҙәре тураһында матбуғат биттәрендә яҙһалар, бөтә республика халҡы көслө ытырғаныу белдереп, “Алла һаҡлаһын! Аллаға шөкөр, беҙҙә улай түгел!” – ти торғандар ине. Ә хәҙер бәләкәй ауылдарҙа ла бындай әҙәпһеҙ хәлдәр күҙәтелә: шулай уҡ уҡыусы ҡыҙҙар ауырлы йөрөй, аборт эшләтә, балаларын да ташлап китә. Иң мөһиме, уларҙың был ҡылығын берәү ҙә белмәй тип уйлайҙарҙыр инде, бер ни булмаған кеүек халыҡ араһында йөрөйҙәр, шарҡылдап көләләр, төнө буйы клуб ҡыҙыралар. Йәштәр абортты ҡасан, ҡайҙа һәм нисек эшләтергә кәрәклеге хаҡында тулы мәғлүмәткә эйә (ауырға ҡалыуҙан һәм ауырыуҙар йоҡтороуҙан

һаҡланыу саралары тураһында яҡшыраҡ белһәләр, күпкә һәйбәтерәк булыр ине).

Тормоштоң шундай кире яҡтарын уйлап, күптәр бер, уҙа бара ике бала табыуҙы хуп күрә. Бер-бер артлы биш йә унан күберәген тыуҙырып, тормош ауырлыҡтарына бирешмәгән, бөтәһенә бер тигеҙ тәрбиә биргән ғаиләләр хуплауға лайыҡ та ул. Әммә бишеһе лә бысраҡҡа батып, ас, йыртыҡ кейемдәрҙә йөрөгәндәр ҙә бар бит әле. Тәрбиә мәсьәләһенә оло быуын вәкилдәре ныҡлы һәм даими иғтибар бирһә, ауылдарҙа тәрбиәүсе кисәләр, лекциялар алып барылһа, фельдшер, табиптар мәктәптәрҙә балаға уҙыу һәм уның һөҙөмтәләре һәм ошондай темаларға ҡағылышлы осрашыуҙар үткәреп, һәр ҡыҙ бала менән индивидуаль рәүештә аралашһа, беҙ, бәлки, ниндәйҙер ыңғай һөҙөмтәгә ирешербеҙ. Ҡыҙҙарҙың әҙәплелеге тураһында, туй көнөндә аҡ күлдәктә ҙур ҡорһаҡ менән тороп, бөтәһен дә оятҡа ҡалдырмаһын өсөн енси мөнәсәбәт өлкәһенә ҡағылышлы темаға йәштән үк һөйләшеүҙәр үткәреү, кәңәштәр биреү, өйрәтеү тураһында һәр әсә уйланырға, белергә тейеш, сөнки быға тиклем бер әсәй-өләсәйҙәрҙең дә ауырлы сыҡҡан ҡыҙы өсөн ҡыуанғаны юҡ, шикелле. Киреһенсә, туй үткәреү менән был ҡыҙҙың ҡасан эсе "килеп сығырын", ниндәй ваҡытта бала табырын һанай башлайҙар. Йәнәһе, алдан эш боҙоп ҡуймағанмы? Ваҡытынан алдараҡ тыуһа, баланың 6-7 айлыҡ булып тыуыуына һылтанырға ғына ҡала. Ә туй үтеп бер, ике, өс ай ғына үтһә нимә тиергә? Әсәнең – ҡыҙы, атаның улы менән былдай "оятһыҙ" темаға (улар фекеренсә) һөйләшеүҙән тыйылыуы йәки кисектереүе арҡаһында килеп сыға ла инде ошондай бәләләр. Һөйләшеү ҙә аңлы рәүештә булырға тейеш, сөнки уртаҡ тел тапмаған осраҡтарҙа уның аҙағы суицид менән бөткән хәлдәр ҙә осрай.

Ике ҡатын, ике әсә араһында сыҡҡан бәхәс бына шундай уйҙарға һалды. Бер кешенең дә яҙмышы ҡабатланмай, үткән көндәр кире ҡайтмай, терһәк яҡын булһа ла, тешләп булмай. Һәр кемдең үҙ башы, үҙ аҡылы, үҙ яҙмышы. Беҙ нисек теләйбеҙ, шулай йәшәргә тырышабыҙ. Ниндәйҙер бер аҡыл эйәһе: "Эргә-тирәңдә кемдәр бар, кем менән аралашҡаныңды әйтеп бир, мин һинең ниндәй кеше икәнлегеңде әйтермен", – тигәнерәк фекер әйткән. Ысынлап та, ниндәй генә дуҫ-туған булмаһын, әгәр ул ауыр холоҡло, насар ғәҙәтле икән, һиңә лә уның йоғонтоһо йәки ҡара шәүләһе күсеп, тормошоңа ҡара тап өҫтәйәсәк. Ә балаларҙың тиҙерәк ҙурайғыһы, өлкәндәр тормошона аяҡ баҫҡыһы килә. Шуға ла уларҙың янында өлгөлө һәм тәрбиәле кешеләрҙең булыуы шарт.

Тормошта төрлө хәлдәр була. Бәлки, йәштән бала табып, уны ҡарай алмаған, ташлап киткән йәки быға булышлыҡ иткән хәл-ваҡиғалар, ҡыҙҙарға ҡағылышлы әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләре хаҡында үҙ фекерҙәрегеҙҙе белдерегеҙ. Ни өсөн былдай кире күренештәр һәм уның насар эҙемтәләре беҙҙә кәмемәй, ә арта бара, нисек уйлайһығыҙ? Ике ҡатын бәхәсенә һеҙ ҙә ҡушылығыҙ, "Шоңҡар"ҙы уҡыусылар!

***Земфира ТАҺИРОВА.***



# УЙЫНСЫҠТАРЫН ЙЫЙМАҒАН БАЛАЛАРҒА ӘКИӘТ







Бала уйнап үҫешә. Шуға ла уға ирек биреү мөһим. Өйҙөң аҫтын-өҫкә килтерә тип самаһыҙ тыя башлаһаң, уның үҙ-үҙенә йомолоуы, һәләттәре асылмай ҡалыуы ихтимал. Сабый түшәктәрҙән диван эшләһә лә, китаптарын тәҙҙырып, "магазин" уйнаһа ла, туғанының кейемдәрен ҡурсаҡтарына кейҙерһә лә, һауыттарын йыуһа ла, ҡамырҙан ни ҙә булһа әүәләһә лә ихтыяр итергә кәрәктер тип уйлайбыҙ. Самаһын белеп, әлбиттә. Мәҫәлән, туғанының ползункиһын, башлығын, йүргәген "бүләк" итәһең, иң аҫҡы кәштәгә үҙенең китаптарын ғына теҙәһең. Шулай уҡ үҙе һайлап кейенергә, үҙе сәсен "үрергә" теләгәндә лә ҡаршылыҡ күрһәтергә ярамайҙыр. Уның теләгенән тыш матур итеп кейендереү кемгә кәрәк? Атай-әсәйгә! Уларға кеше алдында оят булмаһын өсөн! Ә балаға гел генә "уны түгел, ошоно кей" тип тылҡып, үҙеңдең фекереңде, ҡарашыңды ғына тағып, уның үҙ-үҙенә ышанысын һындырырға мөмкин. Әлбиттә, күптәрҙе һоҡландырып, ата-әсәһен ҡыуандырып, тәртипле, ипле, тыңлаусан булып китеүе бар. Ләкин үҙ һүҙе, теләге булмаған, ағым ыңғайына ғына йөрөгән, һәр сөскөргәнгә "ярхамбикалла" тигән һоро масса вәкиле генә булып ҡалыуы ла ихтимал.

Уйнағандан һуң әйттермәйенсә генә үҙенең артынан йыйыштырып ҡуйыуҙы бәләкәйҙән һеңдерергә кәрәк. Сираттағы әкиәтебеҙ ошо хаҡта.

Борон заманда Гөлнәзирә исемле ҡыҙ йәшәгән. Бер ҙә генә тик тормаған, ти ул. Гел уйнап йөрөгән. Тик ниңәлер аҙаҡтан тәтәйҙәрен йыймаған.

Иртән торғас, ҡурсағын ҡустыһының йүргәгенә төрөп уйынсыҡ коляскаһына һалған да, тышҡа сыҡҡан булып уйнап алған. Шунан шкафтан һауыт-һабаларын сығарып, фасоль менән борсаҡтан аш бешереп, әсәһен ҡунаҡҡа саҡырған. Артабан өҫтәлен йыйып та тормай ҡәләмдәре менән күп итеп һүрәт төшөрә башлаған. Уларын тырым-тырағай ҡалдыра ла кубиктарҙан өй төҙөргә керешә. Пластилинын сығара. Тора-бара китаптары менән ҡурсаҡтарын укытҡан булып та, уларҙы һатып та уйнарға тотона. Йөрөй биргәс, матур күлдәген кейеп йырлап-бейеп алғыһы килә. Шунан уны сисеп ырғытҡан да әсәһенән үҙенең сәс йыя торған резинкаҡыҫтыр-ғыстарын һорап алып ҡурсағының сәсен дә үреп ҡарай. Был шөғөлдән дә ялҡҡас, ат менеп "ауылға ҡунаҡҡа китә".

Кис тә еткән. Ҡыҙыҡай бик нык арыған. Әсәһе менән атаһы: "Тәтәйҙәреңде йый ҙа, шунан йоҡларһың", – тигән. Гөлнәзирә: «Арыным бит әле, ваҡытым да юк, хәҙер йоклап ҡына алайым да, шунан", – тип ғәҙәттәгесә яуабын да тапҡан. Йоҡларға ғына ятҡан икән, ҡурсағы Лиә: "Апай, мине лә үҙең менән алсы, өшөнөм", – тигән. Гөлнәзирә уны ҡосаҡлап ятҡан. Инде генә күҙемде йомайым тиһә, ҡәләмдәре илаша башлаған: "Өйөбөҙгә ҡайтҡыбыҙ килә-ә-ә-ә". Ҡыҙ тиҙ генә тороп уларҙы пенал эсенә һалған да кире ятҡан. Пластилиндары ла тауыш бирә икән: "Апай, беҙ аҙаштыҡ". Гөлнәзирә уларҙы ла һауытына һала. Шунан кубиктары, туптары, шарҙары ҡыҙҙың карауаты янына килеп һикерешә башлай: "Апай, өйөбөҙҙө һағындыҡ, ҡайтар инде". Гөлнәзирә уларҙы йәшниккә урынлаштыра. Кире ятайым ғына тиһә, һауыт-һабаларының мыршылдаған тауышы ишетелә, китаптары ла ҡайҙа барырға белмәй күҙҙәрен бер асып, бер йомоп аптырап ята икән. Ҡыҙ уларҙы ла матурлап кәштәгә теҙә. Бәй, ҡараһа, бөтә уйынсыҡтары ла ҡыуана, Гөлнәзирәгә рәхмәт әйтә, ти. Бер мөйөштә бөтәрләнеп ятҡан күлдәген дә ҡәҙерләп элеп ҡуйғас, бүлмәһе матур булып китә. Әсәһе менән атаһы таҙа, йыйнаҡ бүлмәне күреп сикһеҙ ҡыуана. Үбеп, яратып алалар ҡыҙҙы. Әсәһе аҡыллы ҡыҙына кү-ү-үп итеп әкиәттәр һөйләп йоҡлатып ебәрә. Уйынсыҡтары ла әкиәт тыңлай-тыңлай әүен баҙарына китә.

*Гөлсинә БАЙҒУЖИНА.*

***P.S: Был әкиәтте лә баланың уйынсыҡтарына, ғәҙәтенә ҡарап үҙгәртеп һөйләп була. Малайҙар өсөн машиналарҙы "һөйләштерергә" мөмкин.***



## Рияз ИСХАҠОВ:
# «БЕҘҘЕ САҒЫЛЫШТЫҢ РЕЖИССЕРЫ, ТИҘӘР»



ТОРМОШТА КАМИЛЛЫҠ ЮҠ. «ВАҠЫТ МАШИНАҺЫ» ЛА УЙЛАП ТАБЫЛМАҒАН. ӘММӘ БӨГӨНГӨ ГЕРОЙЫБЫҘ БЫЛАРҘЫ ИНҠАР ИТТЕ. БАҠҺАҢ, ХАЛЫҠ ЙЫРЫ КАМИЛЛЫҠТЫҢ САҒЫУ ӨЛГӨҺӨ ҺӘМ ШУЛ УҠ ВАҠЫТТА «ВАҠЫТ МАШИНАҺЫ» РОЛЕН ДӘ ҮТӘҮСЕ МӨҒЖИЗӘ ИКӘН. ҺӘР НӘМӘГӘ ИЖАДСЫ КҮҘЛЕГЕНӘН БАҒЫРҒА, ОБРАЗДАР МЕНӘН ФЕКЕРЛӘРГӘ ҒӘҘӘТЛӘНГӘН, ТӘРӘН ИНТЕЛЛЕКТЛЫ, ТАЛАНТЛЫ КИНООПЕРАТОР **РИЯЗ ИСХАҠОВТЫҢ** ФЕКЕРЕ БУЛЫР БЫЛ. ҮҘ ЭШЕНӘ МӨКИББӘН БИРЕЛГӘН БИЛДӘЛЕ ШӘХЕС МЕНӘН ӘҢГӘМӘНӘН СИТТӘ ҠАЛМАҒЫҘ, ДУҫТАР!

***– “Шоңҡар” журналын уҡыусылар араһында һеҙҙең кино сәнғәте өлкәһендәге башланғыстарығыҙ, музыкаль клиптарығыҙ, бигерәк тә башҡорт халыҡ йырҙары легендаларына нигеҙләнеп төшөрөлгән “Алтын мираҫ” серияһы менән таныш булмағандар һирәктер. Мин дә шулар, йәғни күпселек иҫәбендә. Ғөмүмән, талантлы кинооператор Рияз Исхаҡов хаҡында йыш ишетергә тура килгәне булды, әммә үҙегеҙҙе тәүгә күрәүем...***

– *(Ихлас йылмайып)*. Эйе, күптәр шулай ти... Быға һис тә ғәжәпләнәһе түгел. Беҙ бит камераның алдында түгел, ә артында торабыҙ.

***– Һеҙ кино төшөрөү менән мәшғүлһегеҙ. Замансa тел менән дөйөмләштереп әйткәндә – “киношник”. Һәр хәлдә минең өсөн шулай. Ә бына үҙегеҙҙе кем тип атайһығыҙ? Оператормы һеҙ, режиссермы, сценарисмы йәиһә клипмейкермы?***

– Юҡ, клипмейкер түгел мин. Дөрөҫ билдәләнегеҙ – кино менән мауыҡҡан кеше (телевидение түгел, ә нәҡ кино). Тә-ә-әк *(йылмайып)*. Эйе, үҙең хаҡында һөйләүе анһат түгел икән... Рөхсәт итһәгеҙ, башта атайым менән әсәйем тураһында телгә алып үтер инем. Ни тиһәң дә, кино сәнғәтенә мин улар йоғонтоһонда килдем.

***– Рәхим итегеҙ...***

– Салауат ҡалаһында актерҙар ғаиләһендә тыуғанмын. Атайым менән әсәйем байтаҡ йылдар Салауат башҡорт дәүләт драма театрында хеҙмәт итте. Өфөгә күсеп килгәс, атайым – Марат Исхаҡов – “Нур” татар дәүләт театрына, әсәйем – Рива Исхаҡова Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә урынлашты. Шулай итеп, бала сағым сәхнә артында, декорациялар араһында, гримеркала үтте. Әммә атай-әсәйем, үҙ һөнәренә мөкиббән бирелеүҙәренә ҡарамаҫтан, актер булыуымды теләмәне. Ә бына музыка менән шөғөлләнеүемә ҡаршы килмәнеләр. Эйе, скрипка класында дәрестәр алдым, шулай ҙа үҙемде был өлкәлә күрмәнем. Фильмдар төшөрөргә хыялландым. Режиссер һөнәрен үҙләштергем килде. Хеҙмәт юлым мәктәп йылдарында уҡ Башҡорт дәүләт академия драма театрында башланды. Хәтеремдә, ул сакта паспортым да юҡ ине әле. Ике туған ағайымдың документтары буйынса эшкә урынлаштым. Театрҙа режиссер ярҙамсыһы, реквизитор, макетчик, декоратор һымаҡ һөнәрҙәрҙе үҙләштерҙем. Был, һәҙәмтәлә, Рәсәй дәүләт кинематография институтының кинооператорҙар әҙерләү бүлеген һайлауға килтерҙе. Уҡыу йорто ошо өлкәлә эшләгән кешеләр менән аралашыу мөмкинлеге бирҙе, кино сәнғәтенә тәрән үтеп инергә ярҙам итте. Шулай ҙа, мине һәм йәнә бер нисә кешене (Даян Ғәйетколов, Роберт Булгаков һ.б.) билдәле башҡорт режиссеры Малик Яҡшымбәтов ысын кинематографист итте. Ул осорҙа беҙҙә кинематография яңы яралған саҡ. Белгестәрҙең күбеһе, шул иҫәптән мин дә, телевидениенан сыктыҡ. Һәм киноны телевизион ижадтың дауамы тип ҡабул иттек. Ә Малик Яҡшымбәтов беҙгә дөрөҫ юл күрһәтте. Кинематографияны сәнғәт буларак аңларға ярҙам итте. Хәҙер үҙебеҙҙән “телевизионщина”-ны бөтөнләй алып ташланыҡ тип әйтергә була.

***– Ә бына клипмейкер тигән һүҙ һеҙҙе нисектер түбәнһеткән кеүек тойолдо...***

– Оҡшап етмәй миңә был һүҙ. Аңлайһығыҙмы, әгәр ҙә клипмейкер булһам, был өлкәлә уңыш ҡаҙана алмаҫ инем. Үҙемде кинематографист тип иҫәпләйем. Сөнки музыкаль композицияларҙа һәр ваҡыт кинематография алымдарын ҡулланабыҙ. Билдәле булыуынса, ул һынлы сәнғәткә, әҙәбиәткә, драматургияға нигеҙләнә. Ә инде телевидениеға хас булған тасуирлау сараларына өҫтәнлөк бирһәк, әйтәйек, клипҡа дизайнер буларак ҡараһаҡ, һәҙәмтә башҡаса төҫ аласаҡ, бер- ике клип төшөрәсәкбеҙ ҙә юҡҡа сығасаҡбыҙ.

***– Ысынлап та, һеҙҙең клиптарығыҙҙы новелла, бәләкәй генә музыкаль фильм тип атарға булыр ине. Ошо йүнәлешкә, һәм башлыса халыҡ йырҙарына мөрәжәғәт итеүегеҙҙең төп сәбәбе ниҙә?***

– Ни өсөн йырҙарға клип төшөрөү менән шөғөлләнәм? Дөрөҫөн генә әйткәндә, республикала йыл һайын фильм ижад итеү мөмкинлеге булмауы этәргес бирҙе быға. Сөнки биш йылға бер кино төшөрөүҙе эш фронты тип атап булмай. Фекерҙәштәр менән артабан да бергә эшләү, үҙеңде ижади шәхес буларак юғалтмау, тулыһынса бизнеска ауышмау теләге менән бәләкәй генә фильмдар төшөрөргә тотондоҡ. Реклама роликтары менән артыҡ мауыҡманыҡ. Сөнки уны атҡарып сығыу өсөн илһам талап ителмәй. Хатта үҙеңде көсләп эшкә егергә тура килә. Ә йырға шағир, композитор һәм башҡарыусы бөтә күңелен һала. Улар һәммәһе лә бер телдә һөйләшә икән, хит барлыҡҡа килә. Клиптың уңышының 99 проценты иһә башҡарыусыға, музыкаға бәйле. Арыу йырға һәүетемсә генә клип төшөргән осраҡта ла күркәм әйбер килеп сығасаҡ, ә алама йырҙы һәйбәт съемка, ҡиммәтле костюмдар, билдәле актерҙар ҙа яҡшы итә алмай. Эйе, эстрада йырҙарына төшөрөлгән клиптар бөгөн ҡыҙыҡ, иртәгә көлкөлө тойолоуы ла ихтимал. Ә халыҡ йырҙары бер ваҡытта ла иҫкермәй, улар йылдар дауамында шымартыла килгән, тикшерелгән, дөрөҫләнгән. Камиллыҡтың сиге юҡ, тиҙәр. Әммә халыҡ йырҙары – камиллыҡтың өлгөһөләр. Шуға ла ошо өлкәлә эшләү күңелемә яҡын. Ундағы үҙенсәлекле образдар, тәрән драма ижадты әүҙемләштерә. Бындай әйберҙәр тамашасыға ла оҡшай. Донъяның ҡайһы ғына ҡитғаһында йәшәүенә ҡарамаҫтан. Был ысынлап та шулай. Бөгөнгө унан-бынан йолҡҡоланып тупланған бер төрлө музыканан ялҡҡан тыңлаусы ҡапыл быуаттар төпкөлөнән килгән моңға юлыға. Уйлап ҡараһаң, халыҡ йыры ваҡыт машинаһы һымаҡ. Бында башҡаса фекерләү, әҙәм балаһының тәбиғәт менән гармонияһы сағыла. Кеше шул саҡтағы һулышты тоя ала. Әммә, үкенескә ҡаршы, бөгөн ассимиляция процесы әүҙемләште. Эйе, үҫеш һәм прогресс та күҙәтелә. Әммә деградация ла тиҙлеген кәметмәй. Кеше үҙ тамырҙары менән ҡыҙыҡһыныуҙан туҡтай. Халыҡ йырҙарын визуаллаштереү генә әлеге мәсьәләгә ҡаршы тора алмай, әлбиттә. Был хаҡта кинолар, документаль фильмдар төшөрөлөргә, уҡытыу программалары төҙөгәндә ошо проблемалар күҙ уңында тотолорға тейеш.



Шуныһы ла бар: халыҡ йырҙарына фильмдар төшөрөүге еңел. Уға сценарий ҙа кәрәкмәй. Ваҡиғалар үҙенән-үҙе күҙ алдына килә. Әлбиттә, барыһын да эҙмә-эҙлекле рәүештә һүрәтләүгә өлгәшеп булмайҙыр. Һәм ҡайһы бер осраҡта был кәрәкмәй ҙә. "Һөйәнтөҙ"ҙә генә алайыҡ. Ул фажиғәгә бәйле реаль ваҡиғаларҙы тергеҙеү, ауыл халҡын, шул иҫәптән сабый балаларҙы ҡышын ҡар өҫтөндә яндырып үлтереүҙе күрһәтеү ярамаҫ ине. Шуға ла ундағы ҡанһыҙлыҡты йомшартырға тырыштыҡ. Әммә быныһы ла хиттан ашты. Тамашасы ул фажиғәнең ни тиклем аяныслы булғанын төшөндө.

***– Шулай ҙа интернетта әлеге эшегеҙгә ҡарата төрлө ғәйепләүҙәр ҙә осрап ҡуя. Йәнәһе лә был фильм рус халҡының милли тойғоларын кәмһетә...***

– Булғандыр. Ә бит халыҡтың күпселеге был фильм менән таныш та түгел. Сөнки уны әлегәсә телеэкрандан күрһәтмәнеләр. Ә милләт мәсьәләһенә килгәндә, бында кем булыуың мөһим түгел бит. Русмы һин, башҡортмо, төрөкмө, тигәндәй. Халыҡтың яманы булмай. Кешеләр араһында ғына тәрбиәһеҙҙәр, иманһыҙҙар осрай. Әлеге фильмдың тарихи фактарға нигеҙләнгәнен барыһы ла яҡшы аңлай. Ул фажиғәне тормоштан һыҙып ташлап булмай һәм һыҙып ташларға ярамай ҙа. Киләсәктә ошондай ҡот осҡос хаталар ҡабатланмаһын өсөн был тарихты белергә, һөйләргә һәм һығымталар яһарға кәрәк. Һүҙ бына нимә хаҡында. Ә кемдер фильм рус халҡының милли тойғоларын кәмһетә, ти икән, мин быға ышанмайым. Ундай кешеләр менән бәхәскә инергә, төрлө миҫалдар килтереп үҙ фекеремде ярларға әҙермен. Сөнки ошондайыраҡ иҙеүҙәрҙе рус халҡы ла кисергән. Әйтәйек, төрөктәр тарафынан. Был хаҡта ла фильмдар төшөрөлгән. Үҙеңдең иҙелеүеңде яҡлап, башҡаларҙыҡын фашларға ярамай, аңлайһығыҙмы?!

***– Һеҙ Рәсәй кимәлендә уңышлы эшләгән һөнәр эйәһе. Ниндәйерәк кешеләр ул кинематографистар? Һеҙҙең арала дуҫлыҡ бармы? Һәм мәскәүҙәрҙән үҙләштергән алымдарҙы беҙҙең республикала ҡуллана алаһығыҙмы?***

– Эйе, Мәскәү проекттарында ла ҡатнашырға тура килә. "Синие ночи" сериалын төшөргәндә операторҙар командаһын үҙебеҙҙекеләрҙән тупланым. Барыһы ла Башҡортостандан ине. Яҡташыбыҙ Даян Ғәйетколов ҡуйыусы оператор булараҡ сығыш яһаған "Код Апокалипсиса" фильмын да бергәләп эшләнек. Бынан тыш, сит илдә төшөргән әйберҙәр ҙә бар. Американдар беҙгә килгән осраҡтар ҙа булды. Ә бына мәскәүҙәр тиеүегеҙ дөрөҫлөккә тап килмәй. Сөнки кинола мәскәүлеләрҙе табыуы ҡыйын. Унда баш ҡалаға күсеп килеп эшләй башлаусылар күберәк. Ғөмүмән, киношниктар күп түгел. Бер-береһе менән һәр ваҡыт бәйләнештә торған бик тығыҙ мөхит ул. Эйе, беҙ дөйөм кинематография тәжрибәһен үҙләштерәбеҙ. Һәм үҙебеҙҙең республиканың мөмкинлектәренән сығып, иң тәүге сиратта, технологияларҙың, етештереү процестарының, нигеҙҙә, эффектив һәм осһоҙло алымдарын күҙ уңынан ысҡындырмайбыҙ.

***– Һеҙҙеңсә, ни өсөн беҙҙә киноиндустрия үҫешмәгән?***

– Кинематографияға нисә йәш? 120 тирәһе. Башҡортостанда кино эше йәйелдерелеүгә 20 йыл. Уйлап ҡараһаң, был әллә ни ҙур арауыҡ түгел. Әммә ярайһы ғына нығынып өлгөрөргә ваҡыт һымаҡ. Беҙҙә кинематография үтә насар хәлдә тип әйтеү дөрөҫлөккә тап килмәй. Хәлдең бөгөнгөгә ҡарағанда аламараҡ булыуы, шулай уҡ, ҙурыраҡ уңыштарға өлгәшеүебеҙ ҙә ихтимал ине. Бөтә ғәйепте етәкселеккә тағыу, аҡса юҡлыҡҡа һылтаныу килешеп бөтмәҫ. Төп хата үҙебеҙҙәләр, ныҡышмалылыҡ, ойошҡанлыҡ самалы булған, күрәһең. Эшләп еткермәгәнбеҙҙер, мөмкинлектең 30 процентын ғына файҙаланғанбыҙҙыр. Йәнә, уңышлы фильм килтереп сығарыуға өлгәшә алмау ҙа кәртә булды. Ул иһә ойоштороу һәм финанс мәсьәләһен урынынан ҡуҙғатыр ине. Эйе, нисәмә йылдарҙан һуң ғына уңышлы тип атарға мөмкин булған проект килеп сыҡты. "Елғыуар" фильмы хаҡында һүҙ йөрөтөүем. Быға ҡуйыусы режиссер Айсыуаҡ Йомағоловтың ныҡышмалылығы һөҙөмтәһендә генә өлгәшеп булды. Тәбиғәте менән шундай кеше ул. Юғиһә, етәкселек, мәҙәниәт министрлығы тарафынан ваҡытында тейешле ярҙам күрһәтелмәү, урыҡ-һурыҡ финанслау эште юҡҡа сығарып тик торҙо. Шулай ҙа, оҙаҡҡа

һуҙылыуына ҡарамаҫтан, проект ахырына еткерелде. Әгәр ҙә киностудия эшләй башлауҙың тәүге йылдарында уҡ ошондай фильм төшөрөлһә, үҫеш башҡа юл буйынса китер ине. Шулай килеп сыҡты инде. Мин бында ғәйепләләрҙе эҙләмәйем. Иң мөһиме, артабан кисәге хаталарҙы ҡабатламаҫҡа кәрәктер.

*– Һеҙ – ирекле ижадсы, бер ерҙә лә штатта тормайһығыҙ. Шәхси студияғыҙ ҙа бар. Дәүләт ойошмаларынан китеүегеҙгә нимә сәбәпсе булды?*

– Ысынлап та, 2001 йылда рәсми рәүештә шәхси студия астым. Ижади шәхестәр учреждение штатында торорға тейеш түгелдер тип уйлайым мин. Ни өсөн тиһегеҙме? Миҫалға әлеге лә баяғы шул уҡ телевидение хеҙмәткәрҙәрен генә алып ҡарайыҡ. Әгәр ҙә улар гонорарға ғына йөрөһә, һәҙәмтәлерәк эшләр ине. Сөнки даими рәүештә түләнеп торған эш хаҡы илһамды юҡҡа сығара. Ҡайһы бер коллегалар хатта уйланыуҙан, ижади фекерләүҙән туҡтай. Быны үҙегеҙгә тәнҡит итеп ҡабул итмәгеҙ. Журналистикаға ҡағылмай был. Нигеҙҙә, фильмдар һәм башҡа ҙур күләмле әйберҙәр хаҡында һүҙ йөрөтәүем. Әйтәйек, романды эш хаҡына түгел, ә гонорарға яҙалар. Фильмдар һәм музыкаль клиптар менән дә шул уҡ хәл. Дәүләт ойошмаларында йыш күҙәтелгән һүлпәнлек, бер урында тапаныу кеүек етешһеҙлектәрҙе мин шәхси ойошма буларак хәл итәм. Беҙ ауыр артиллерия түгел, еңел ҡуҙғала торған атлы ғәскәр. Ни өсөн телевидениеға ҡарата ризаһыҙлыҡ белдерә әле был, тип уйлай торғанһығыҙҙыр. Бына бөгөнгө көндә ни өсөн эстрадала бер төрлөлөк хөкөм һөрә? Сөнки телевидениела ижадты конвейер системаһы алмаштыра. Ә тамашасының бит шәхесте, уның үҙенә генә хас һыҙаттарын күргеһе килә. Земфира Байбулдина үпкәләмәһен, әммә йырсының индивидуаль һыҙаттары күҙ уңында тотолмауы музыкаль мәҙәниәткә, эстрадаға ниндәйҙер кимәлдә хилафлыҡ килтерҙе. Клиптар хаҡында ғына һүҙ йөрөтмәйем. Концерттарҙы ла күҙ уңында тотам. Һәр кем үҙ эшен башҡарырға тейеш. Мәскәүҙә, мәҫәлән, фильмдарҙы, сериалдарҙы, клиптарҙы, рекламаны канал студиялары эшләмәй. Сөнки уларҙың төп бурысы – эфирҙы ҡыҙыҡлы итеү, мәғлүмәт туплау. Ә клиптар, сериалдар, фильмдар менән ситтән ялланған кешеләр шөғөлләнә.

*– Тимәк, дәүләт органдарында эшләмәүҙең төп сәбәбе – сифатһыҙлыҡтан ҡасыу. Ә бына максатығыҙға тулыһынса өлгәшкән, эшегеҙҙән ҡәнәғәт ҡалған саҡтарығыҙ буламы?*

– Режиссерҙар, операторҙар бер ваҡытта ла эштәренән ҡәнәғәтлек кисермәйҙер ул. Эйе, идея камил була ала. Әммә шуны тормошҡа ашыра башлаһаң, ойоштороу, финанслау өлкәһендә ауырлыҡтар килеп тыуып тик тора. Һәм съемкалар ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыуға әйләнә. Эште тамамлап, кассетаны ҡулға алаһың да, ғәҙәттә: "Кот оскос хәл, бер нәмә лә килеп сыҡманы", – тип уйлайһың. Ысынбарлыҡ идеянан байтаҡҡа алыҫлашҡан кеүек тойола. Ә инде ултырып монтажлай башлаһаң, кимәл күтәрелеп, идеяға яҡынлай төшә. Әммә ул бер ваҡытта ла идея бөйөклөгөнә етә алмай.

*– Операторҙың эш көнө күпме тора?*



– Бәләкәй генә аҡсаға ла ризалашҡан саҡтар була. Бюджеттар төрлө бит. Мәскәүҙә, мәҫәлән, сериалда эшләп тапкан гонорарҙың бер өлөшөнә машина һатып алдым. Унда финанслау мәсьәләһе башҡа шул. Шулай уҡ Татарстан Республикаһы һәм Ырымбур өлкәһе өсөн дә музыкаль әйберҙәр эшләгәнем булды. Түләү мәсьәләһендә Башҡортостан менән Татарстан араһында ла айырма бар. Күршеләрҙә эстрада коммерция нигеҙенә ҡуйылған. Береһе икенсеһен уҙып китергә тырыша. Кем күпме аҡса һала ала. Шуға ла унда проекттарҙың ҡиммәтерәк булыуы ихтимал. Ә беҙҙең бюджет Мәскәүҙән ун тапҡырға түбәнерәк. Был ҙур бәлә. Сөнки Мәскәү белгестәрҙе йоткандан-йота. Ә беҙ үҙ аҡсабыҙға улар өсөн яңынан-яңы һөнәр эйәләре әҙерләйбеҙ. Киреһенсә булһын ине лә бит...

*– Татарстанда кино сәнғәте ниндәй кимәлдә?*

– Был йәһәттән Башҡортостан менән Татарстан араһында ҙур айырма юҡ тип әйтергә була. Унда һуңғы йылдарҙа "Алтын минбәр" тип исемләнгән фестиваль хәрәкәте йәйелдерелде. Һәммәһе лә исемдәргә бәйле бит. Татарстандан мин режиссер Илдар Йәғәфәровты ғына беләм. Әммә уның беҙҙең Айсыуаҡ һымаҡ ниндәйҙер ҙур әйбер төшөрөүе хаҡында ишеткәнем юҡ әлегә. Ҡыҫҡаһы, ике республикала ла бер төрлө проблемалар күҙәтелә. Тамашасы аудиторияһын туплау ҙа хәл ителмәгән мәсьәлә булып тора. Был киноға ғына түгел, музыка сәнғәтенә лә ҡағыла. Миңә ҡалһа, беҙгә (башҡортҡа һәм татарға) тамашасыларҙы һәм тыңлаусылар аудиторияһын берләштерергә кәрәктер. Эйе, Башҡортостанда татар йырсыларына һорау ҙур. Әммә Татарстанда ла башҡорт сәнғәт әһелдәрен үҙ итәләр. Имеш тә, унда башҡорт йырсыларын яратмайҙар икән, тигән һүҙҙәр дөрөҫ түгел. Бына Башҡорт академия драма театры гастролдәр менән барһа, спектаклдәр һәр

ваҡыт аншлаг менән үтә. 30 йыл элек тә шулай ине, бөгөн дә. Хәтеремдә, ҡасандыр Венер Камаловтың клиптары Татарстанда бик популяр булды. Миңә ҡалһа, барыһы ла технология мәсьәләһенә бәйле. Уны дөрөҫ хәл итә һәм үҙебеҙҙең продукцияны алға һөрә белергә генә кәрәк.

*– Бөгөн Башҡортостандың төрлө райондарында кино төшөрөү менән мауыҡҡан кешеләр бар. Был хаҡта ниҙәр әйтерһегеҙ?*

– Был дөрөҫ юл. Хатта "Мосфильм"ды Мәскәүҙән ситкә сығарырға кәрәк кеүек тойола миңә. Сөнки унда тормош иҫ киткес ҡиммәт, юлдарҙа һәр ваҡыт тығын. Актерҙарҙы килтереү ауыр мәсьәлә. Беҙҙә лә киностудия Өфөлә түгел, ә ҡайҙалыр ситтә, ығы-зығынан алыҫта тәҙөлһә, отошлораҡ булыр һымаҡ. Ә үҙ эштәрен башлаған, республиканың төрлө төбәгендә шәхси киностудияһын булдырған егеттәргә һоҡланырға ғына ҡала. Хәҙер бит ошо өҫтәл артында ултырып та кино төшөрөргә мөмкин. Комьютерың, камераң һәм иң мөһиме – белемең булһын.

*– Әҙәм аяғы баҫмаған утрауға юлланырға тура килһә, үҙегеҙ менән нимәләр алыр һәм нindәй фильм төшөрөр инегеҙ?*

– *(Йылмайып)*. Әлләсе. Йөктөң ауырлығы нисә килограмға саҡлы булырға тейеш?

*– Иң кәрәкле өс әйбер...*

– *(Уйлана)*. Т-ә-әк... һыу аҫты масҡаһын, ноутбук һәм... Өсөнсөһөн әйтә алмайым. Уныһы тәҡдимдәр өсөн асыҡ килеш ҡалһын.

*– Әйткәндәй, камера алырға онотторғоҙ, әллә уның кәрәге булмаҫмы?*

– Кәрәге булмаҫ. Сөнки оператор әленән-әле камера кнопкаһына баҫырға тейешле ябай техник түгел бит. Беҙҙә кәүҙәләнеште, сағылыштың режиссеры, тиҙәр. Картинаны тамашасы беҙҙең күҙҙәр аша күрә.

*– Эштән буш ваҡытығыҙҙы нисек үткәрәһегеҙ?*

– Йыш ҡына ял көндәрендә, байрамдарҙа эшләргә, башҡаларҙың графигына яраҡлашырға тура килә. Буш ваҡытымды һөйөклө хәләл ефетем Йәмилә (**Авт:** *Ф. Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле солисткаһы Йәмилә Бикбаева)*, биш айлыҡ ҡына Мәликә ҡыҙым һәм Сыңғыҙ улым янында үткәрергә тырышам. Улыма 14 йәш. Йыш ҡына минең менән съемкаларға сыға. Ышаныслы ярҙамсым ул. Ә студиям үҙ өйөмдә – сарлаҡта урынлашҡан. Декорациялар, актерҙар, съемка павильоны – барыһы ла шунда.

*– Ниндәй сифаттарығыҙ тормошта әленән-әле ҡамасаулап ҡуя?*

– Тиҙ ҡыҙып барыусанмын. Ҡайһы берҙә ҡатыраҡмын да шикелле. Йәнә, күп ашайым *(йылмая)*. Шуға ла был йәһәттән утрауҙа булып ҡайтыу һис тә ҡамасауламаҫ ине. Хәйер, быының өсөн генә лә түгелдер. Ижадсыға сикләүҙәр файҙаға ғына.

*– Яратҡан ризығығыҙ?*

– Һайланып йөҙәтмәйем. Ҡатыным һәм әсәйем әҙерләгән бөтә ризыҡтарҙы ла тәмләп-тәмләп, рәхмәттәремде уҡый-уҡый ашайым.

*– Республика хоккей командаһының ялҡынлы көйәрмәне тип атарға буламы һеҙҙе?*

– Комментатор Азамат Моратов хоккей командаһының гимнын ижад иткән икән. Минең клип төшөрөүемде һорағайнылар. Ризалаштым. Бөгөн шуны үҙҙәренә тапшырырға тип торам. Эш барышында шул музыкаға, ундағы эстетикаға күңелем менән үтеп индем. Шулай ҙа өмөтөгөҙҙө аҡламам, ахыры, спортты яратам, әммә үҙемде көйәрмән тип атай алмайым. Кирәкһенсә, кеше күп булған ерҙән ситкә китергә тырышам. Коллективист түгелмен, хатта ниндәйҙер кимәлдә ҡырағайыраҡмын да.

*– Һуңғы тапҡыр һеҙҙе нимә өсөн тәнҡитләнеләр?*

– *(Уйлана)*. Хәҙер әйтәм. Әһә, иҫкә төштө. Бөгөн генә аҡсаны күп һорайһың тигән дәғүә белдерҙеләр.

*– Һеҙҙеңсә, башҡорт киноһын ниндәй яҙмыш көтә? Аңлайым, һеҙ күрәҙәсе түгел, әммә был йүнәлешкә ниндәйҙер кимәлдә өлөш индереү ҡулығыҙҙан килә...*

– Ҡасандыр Әнүәр Нурмөхәмәтов менән 1812 йылғы Ватан һуғышына бәйле проект төшөрөү өсөн заявка биргәйнек. Быға рөхсәт бар бөгөн. Айсыуаҡ Йомағолов яҡын арала шул әйбергә тотонорға ниәтләй, шикелле. Ул фильм өсөн аҡсаны ла арыуыраҡ бүлмәкселәр икән, тип ишеткәйнем. Әлбиттә, Мәскәүҙеке һымаҡ түгел инде. Шулай ҙа, бәлки ошо проектҡа Мәскәүгә киткән белгестәрҙе ҡайтарып булыр, тигән өмөт бар. Ысынлап та, киноның киләсәге хаҡында күрәҙәлек ҡыла алмайым. Ә бына үҙ теләктәремде, тәҡдимдәремде еткерер инем. Республикала нәфис фильмдар хаҡында ғына түгел, ә сериалдар төшөрөүҙе яйға һалыу тураһында ла етди уйланырға кәрәктер. Беҙҙең аудитория өсөн ул ҙур һорау менән ҡулланыласаҡ жанр. Һәм, ғөмүмән, тамашасыны милли фильмдар менән тәьмин итеү буйынса аныҡ план булдырылырға тейеш. Уларҙы тейешле кимәлдә финанслау мәсьәләһе лә күҙ уңынан ысҡындырылмаһын ине. Бюджет үтә ҙур булмаһа ла ярай. Үҙ тәжрибәмдән беләм, аҡсаға аҡса тартыла ул. Әгәр ҙә Президент идеяны үҙ гранты менән күтәрә икән, артабан тағы ла кемделәр был проект өсөн аҡса бирергә күндерергә мөмкин. Иң мөһиме, башланғыс кәрәк. Фильмдар төшөрөү буйынса аныҡ план булһа, әйтәйек, йылына ике сериал, өс документаль фильм һәм бер-ике йәнһүрәт төшөрөү (быларҙы миҫал өсөн генә әйтәм) күҙҙаланғанда ла республика аҡсаһына белем алған белгестәр ғаиләләре менән ҡайтып төшөр һәм артабанғы тормоштарын тыуған яҡтарында ҡороп ебәрер ине. Әлбиттә, ижад, сценарийҙар, проекттар менән генә сикләнеп ҡалырға ярамай. Республикала фильм етештереү мәсьәләһен яйға һалыу хаҡында ла уйланырға кәрәк. Ул эшкә һәләтле булһын.

*– Бәлки "Шоңҡар"ҙың тоғро дуҫтарына ла ниндәйҙер тәҡдимдәрегеҙ булыр...*

– Тормошта һәр нәмәгә әҙер тороу кәрәк *(йылмая)*. Хатта әҙәм аяғы баҫмаған утрауға юлланырға ла. Шуға ла һәр кем унда үҙе менән нимә аласағы хаҡында уйланһын. Күрҙегеҙ бит, мин ул һорауға яуап бирергә әҙер түгел инем...

*- Әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт! Уңыштар һеҙгә!*

*Гөлшат ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.*




















# Кино шулай тыуа





шоңкар

Вакыттың кабатланмаç мəлдəрен һəм тəбиғəттең һокланғыс төçтəрен фотоға төшөрөргə яратам. Кыштың сатлама һыуыктарында йəмле йəйҙең һүрəттəрен карап ултырыуы күңелгə үҙе бер кинəнес бит.















Азат
ЯРМУЛЛИН

Өфө калаһы
















# Зимфира АБУШАХМАНОВА



Аш-һыу әҙерләүҙең яңынан-яңы төрҙәрен өйрәнеү – яратҡан шөғөлөм. Унан тыш, шиғырҙар ижад итәм, мәҡәләләр яҙам, бәйләм бәйләү серҙәренә төшөнәм, бала тәрбиәләү буйынса китаптар уҡыйым. Ике йәшлек улым Айнурҙы тәрбиәләп өйҙә ултырған ваҡытымдың бер минутын да бушҡа үткәрмәҫкә тырышам.



# ТӨМӘН ЯҠТАРЫ ҺЫЙЛАЙ

**«ШОҢҠАР» — ЯРАТҠАН БАҪМАЛАРЫМДЫҢ БЕРЕҺЕ. БАШҠОРТОСТАНДАН СИТТӘ, ТӨМӘН ӨЛКӘҺЕНДӘ ЙӘШӘҮЕМӘ ҠАРАМАҪТАН, ЙЫЛ ДА ЯҘЫЛЫП, ҺӘР ҺАНЫН УҠЫП БАРАМ. ЖУРНАЛДА «БЕҘҘЕҢ АШ-ҺЫУ» ТИГӘН РУБРИКА БАШЛАНҒАС, ҮҘЕМ ЯРАТЫП ӘҘЕРЛӘГӘН РИЗЫҠ ТӨРҘӘРЕН ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАРҒА ЛА ЕТКЕРЕРГӘ БУЛДЫМ.**

**БАЙРАМДАРҘА, ЯЛ КӨНДӘРЕНДӘ ҒАИЛӘ ТАБЫНЫНЫҢ ТҮРЕН ТЫУҒАН ЯҒЫМ — ӘБЙӘЛИЛ РАЙОНЫНЫҢ АШ-ҺЫУЫ БИЛӘЙ. ШУҒАЛЫРМЫ, ДУҪТАР, ТУҒАНДАР МЕНӘН ЙЫЙЫЛЫШҠАНДА ТАБЫН АРТЫНДА ҮҘЕБЕҘҘЕ ТЫУҒАН ТӨЙӘККӘ ҠАЙТҠАНДАЙ ХИС ИТӘБЕҘ. ӘЛШӘЙ РАЙОНЫНДА ЙӘШӘҮСЕ ҠӘЙНӘМ РӘЗИФӘ НӘБИУЛЛИНА — АЛТЫН ҠУЛЛЫ АШ-ҺЫУ ОҪТАҺЫ. УНАН ӨЙРӘНГӘН ӘЛШӘЙ РАЙОНЫ КУХНЯҺЫ ЛА ЯҠЫН МИҢӘ.**

**ӘЛЕ ИҺӘ ТӘМЛЕ ЛӘ, ӘҘЕРЛӘҮГӘ ЕҢЕЛ ДӘ БУЛҒАН ИКЕ РЕЦЕПТ ТӘҠДИМ ИТӘМ. АШТАРЫҒЫҘ ТӘМЛЕ, КҮҢЕЛДӘРЕГЕҘ КҮТӘРЕНКЕ, КӘЙЕФТӘРЕГЕҘ КӨР БУЛҺЫН!**




## “СӘСКӘ” САЛАТЫ

Салатты әҙерләү өсөн 100 г сыр, 1 банка консерваланған персик, 4 йомортҡа, 2 картуф, 200 г бешкән тауыҡ ите, 1 баш һуған, петрушка, самалап майонез һәм тоҙ кәрәк.

Картуфты ҡабығында бешерергә.

Персикты һыуынан һарҡытып, бер өлөшөн ваҡлап турарға, ҡалған ярты-һын түңәрәкләп йоҡа итеп киҫергә. Сырҙы эре ҡырғыс аша ҡырырға, йомортҡаны, картуфты, тауыҡ итен, һуғанды ваҡлап турарға. Ваҡлап туралған бар ингредиенттарға майонез ҡушып, тоҙ өҫтәп яҡшылап бутарға һәм тәрилкә уртаһына өйөргә. Ситенән сәскә таждары яһап, түңәрәкләп ҡырҡылған персиктарҙы теҙергә. Ваҡлап туралған петрушка менән биҙәргә.

## БАУЫР ҠОЙМАҠТАРЫ

Бының өсөн 0,5 кг бауыр, 2 кишер, 1 баш һуған, 1 йомортҡа, 1 ст. һөт, 1-2 тырнаҡ һарымһаҡ, он, тоҙ, борос, үҫемлек майы, майонез кәрәк.

Бауырҙы йыуып, тышын һыҙырып алғас, ит турағыс аша үткәрергә. Йомортҡа, тоҙ, борос өҫтәп, һөт ҡойорға һәм он ҡушып ҡаймаҡ ҡуйылығында ҡамыр туҡырға (кәҙимге ҡоймаҡтан ҡуйыраҡ булырға тейеш). Табала үҫемлек майын ҡыҙҙырып, аш ҡалағы менән ҡойорға һәм ике яҡлап ҡыҙҙырырға.

Оҙонсалап туралған һуған менән ваҡ ҡырғыстан үткәрелгән кишерҙе айырым ҡыҙҙырырға.

Һарымһаҡты ваҡлап турап, майонезға ҡушып бутарға.

Инсур АРТУР

# БЕР САРСАУ ҘА ЕТӘ ҺУЛЫРҒА...





## ҺАНДУҒАСКА

...Мин һандуғас түгел –
Йыр һағынған,
Гүйә, бер турғай ғына.
Һин – һандуғас!
Йырла!
Һинең өсөн
Мин кипкән ҡурай ғына.

* * *

Ҙур кеше тип миңә өндәшмәгеҙ,
Маһайырлык буйҙар аҙмаған.
Һындарымды үлсәп карағанда,
Бар, әлбиттә, минән ҡалғандар...

Дәрәжә лә бында үлсәм түгел,
Сөнки ул да күптән икеле.
Ул юғалыр (бәлки, һай кылыктан),
Таңда һүнгән йондоҙ шикелле.

Самаларҙың ҡайҙан тыуғандарын
Кемдәр белгән, ҡайҙа тотамдар?
Семтемдәр ҙә услам булып китә,
Ҡайсак тамсы ла ҙур йотомдан...

Ҡимməттәрҙең серен сискәндәр юк.
Вакыт үлсәй, йәки – осраклык...
Ошо ике казый араһына
Һыялманым, табып уртаклык.

* * *

Күпме генә теҙген шакарһак та,
Ҡыҫкартһак та тышау араһын,
Ғүмеребеҙ үтеп китер инде –
Ығышырлык юк бит сараһы.

Уянып та, ана, өлгөрмәйһең,
Мыжый башлай күпме мәшәкәт.
Шул бер өйгә һаман өйәбеҙ бит,
Һәүетемсә йүнләп йәшәһәк:

Йәһәтерәк кәрәк кыланырға,
Зирәгерәк кәрәк булырға...
Ә ғүмер ни – ышыкта ла аулак,
Бер сарсау ҙа етә һулырға...

Шакарып та тарткан теҙгенебеҙ,
Әйҙә, шундук шартлап өҙөлһөн,
Ә тышауҙы – нукта итәйек тә,
Толпарыбыҙ елеп һөйөнһөн!

Ғүмер берәү.
Һөйөү, кулың һонһаң,
Ҡосак булып каршы үкталһын.
Ә хыянат корок һелтәр булһа,
Бергә оскан йөрәк туктаһын...

* * *

Ғүмер –
Бер һирпелгән караш:
Һөйөү...
Ярһыу...
Тилмереү...
Яҙмышында былар булмай икән,
Һукыр килеш тилереү.



Сылатырлыҡ ҡына һыу аҡһа...

...Хыялдарҙан ашты быйылғы йәй:
Өтә генә ҡояш ал таңдан.
Ҡыҙыулығы – ҡурмас ҡыҙҙырырлыҡ,
Тән бүҙарып яна, ярандай.

Кем гонаһын икән кисерәбеҙ?
Ә сәскәләр ниҙә ғәйепле?
Шаурап кипте әрһеҙ кесерткән дә,
Беләме икән ҡыҡтәр әҙәпте?!

Тамуҡта ла ундай дәһшәт юҡтыр –
Гонаһлыға һынау ҡуйырлыҡ.
Эй, Хоҙайым, Ерҙе ыҙалатма,
Ризыҡ үҫһен әҙәм туйырлыҡ!

Ә һин, Ҡояш, таңдан аяулы бул,
Көн шиңдереп, ҡапыл төн итмә.
Тик, яҙмышым, минең йөрәк янһа,
Дөрләүҙәрҙән тыйып тынәтмә!

## ТҮҘЕМ

Ил яҙаһын һынап үткәрәм бит,
Илем өсөн йөрәк һыҙлағас.
Көн ҡурҡһа ла күнеп бешегелә,
Ауыҙ ителә бит тыйған аш.

Ауыр һүҙҙәр мине елгәрткәндә,
Кенәләрҙе һелтәп йылмаям.
Ошо мәлдә рәхмәт әйткәндәр бар,
Ошо мәлдә утҡа һыялам.

Күнегелә һабаҡ алыуҙарға
Аңғармаҫтан килгән бәләнән.
Ялтанмайса, күкрәк ҡуйғаным бар,
Уҡ сорғотмаҫ элек йәйәнән.

Йәндең үҙен тере яра иткән,
Зарыҡтырған мәл бар – һанһыҙлыҡ.
Йөрәгемде шул саҡ ҡанат итәм,
Тотоп ҡалһын, әйҙә, яңғыҙлыҡ.



* * *

Ғүмер буйы өттө гел бурыстар,
Семтем генә һәр саҡ аласаҡ.
Бирәсәкте йөктәй һалғанда ла,
Ҡосаҡ-ҡосаҡ тағы ҡаласаҡ.

Юҡ, көймәйем,
Йәшәү мәғәнәһе
Быуа шулай ятһа бизмәндә.
Көн балҡытыр, тимәк, хәлдәрем бар
Тандыр ғына йылдар тиргәндә.

Бәхетем бит – тормош һөйөнөрлөк,
Йомартлыҡ та кеүек самаһыҙ.
Йыуатһам да кемде – ул да бурыс –
Минең һүҙем етмәй ҡалмаһын.

* * *

Шулай була:
Иң кәрәкле мәлдә
Дуҫтар ғына түгел – таныш юҡ!
Һөрлөккәндәй осоп ҡыланыла,
Ни тиһәң дә, һынай –
Яҙмыш шуҡ.

Танымаған кеүек бөтәһе лә,
Сүллектәһең кеүек бер үҙең.
Һөрәнеңдән, гүйә, фәтүә юҡ.
Иң ҡыйыны, дуҫҡай, бул түҙем!

Түҙем...
Уға ғына һыйынғанда,
Таныш булмаған да ҡул һонор, –
Ҡыйын мәлең аңлап,
егетлеккә
Өмөт утын яғып, нур ҡойор.

# «ЯҘЫП ҠАРАУ»ҘАН БАШЛАНҒАН ЮЛ

**Үҙ ғүмерендә һәр кем бер генә тапҡыр булһа ла шиғыр йә хикәйә яҙып ҡарайҙыр ул. Билдәле шағир-яҙыусыларҙың да ижад юлы тап шул «яҙып ҡарау»ҙан башлана бит. Юҡһа үҙҙәрендәге һәләтте ҡайҙан белерҙәр ине? ТӘСКИРӘ ДАЯНОВАны беҙ «Һуңғы шырпы», «Ҡуш өйәңке», «Джоконда» кеүек мауыҡтырғыс повесть һәм хикәйәләре аша беләбеҙ. Әҫәрҙәрендә ул күберәген йәштәр проблемаларын күтәрә, геройҙары менән бергә унан сығыу юлдарын эҙләй, йәштәргә был ҡатмарлы тормошта әҙме-күпме үҙҙәрен табырға, аңларға ярҙам итергә ынтыла. Яҙыусының оҫталығы ябай ғына сюжеттарҙы ла уйландырырлыҡ, көйөндөрөрлөк, шулай уҡ һөйөндөрөрлөк, яҡшылыҡҡа ынтылырлыҡ итеп бирә белеүендә.**

**Ә бына уның үҙенең тормош юлы ниндәй икән?**



## ЙӘНТӨЙӘГЕМ – АЛТЫН БИШЕГЕМ

Мин Мәсетле районының Тимерәк ауылында йәшәйем, әммә Асҡын районында тыуғанмын. Ул былай була: атайым һуғышҡа барып ҡайтҡанда (ул атлы ғәскәрҙәргә Башҡортостандан аттар алып бара), ғаиләһе үлем сигендә көн күрә. Һөйләүҙәре буйынса, түрәләрҙең артыҡ шашынып, халыҡты интектереп алған мәле була был. Бәхеттәренә, Асҡын районында йәшәгән туғандарыбыҙ саҡырып ала әсәйемдәрҙе. Урыҫ ауылына урынлаштырып, эш, фатир менән ярҙам итәләр. Улар аяҡҡа баҫыуға, мин тыуғанмын. Бик иманлы, шул хәтлем изге кеше ине атай-әсәйем. Бер ваҡытта ла ғәйбәт һөйләмәне, кешенән көнләшмәне, бер кемгә лә насарлыҡ теләмәне, яман уйҙа булманылар. Биш намаҙҙарын бер көн дә ҡалдырманылар.

Тыуған як, туған тел үҙенекен итә, әсәйемдең урыҫтар араһында йәшәгеһе килмәй, атайымды тыуған яҡтарға алып ҡайтып китә. Элек башҡорт мәктәбе ике генә ауылда: Ләмәҙтамаҡта һәм Дыуан-Мәсетлелә булды. Башҡорт-татарҙар алыҫ ауылдарҙан да килеп уҡый торғайнылар. Мин Ләмәҙтамаҡта унынсыны тамамланым. Үҙ телеңдә уҡыу, һүҙ ҙә юҡ, рәхәт, әммә уҡырға ингәндә ҡыйынлығын һиҙҙермәй ҡалмай ине. Русса изложение яҙғанда һөйләмдәрҙе дөрөҫ кенә итеп төҙөй алмай интеккәнем хәтерҙә. Шулай беренсе йылда уҡырға инә алманым. Тәүҙә быға һис кенә лә көймәнем, сөнки ауылдан сығып китеүҙе шул тиклем ауыр кисерҙем. Фермаға эшкә урынлаштым. Ул ваҡытта сибек кенә, 40 килограмлыҡ ҡына бер ҡыҙ бала инем. Силос аҡтара алмайым, бесән сығарып булмай – беләктәрем бау һымаҡ өҙөләп кенә килә. Физик эш аңһат түгел шул. Ошо мәлдә уҡырға ныҡлап ҡарар иттем дә инде. Теләк, маҡсат булғанда барыһына ла өлгәшергә мөмкин, был юлы Өфө ҡалаһының 2-се һанлы педагогия училищеһы студенты булып киттем, уны уңышлы ғына тамамланым.

## ИЖАДҠА ТӘҮГЕ АҘЫМДАР

Ижадҡа 40 йәштәрҙә генә килдем. Бала саҡта ниндәйҙер бер талпыныу булды ул, бер дәфтәр шиғырҙар яҙғайным, ләкин уларҙы бер кемгә лә күрһәтмәнем дә, уҡытманым да. Иншаларҙы ла рус теленән дә, башҡорт теленән дә яҡшы ғына яҙа инем, хатта уҡытыусы йыш ҡына бөтә класҡа уҡып ишеттерә торғайны. Әммә ижад юлынан китергә береһе лә кәңәш бирмәгән. Үҙемә ышанысым да булмаған, күрәһең. Йә атай-әсәйем оло ине, уларҙың маҡсаттары – намаҙ уҡыу, мине лә шул юҫыҡта күрергә теләгәндәрҙер...

Шулай ҙа рус теле уҡытыусыһына үпкәмде белдерҙем бер тапҡыр. “Һин бигерәк өндәшмәҫ бала булдың. Дәрестәрҙә бик ҡатнашып та барманың, үҙ донъяңда ғына йәшәнең”, – тине ул. Асылып бармағас, миңә үҙемде табышырға ярҙам да итә алмағандарҙыр инде.



*“Тамыр” телеканалында радиотапшырыуҙарҙың өлкән мөхәррире булып эшләгән Зөлфиә ҡыҙым менән тәүге редакторым да, баһалаусым да, секретарым да...*

Ни эшләптер гел әсем бошто. Түҙеп торғоһоҙ булып китә ине. Ул ваҡытта хатта йәшәге килмәй, тормошом мәғәнәһеҙ, бушҡа ғына уҙған кеүек. Төшөнкөлөккә бирелеүемдең сәбәбен һуңлап ҡына аңланым, баҡһаң, ул үҙемде таба алмауҙан булған икән. Тормошта тоткан урыным ул ғына түгеллеген аңлап та, ни эшләргә кәрәклеген белмәүҙән. Шулай аңҡы-тиңке йөрөгәндә йәш кенә бер уҡытыусы класс сәғәтенә әкиәт уҡырға саҡырғайны. Быға тиклем дә класымдағы балаларға үҙем уйлап сығарған әкиәттәрҙе һөйләй торғайным, уҡыусыларым йотлоғоп тыңлай ине. Был юлы ла балалар бик ошатты яңы әкиәтемде. Етмәһә, уҡытыусы ҡыҙ “ул әкиәттәр яҙа” тип таныштырғас, күңел үҫеп китте. Аҙаҡ уны журналға ебәрҙем һәм баҫылып та сыҡты. Унда эшләгән Венер Йәнбәковка рәхмәт: “Һеҙ бит өлгөргән яҙыусы”, – тип шунда уҡ күтәреп алды, иңемә ҡанат ҡуйҙы, үҙ-үҙемә ышанысымды арттырҙы. Яҙыша башлағас, күңел төшөнкөлөгө ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. Йәшәүемдең мәғәнәһен таптым шулай итеп.

## ЯҘЫУСЫ ҺӘМ РӘССАМ

Мин 2-3 йыл рәсемдән дә уҡытып алдым. Бәләкәйҙән һүрәт төшөрөргә яраттым, шуға күрә рәсемгә лә яҙышыуға ҡараған кеүек етди ҡараным. Рәссамлыҡ донъяһы тураһында хәбәрҙар булырға тырыштым, уҡыным, өйрәндем. Ошо осорҙа тыуҙы ла инде “Джоконда” хикәйәһе. Донъя рәссамдарын былай ҙа яратам мин. Бигерәк тә Рафаэль Санти ныҡ оҡшай, бик изге кеше булған ул. Ана шундайҙар үҙҙәренең донъяға булған ҡарашы аша кешегә йәшәү һулышы өрә. Шулай уҡ кешенең һутын һурып торған рәссам-вампирҙар ҙа була.



*Минең ғаиләм: тормош иптәшем Рим; уның эргәһендә әлеге көндә Сургут ҡалаһында донъя көткән, ЮХХДИ-ла эшләп йөрөгән Айсыуаҡ улым; "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының Юлдаш каналында оператор булып эшләгән Азамат улым һәм Зөлфиә ҡыҙым.*



*Гөлфирә киленем, Азамат улым, ейәнем Тимерхан.*

Франсиско Гойяны алайыҡ, уның яратып портреттарын эшләгән кешеләре үлеп торған. Ул үҙе һаңғырау булған, күҙенә тик шайтандар күренгән. Шул шайтандарҙы төшөрә башлағас, күҙенә күренеүҙән туктағандар.

## ГЕРОЙҘАРЫМ ҺӘМ СЮЖЕТ

Һуңғы яҙған "Яуап тотоу" тигән хикәйәм үҙенән-үҙе яҙылды, геройҙарым үҙ аллы эш итте. Әхирәтем Гөлсирә бер сюжет тәкдим иткәйне. Борон, ата-бабалар бар ваҡытта, ауыл осонда бер йорт ултырған, берҙән-бер көндә шул ер аҫтына емерелеп төшкән дә киткән. Өй башы, мөрйәһе генә күренеп ултырған. Кешеләр ҡаҙып алырға уйлаған, ләкин мулла рөхсәт бирмәгән. Тимәк, Хоҙай шулай ҡушкан, уны ер йотто, тигән ул...

Бармаҡтан һурып сығарылған әҫәр уҡышлы килеп сығалыр тип уйламайым мин. Ғәҙәттә, ерлектән алынған ниндәйҙер бер фекерҙе, хатта бәләкәй генә фактты ҡуйыртаһың, үҫтерәһең. Әллә нисә яҙмышты ҡушып, дөйөмләштереү ҙә яҙған әйбереңде көслө итә. Һуңынан төрлө деталдәр менән байытылһа ла, төп сюжет алдан уйланылған була.

Яҙғандарымдың барыһы ла ысынбарлыҡ. "Мөғжизәгә ышанам" тигән хикәйәм тулыһынса тормоштан алынған. Бер ҡатын, балаһы үлгәс ни эшләргә белмәй ҡаңғырып йөрөгәндә, хажға бара. Ғибәҙәт ҡылған мәлдә ҡуктән: "Нимә юғалтҡанһың, шуны табып алырһың", – тигән тауыш ишетеп шул тиклем ҡурҡа ул. Йөрәге ярылыр сиккә етә. Әлбиттә, яҙыусы булараҡ, һин уларҙы үҙеңсә ҡүрһәтәһең. Уҡыусыға ҡайһылай еткереү ижади һәләтеңдән тора.

Яҙышыр өсөн билдәле ваҡытым юҡ. Бигерәк тә таң мәлен яратам. Әҙерәк йорт эштәре менән булышаһың да, бер аҙ әҫәрҙәрең өҫтөндә эшләп алаһың. Тышта, саф һауала йөрөп инәһең дә, йәнә ултыраһың. Беренсе тапҡыр эшләгәндә рәхәт: ул мәлдә мин сюжет артынан сабам, ваҡ деталдәргә иғтибар итеп тормайым. Икенсегә күсереп яҙғанда инде ҡыйыныраҡ. Күсереп тә ултыраһың, стил өҫтөндә лә эшләйһең, етмәгән деталдәре тураһында ла уйлайһың. Ваҡытты ла ала, башты ла ҡайната. Редакторҙар ҡушһа, аҙаҡ тағы бер мәртәбә ҡарап сығаһың...

## ЙӘШЛЕК

Йәшлек иң бәхетле ваҡыт тиһәләр ҙә, бик ҡатмарлы осор ул. Эҙләнеүҙәр мәле. Йәшлек һоҡланғыс, әммә шул уҡ ваҡытта бының ҡәҙерен дә белмәйһең, алтындай ғүмереңде бушҡа сарыф итәһең. Шуға күрә йәштәргә яҙғанда әсәй күҙлегенән дә сығып ҡарарға тырышам, яҙыусы күҙлегенән дә. Уларҙың әрәмгә киткән ғүмерҙәре әсендерә. Әҙмәҙ булһа ла уҡымаҫтармы, фәһем алмаҫтармы икән тигән уй менән тотонам мин ҡәләмгә. Яҙмыштарының яңылышлыҡтарынан ҡурсалау теләге этәрә улар тураһында яҙырға.

"Ҡуш өйәңке" повесында телгә алған ағас беҙҙең ауыл эргәһендә ысынлап та бар. Ҙур, йыуан булып әллә ҡайҙан күренеп ултыра. Шул ағастың кеүәтенә гел һоҡланып ҡарап йөрөй торғайным. Энергетикаһы һәйбәт, барһаң, янынан китке лә килмәй. Повестың яҙылыуына шул ағас сәбәпсе булды ла инде. Колхоздарҙың тар-мар ителеү осоро һүрәтләнә әҫәрҙә. Ә ундағы колхоз председателе – хыял. Һәм ундай кешеләр һирәкләп булһа ла ысынбарлыҡта барҙыр тип уйлайым. Унан, ҡайҙа мөхәббәт – шунда хыянат. Повестағы һалдат образына бәйле күп факттар улымдың һөйләгәндәренән алынды. Үҙең армияға бармағас, ундағы

тормошто еңел генә һүрәтләп тә булмай шул. Инде ҡайтам тигәндә гранатомет шартлап, машина эсендә иптәштәренең һәләк булыуы, буткаға әйләнгән кәүҙәләрен илай-илай ташыу улыма ла рәхәт булмаған, шуға күрә был күренештәрҙе һөйләгәндә барыһын да яңынан кисергәндәй булды. Армия бер нәмә лә эшләмәй, төшкә саҡлы йоклап үҫкәндәргә генә ҡот оскос күренә. Иңдәрендә яуаплылыҡ тойоп үҫкәндәр иһә ниндәй ауырлыҡтар алдында ла бирешмәй, нык була.

## ЯҘЫЛМАЙ ҠАЛҒАНДАРЫ

Кис етһә, балаларым әкиәт һөйлә тип иҫте китәрә ине. Башта белгәндәремде һөйләнем. Унан рус халыҡ әкиәттәренә күстек. Алтын әкиәттәр, көмөш, бронза... Улары ла бөттө бер заман. Унан инде үҙем уйлап сығара башланым. Хәҙер уларҙы ҡағыҙға ғына төшөрмәйем ниңәлер. Ҡамасауламаҫ ине лә бит...

Күп кенә вак хикәйәләр ҙә уйлай торғайным. Улары ла тормошта булған хәл-вакиғаларға таянып тыуа. Бер көн ейәнем Шамил: "Ҡартнәй, кишер ниңә ҡаты икән, еләк йомшаҡ ҡына ла инде?" – тип һорап ҡуйҙы. Мин әйтәм: "Кишер ер аҫтында үҫә, ҡаты ерҙе этеп-төртөп сыға. Йомшаҡ ҡына булһа, нисек көсө етер ине һуң? Ә еләк һауала ғына ултыра, уға бер ҡаршылыҡ та юк, шуға ул ауыҙға ирер кенә тора". Бына бит, вак-төйәк кеүек кенә күренһә лә, балаларға бик ҡыҙыҡлы үҙе бер әҙер тема.

Үләнлектә бер ҡурсаҡ ята ине. Уның тураһында ла әкиәт уйланым. "Башта ул магазинда торған. Уны бай ғына бер ҡыҙыҡай һатып алған. Аҙаҡ уны ташлап китә. Ҡурсаҡты ябай ғына ауыл ҡыҙыҡайы табып ала. Әсәһе менән уға кулдәк тегәләр. Элеккке хужабикәһенә үпкәләп илап ятҡан ҡурсаҡ "мин яңғыҙ түгел, минең әсәйем бар" тип шул тиклем шатлана. Ҡыҙ ҙа бәхетле, ҡурсаҡ та". Уйланым да, тағы яҙа алманым...

## ЙӘШТӘРГӘ ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ

Йәштәрҙең маҡсатлы булыуҙарын, был тормошта үҙҙәрен тиҙерәк табыуҙарын теләйем. Маҡсатыңа ынтылғанда ғына тормош йәмле, мәғәнәле. Барыһына ла өлгәшер өсөн уйлы-фекерле булырға кәрәк, көн үтһенгә генә йәрәргә түгел. Юҡһа үҙҙәренә шул тиклем еңел ҡарағандары бар. Бигерәк тә уҡыу йортон һайлағанда. Ул бит һинең киләсәк тормошоңдо билдәләй. Тәғәйенләнешеңде тапһаң, ижади ҡомар, дәрт менән эшләйһең эшеңде. Һәр нәмәне ижади итеп башҡарыу әҙәбиәт йә сәнғәткә генә ҡайтып ҡалмай бит ул. Хатта мал ҡарауҙа ла сағыла был. Мәҫәлән, мин уларға ла йән эйәһе, Хоҙайҙың бер мәхлүктәре итеп ҡарайым, улар менән һөйләшәм, хөрмәт итәм үҙҙәрен. Шуға ҡартым: "Беҙҙең малдар ҙа ҡыҙыҡ инде, бүтәндәрҙекенә оҡшамаған", – тип көлә. Ысынлап та, улар барыһын да аңлап тора, аҡыллылар. Бесәйенә, тауығына хәтлем шундай.

Йәнә ғаиләлә именлек һаҡларға ынтылырға кәрәк. Өйҙә тыныслыҡ булмаһа, хатта икмәк тә уңмай бит ул, аштың да тәме юғала. Кейемең дә, прическаң да матур булырға мөмкин, әммә күҙҙәреңдән нур китә. Бына шуны аңлаһын ине ҡыҙҙар-егеттәр. Татыу, бер-береңде кәҙер итеп йәшәүгә ни етә! Ир менән ҡатын һөйөшөү өсөн генә ҡауышмай бит ул, улар бергә тормош көтөү, балалар үҫтереү өсөн өйләнешә. Ә якшы ғүмер кисереү өсөн бер-береңде аңлау, хөрмәт итеү мөһим.

***Яҙыусыны Гөлнара ҒӘЙЗУЛЛИНА тыңланы.***



*Тормош юлында ниндәй генә ауырлыҡтар аша үтергә тура килһә лә, беҙ уларҙы Рим менән иңгә-иң терәшеп бергә күтәрҙек.*



*Мин малдарға ла йән эйәһе, Хоҙайҙың бер мәхлүктәре итеп ҡарайым, улар менән һөйләшәм, хөрмәт итәм...*

# КҮПЕРҘӘ

Хикәйә



Ҡала йоҡоға талған мәл. Шулай ҙа ара-тирә кемдеңдер улай-былай уҙғаны күренеп ҡала, ҡыҫҡырышҡан тауыштар ишетелә, машиналар үтеп китә. Руслан бөгөн эштән һуң ғына сыҡты, иртәгә буласаҡ премьераға әҙерлек оҙаҡҡа һуҙылды шул.

Төнгө ҡалаға һоҡланып, уйҙарына бирелеп килгән егет шып туҡтаны. Алда, күпер осонда, ниндәйҙер шәүлә күҙенә салынып ҡалды уның. "Әллә күҙемә күренә инде" тип күҙен ыуғылап алды. Юҡ та. Ана бит, шәүлә тора. Әммә кем икәнен айырыуы ҡыйын. Ҡыҙмы, әллә егетме? Нишләп күперҙең иң ситенә баҫҡан? Шул ваҡыт шәүлә бер ҡулын ебәрҙе. Баҫҡан урынында ҡатып ҡалған Руслан ҡапыл айнығандай булды. Шәүлә эргәһенә нисек барып баҫҡанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

- Туҡта! – тип уның ҡулын тотоп өлгөрҙө.

Күперҙә ҡыҙ кеше ине. Ҡаушап ҡалды: "Йә Хоҙай... Кем ул? Нишләп мине туҡтатты? Йәнә бер аҙым... һәм мин барлыҡ ҡайғыларымдан ҡотолор инем... Ә бәлки... бәлки, Азаттыр?.." тигән уйҙар менән ҡыҙ Русланға боролоп ҡараны. Азат түгеллеген аңлағас, һуңғы өмөтө селпәрәмә килде ҡыҙҙың. Нәфрәт менән егеткә:

- Ебәр! – тине лә алға үрелде. Руслан ҡыҙҙың ҡулын ысҡындырманы.

- Юҡ! Ебәрмәйем! Теләйһеңме, теләмәйһеңме, әммә былдай хата яһарға юл ҡуймайым һиңә. Һинең ғүмерең хәҙер минең ҡулымда... – тине егет.

Төнгө тынлыҡта Руслондың аҙаҡҡы һүҙҙәре тағы ла ҡабатланғандай булды: "Һинең ғүмерең минең ҡулымда..." Бер минутҡа тынлыҡ урынлашты. Уйламай, хатта ниндәйҙер ирония менән әйтелгән һүҙҙәр егетте уйланырға мәжбүр итте. "Ә бит, ысынлап та, был ҡыҙҙың ғүмере минең ҡулымда. Әгәр ҙә уның ҡулын ныҡыраҡ тотмаһам... йә яңылыш берәй һүҙ әйтһәм... Юҡ. Был турала уйлау ҙа ҡурҡыныс... Ул йәшәргә тейеш һәм йәшәйәсәк..." Егеттең башынан йәшен тиҙлеге менән уйҙар

үтте, һәм Руслан ҡыҙҙың икенсе ҡулынан да тотоп алды. Былдай һүҙҙәрҙе көтмәгән ҡыҙ юғалып ҡалды, бер нәмә тип тә яуап бирмәне. Ә үҙе "Кем был егет? Нишләп ул миңә ярҙам итә? Бераү булһа, үтер ҙә китер ине... Ә ул килеп өлгөрмәһә... тотоп ҡалмаһа..." тип уйланы. Ҡулдарынан ҡаты итеп тотоуға ҡыҙҙың уйҙары өҙөлдө. Егеткә әйләнеп ҡараны. Руслан ҡыҙҙы биленән күтәреп алды һәм үҙенең ҡаршыһына баҫтырҙы.

- Һин ни эшләйһең?! – тине бер ни аңлап өлгөрмәгән ҡыҙ.

- Ошо һорауҙы мин бирергә тейеш инем, һылыу. Һин үҙеңдең ниндәй ҙур хата яһарға йыйынғаныңды аңлайһыңмы? – егет ҡыҙҙың күҙҙәренә тура ҡараны, тик ҡулдарын ебәрергә ашыҡманы.

- Һиңә барыбер түгелме? – тине ҡыҙ. Ә күҙҙәренән йәш аға ине.

- Барыбер булһа, туҡтап та тормаҫ инем.

- Туҡтарға һине берәү ҙә мәжбүр итмәне!

- Шулаймы ни?

- Ебәр!

- Юҡ. Һин хата яһайһың... Нишләп?

- Арыным...

- Мин дә...

- Ебәр...

- Бәлки... бергә....

- Нимә??? – ҡыҙ, әллә дөрөҫ ишетмәнемме тип, егеттең күҙҙәренә тура ҡараны.

- Мин дә арыным, һин дә арығанһың... Ә бәлки, бергә... – Руслан ҡарашын күперҙән аҫҡа, йылға ағымына төбәне. Ҡыҙ ни тип яуап бирергә белмәне.

- Етәр... Ҡалдыр мине...

- Нишләп, бәлки, минең дә был донъя менән хушлашҡым киләлер? Тик бер үҙемә күңелһеҙ ине... Ә хәҙер һин бар... тик миңә иртәгә премьерала ҡатнашырға кәрәк бит әле...

- Юҡ... – ошо һүҙҙәрҙе генә әйтә алды ҡыҙ.

- Нимә?

- Бөгөн дә, иртәгә лә түгел..

- Нишләп?

- Һин йәшәргә тейеш...

- Ә һин?

Егеттең һорауынан тертләп, ҡыҙ башын күтәрҙе...

- Тимәк, йәшәйбеҙ?

- Эйе. Ә хәҙер үтенәм, ҡалдыр яңғыҙымды, – тине ҡыҙ күҙ йәштәре аша. Руслан ни эшләргә белмәне, ҡыҙҙың ҡулын ебәрҙе лә:

- Ә һин?

- Юҡ, – тип бүлдерҙе ҡыҙ.

- Премьераға киләһеңме? – тип йылмайҙы Руслан.

- Килермен...

Күперҙә ҡыҙ яңғыҙы ҡалды. "Артабан ни эшләргә?.. Ҡайҙа барырға?.."

Ҡыҙ ҡараңғылыҡ аша алда күренгән бәләкәй генә яҡтылыҡҡа табан атланы.

***Альбина ҠОТЛОГИЛДИНА,***
***З. Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһының IV курс студенты.***

# ТОҒРО ЙӨРӘК

Нәҫер

Тирә-яҡ йәшелеккә күмелгән. Ҡоштар һайрай, ҡайҙалыр тартай тартылдай, бытбылдыҡ бытбылдай, себендәр безелдәшә, гөлдән гөлгә күбәләктәр оса, тирә-яғы нескә талдарға, зифа ҡамыштарға төрөнгән зәңгәр күлдә ҡыр өйрәктәре быжҡылдай.

Ошоларҙың барыһына ла иҫе китмәй генә, сәскә-үләндәрҙе йыра-йыра, ҡарт аҡ бесәй сабыйҙарын эйәртеп сыҫҡан ауларға китеп бара. Ул хужаларының нисек итеп үҙен бәләкәстәре менән ҡуша тоҡҡа һалып алып килеп ташлауҙарын уйлай-уйлай атлауын дауам итә. Ә сабыйҙары, әйтерһең бер ни булмаған, шаяралар, аунашып китәләр. Әсә әкрен генә башын бороп, шелтәләгән кеүек итеп бер мыраулай ҙа, тағы атлай. Бына ул бер



һомғол ҡайын төбөнә килеп туҡтаны һәм балаларын ҡосағына алып ятты: йоҡлаһындар, ял итһендәр. Аслыҡ та үҙен һиҙҙерә: уға нисек тә балаларын туйҙырырға кәрәк. Үҙ йүндәрен үҙҙәре күрергә бәләкәйҙәр шул әле. Нисек кенә булһа ла, аҡ бесәй, бәлки, хужам килеп алыр тигән өмөт менән йәшәне. Һәм уны бары бер генә һорау борсоно: "Ни өсөн уларҙы бында алып килеп ташланылар икән?" Ҡарт бесәй тағы аҡланға сыҡты. Сабыйҙары шаяра, эх, ниндәй матур уның бәләкәстәре, ҡарап туйғыһыҙ! Ул бер килке тере йомғаҡтарына һоҡланып ҡарап торҙо.

Шул саҡ аҡланда кемдәрҙеңдер һөйләшкәнен ишетеп, бәлки, хужам килеп таба алмай йөрөйҙәр, тип шул яҡҡа ыңғайланы.

Өс-дүрт кеше еләк йыя. Берәүһе үләндәр ҡыбырлаған яҡҡа ҡарап ҡысҡырып ебәрҙе:

- Абау, ҡарағыҙ әле, бесәй... балалары менән!

Ул йүгереп барып бесәйҙе ҡулына алды ла һыйпап кире ергә төшөрҙө, бер-бер артлы балаларын иркәләргә тотондо. Эй-й, уның ҡырағайҙары, ыҫылдаған булалар бит әле. Белмәйҙәр шул улар кеше иркәләүен. Бесәй кешеләрҙең аяғы аҫтында мырылдап йөрөй башланы. Ә бит уның хужалары иркәләү түгел, янынан яңылыш тейеп үтеп китһәң дә тибеп йә ҡарғап уҙыр ине. Шул саҡ кешеләр ҡайҙалыр йыйына башланы. Бесәй ҡыуанып китте, үҙенең эскерһеҙ, бер ҡатлы уйҙары менән "алып ҡайталар" тип уйланы. Юҡ! Алданды ҡарт бесәй. Сабыйҙарын машинаға индереп ултырттылар, ә ул... ҡалды. Сабыйҙары уны эҙләп үҙәк өҙгөс итеп мыяулаша башланы. Әсә күңеле түҙмәне, машинаның алдына һикереп менде, бәләкәстәрен иркәләргә, ялап йыуатырға теләне, әммә уның ҡытыршы телдәре йомшаҡ сабыйҙарына түгел, шыма, ҡаты быялаға ғына тейҙе. Бына машина ҡуҙғалды, ҡарт бесәй йығылып төштө һәм машина уның ярты биленән тапап уҙҙы. Ул хатта ҡысҡырырға ла өлгөрмәне. Инә бесәй күҙҙәрен зәңгәр күккә төбәп тынып ҡалды, уйҙары буталды. Күк йөҙө уның өҫтөнә ауып килгән кеүек булып, ҡып-ҡыҙыл төҫкә инде, тыны ҡыҫылды. Ул ҡапыл тертләп торорға итте, әйтерһең, уны сабыйҙары эҙләй, әйтерһең, уларҙың ашағыһы килгән, әйтерһең, улар эргәһендә шаяра... Юҡ, юҡ!.. Уның кескәйҙәрен алып киттеләр.

Нисә тапҡыр телгеләнеләр уның йөрәген? Нисә тапҡыр күҙ алдында сабыйҙарын юҡ иттеләр? Тере килеш һыуға һалыуҙары, тупраҡҡа күмеүҙәре, көнө буйына мыяулап, ашарға һорап, һалҡын келәттә бикле ятҡан сабыйы... әле лә хәтерендә... Түҙҙе әсә йөрәге, түҙҙе. Шуға ҡарамаҫтан, нисек тоғро хеҙмәт итте ул хужаларына. Ә бөгөн килеп... Бына, инде һуңғы ҡыуанысы булған сабыйҙары тағы юҡ! Ниндәй матур, ниндәй йомшаҡ ине уның бәләкәстәре. Был юлы, үҙенең ҡартайыуын да иҫкә алып, хужалары уны балалары менән бергә ошо ергә алып килеп ташлап китте. Хужаларының рәхмәте ошомо икән ни?..

Йәнә бер тапҡыр күҙен асып күккә төбәне лә аҡ бесәй, тынып ҡалды... Йәне йәннәткә осто... Ҡояшты болот ҡапланы, сәскәләр башын эйҙе, ҡоштар, бөжәктәр тынып ҡалды. Күк йөҙөн телеп йәшен йәшнәп ебәрҙе. Бер гонаһһыҙ ҡарт аҡ бесәй шулай яҡты донъя менән хушлашты.

*Гүзәл ҒӘЗИЗОВА,*
*Баймаҡ районы Өмөтбай ауылы урта мәктәбе уҡыусыһы.*

# ӘСӘ БӘХЕТЕ

Нәҫер

Төн ерҙә алыҫлаша барған итек шаҡылдауы әрнеү-шаңдау булып оҙаҡ яңғыраны. Нисәмә йылдар йөрәкте өйкәгән үҙара мөнәсәбәт бына шулай көтмәгәндә хәл ителде. Һәм Сәйҙә, ниһайәт, тәүге тапҡыр тынысланып еңел һулап ҡуйҙы.

...Барыһы ла бынан ун дүрт йыл элек башланды. Күршеләрендә генә йәшәгән Тәғзимә апай, оҙаҡ ауырығандан һуң, ҡыштың сатлама бер һыуыҡ төнөндә яман шеш ауырыуынан донъя ҡуйҙы. Уның тормош иптәше, электән үк эсергә яратҡан Ғәлиулла ағай, ҡайғы һылтауы менән бөтөнләй айыҡманы. Улдары Юлай оҙон акса артынан Себер тарафтарына китеп олағыу сәбәпле, әсәһен ерләшергә ҡайта алманы. Хәйер, уға был хаҡта хәбәр итеүсе лә булмағандыр, сөнки бер кем дә анык ҡына адресын белмәй ине. Ҡыҙҙары Гөлнараның мәктәпте тамамлап, медучилищела уҡып йөрөгән сағы.

Күрше булараҡ, ерләү мәшәҡәттәре тулыһынса Зөлфәт менән Сәйҙәнең өҫтөнә төштө лә ҡуйҙы. Аксаға ҡытлыҡ кисергән туғандары илашып оҙатыуҙа ғына катнашты. Иҫерек атаһы менән бер өйҙә ҡалмаҫ өсөн, Гөлнара уларҙа ҡунырға рөхсәт һораны. Сәйҙә, әлбиттә, ҡыҙҙы йәлләп, уның теләгенә ҡаршы килмәне. Ҡабат уҡырға киткәнендә лә ярҙам иттеләр. Артабан Гөлнараның каникул ваҡыттарын күберәк күршеләрендә үткәреүе ғәҙәти күренешкә әйләнде. Ғәлиулла ағайҙың айыҡ көндәре һирәк булғанға күрә, ҡыҙы ҡайтҡан араларҙа ул уны күрмәне тиерлек.

Уҡып бөтөп, күрше ауылға эшкә урынлашҡас та, ялдарында төп өйө итеп Сәйҙәләргә ҡайтты. Бер көндә "кәңәш токсайы" ҡушаматы тағылған Дилбәр исемле ҡарсыҡ ҡатынды ҡарауыллап тороп йәнәшә атланы.

- Ҡыҙым, Гөлнараға ярҙам итеүегеҙ сауаплы эш, ләкин өйөңә бик йыш юлатма. Йәш булһа ла, күҙеҡашы уйнап тора, бәлә булмағайы.

- Юҡҡа борсолаһығыҙ, Дилбәр апай, – тине Сәйҙә. – Зөлфәт уны һылыуы кеүек күрә.

- Һине яратып, якын күреп кенә әйтеүем. Ир-ат ҡатын-ҡыҙ үргән ауға йыш эләгеүсән, ҡалғанын үҙең ҡара, – тине әбей ҡоро ғына.

Был һүҙҙәрҙе ысынға алмаһа ла, Сәйҙәнең күңелендә юшҡын ҡалды. Бынан ары ул Гөлнара ингән ваҡыттарҙа һалҡынлыҡ күрһәтте. Зөлфәт тә, ҡыҙ йорттарына килеп инеү менән, һылтау табып сығып китеү яғын ҡараны. Тиҙҙән был сәйер ҡылыкка яуап табылды.

Ямғырҙар йышайыу сәбәпле, картуф алырға һуңлап киттеләр. Шуға күрә лә ял көнөнөң матур тороуынан файҙаланып, иртә менән картуф алаһына килделәр. Зөлфәт ҡаҙа барҙы, ә Сәйҙә менән Гөлнара картуфты биҙрәләп ташып, таратып һалды. Ярты баҡсаны үткәйнеләр, көтмәгәндә ҡыҙ эсен тотоп ергә сүгәләне.

- Нимә булды, һылыу?

Гөлнара хафаланып Сәйҙәгә ҡараны, унан ҡарашын Зөлфәткә күсерҙе. Зөлфәт көрәген ташланы ла ток артынан китте.

Ҡыҙ башын аҫҡа эйҙе.

- Мин ауырлы, апай.

Сәйҙә ағарынып китте. Дуҫлашып йөрөгән егете лә юҡ кеүек ине лә баһа. Әллә көсләнеләрме икән?.. Юҡ, юҡ булмаҫ.

- Кем ул? – тип һораны Сәйҙә үҙ тауышын үҙе танымай.

- Һорама, апай.





Әйтергә теләмәүен күргәс, ҡатын был турала башҡаса һүҙ ҡуҙғатманы. Ләкин ауылда бындай хәлде йәшереп буламы ни? Гөлнараның ҡапыл тигәндәй эсе ҡалҡып сығыуын күргән ҡатын-ҡыҙ араһында шыш-быш башланды. Тиҙҙән ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа күсеүсе ҡотһоҙ хәбәр Сәйҙәгә лә килеп ишетелде: буласаҡ баланың атаһы – Зөлфәт!

Киске аштан һуң һауыт-һабаны йыуғас, ҡатын иренә табан боролоп:

- Дөрөҫмө ошо хәбәр? – тип һораны. Тормош иптәшенең бер генә һүҙе бөтә имеш-мимештәрҙе туҡтатыр, ялған ғәйбәткә сик ҡуйыр, тигән өмөт йәшәй ине уның күңелендә. Әммә Зөлфәттең яуабы Сәйҙәнең бөтә ышанысын селпәрәмә килтерҙе.

- Дөрөҫ, Сәйҙә. Минең яҡтан хата булды.

Зөлфәт ҡарашын иҙәнгә төбәне. Ҡатын башына һуҡҡандай иҫәңгерәп, урындыҡҡа сүкте. Уның Зөлфәте? Гөлнара менән? Ҡасан? Нисек? Ни өсөн ул белмәгән? Ул устары менән йөҙөн ҡаплаған килеш байтаҡ бәүелеп ултырҙы. Ире, ниндәй генә һүҙҙәр әйтһә лә, ҡатынының үҙен ғәфү итә алмауына төшөндө. Сәйҙә уны ҡыуманы. Тик ике арала күҙгә күренмәҫ быяла барлыҡҡа килде.

Зөлфәт китмәне. Ҡатынының ғәфү итеүен һораны, тик уның ялбарыу һүҙҙәре һалҡын, нәфрәт тулы ҡарашҡа осрап, кире ҡаҡлыҡты. Сәйҙә бер һүҙ ҙә ишетергә теләмәне. Урамда уларҙы ғәйепләп йәки яманлап һүҙ йөрөтмәне. Кемдәрҙеңдер үҙен йәлләп башлаған йыуатыу хәбәрҙәрен дә ҡырҡа туҡтатты.

Гөлнараның ҡыҙы донъяға килгәс, Сәйҙә ире менән бөтөнләй һөйләшмәҫ булды, хатта Зөлфәттең бер-ике мәртәбә ҡыҙмаса ҡайтыуын да күрмәмешкә һалышты. Ошоғаса бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәгән, бер-береһе өсөн йөрәктәрен ярып бирергә әҙер ике йән ят кешеләргә әүерелде.

...Төүге ике көндә Зөлфәт Гөлнараларҙың өйөнән сыҡманы. Сәйҙә, нисек кенә йөрәге әрнемәһен, һыр бирмәҫкә тырышты. Ире кис һуң ғына ҡайтып диванға ауҙы, ә иртәгеһен таң менән сығып китте.

Сәйҙә йоҡо бүлмәһенән иҙән таҡталарының шығырлауын, Зөлфәттең ауыр һулап ҡуйыуын тыңлап байтаҡ ятты. Күңелен бушлыҡ солғап алды. Ирекһеҙҙән күҙҙәрен йәш томаланы. Үҙенең әсә бәхетенән мәхрүм булыуын, ә Зөлфәттең үҙ балаһын һөйөргә теләүен аңлай ине. Артабан нисек йәшәргә? Ул үҙен Зөлфәттең тормошонда артыҡ итеп тойҙо.

Сәйҙә күп илауҙан шешеп ҡыҙарған күҙҙәрен усы менән ҡаплап бер аҙ ултырҙы ла, көндәге күнегелгән хәрәкәт менән өй эштәрен башҡарҙы. Тамағына аш бармаһа ла, көслөп тигәндәй үҙен сәй эсергә мәжбүр итте. Унан кер йыуыу машинаһында йыйылған керҙәргә ҡарап торҙо ла, Зөлфәттең кейемдәрен айырып иҙәнгә ырғытты. Был ҡыланышынан үҙенә ҡыйын булып китте.

- Булһын, – тине ул тамағындағы төйөрҙө йотоп. – Минең өсөн ул хәҙер сит кеше. – Ҡатындың йөрәге һыҙланы. Сәйҙә бер нисә йыл элек булған ваҡиғаны иҫләне.

...Ҡыштың матур бер көнө ине. Ул, шатлығын тиҙерәк Зөлфәткә еткерергә теләп, атламай, оса ғына. Тормош ниндәй матур! Ҡояшта йымйым килгән ҡар бөртөктәре донъяға сафлыҡ бөркә, атлаған һайын шығырлаған ҡар үҙенә генә хас көй сығарып йәнгә моң өләшә.

Сәйҙә әсә буласаҡ! Ошонан да ҙур бәхет бармы икән донъяла?! Ул Зөлфәттең ҡыуаныстан уны күтәреп алып, бүлмә буйлап әйрәлтәсәген, шашып биттәренән, күҙҙәренән үбәсәген алдан уҡ белеп тора, шуға ла ирекһеҙҙән йылмая ине.

Шул уҡ төндә күп ҡан юғалтыуҙан хәлһеҙләнгән Сәйҙәне "тиҙ ярҙам" машинаһы дауаханаға алып китте. Зөлфәткә баланы һаҡлап ҡалыу мөмкин түгел, әсәнең ғүмере ҡыл өҫтөндә, тинеләр. Бүтәнсә балаға уҙа алмаясағын раҫланылар.

- Яҙмыш беҙгә шундай һынау бир-

гән икән, тимәк, бер-беребеҙ өсөн йәшәрбеҙ, – тип тынысландырырға тырышҡайны ҡатынын Зөлфәт... Бөтәһе лә һин уйлағанса килеп сыкмай икән. Ул ирендәрен ҡымтып тешләне лә, иренең кейемдәрен ҡабаттан кер йыуыу машинаһына ташланы.

...Йоҡларға йыйынған Сәйҙәне Зөлфәттең ишек шаҡыуы тертләтте. Ошо хәлдәрҙән һуң нисек уның янына инергә баҙнат итәлер?! Ул йән асыуы менән ишекте асып, уға нәфрәтле ҡарашын төбәне:

- Нимә кәрәк һиңә?

Зөлфәт уға тилмереп ҡараны.

- Һинең менән һөйләшергә ине.

- Һөйләшеүҙең хәҙер кәрәге юҡ. – Сәйҙә йоҡо бүлмәһенә йүнәлгән иренең юлына арҡыры төштө. Зөлфәт, ҡарашын ҡайҙа төбәргә белмәй, ҡулын ҡаушырҙы.

- Сәйҙә... Тыңла мине... Үҙемде аҡламайым. Беҙҙең арала һөйөү хисе юҡ. Яңылыштым. Ғәфү ит.

Сәйҙә, ҡалтыраныуын һиҙҙермәҫкә тырышып, тәҙрә янына килде. Ире һөйләүен дауам итте:

- Беләм, һиңә еңел түгел. Һуңғы ваҡытта ғәйбәт менән ауыл тулды. Беләһеңме, Гөлнара ҡаты ауырый. Табиптар баланан һуң өҙләккән, тиҙәр. Уны дауаханаға һалалар, әммә баланы ҡалдырырға урын юҡ. Ярҙам ит, зинһар... Ун биш көнгә генә.

Сәйҙә ғәжәпләнеүҙән дуғаланған ҡашын яҙып иренә ҡараны.

- Гөлнара ауырый тиһеңме?

- Эйе. Ошоғаса баланы мин ҡараным, тик ҡулымдан килерҙәй түгел. Етмәһә, Ғәлиулла ағай иҫерек.

Сәйҙә Зөлфәткә бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә үҙ бүлмәһенә инеп китте.

Иртәгеһен ул күршеләренең өйөнә килде. Ярты бүлмәне биләгән урындыҡ өҫтөндә сәңгелдәк элеүле тора. Бер яҡ мөйөштә Гөлнара ята. Ул тағы ла нығыраҡ ябыҡҡан. Йонсоған күҙҙәре эскә батып һүрәнләнгән. Йәш әсә ҡаушауҙан, куркыуҙан ҡалтыранған тәнен ҡуҙғатып, хәлһеҙ генә урындыҡтан ҡалҡынды. Сәйҙә уны йыуатыуҙан тыйылды. Ул берсә ятһынып, берсә ҡыҙыҡһынып сәңгелдәккә яҡынлашты. Бала ҡул-аяҡтарын туҡтауһыҙ сәбәләндереп имергә әҙләй ине. Сәйҙәгә ошо кескәй генә яҡлаусыһыҙ йән эйәһе сикһеҙ йәл тойолдо. Баланың уның алдында ниндәй гәйебе бар?

- Исеме кем?

- Гөлназ.

...Гөлнараны дауахананан ике аҙнанан һуң да сығарманылар. Сәйҙә эшенә барып отпускыһын оҙайтыуҙарын һораны. Тәүге көндәрҙә бик ауырға тура килһә лә, ул аҡрынлап бала ҡарау серҙәренә төшөнә барҙы. Үҙен кеше һүҙенән аралап, бер кемдән дә кәңәш һораманы. Гөлназ илаһа, уның менән бергә илаңы, йоҡлаған мәлендә эшен бөтөрөп ҡалырға тырышты. Ҡыҙға тамам эйәләшкән ҡатын уны ҡосағына ҡыҫып бәүелткәндә: "Һиңә мин һинең әсәйең түгел икән?" – тип бышылданы.

Зөлфәт тә ҡатынында булған үҙгәреште күрмәй ҡалманы. Уның сабый янында булышыуын ҡырҙан ғына күҙәтте. Ярҙам кәрәк сакта эргәһендә булды. Ләкин үҙ-ара һөйләшмәнеләр.

Тиҙҙән Гөлнара дауахананан ҡайтты һәм ҡыҙын алырға килде. Сәйҙә, ниндәйҙер өмөт менән, хәлһеҙлеге йөҙөнә бәреп сыҡкан йәш ҡатынға төбәлде.

- Әле нығынып бөтмәгәнһең бит. Бала миндә ҡалһын.

Гөлнара тупаҫ тауыш менән:

- Атаһы ҡарашыр, – тине. Шул сакта ғына Сәйҙә Гөлнараның Зөлфәтте нисек тә булһа үҙе янында торорға тырышыуын аңланы. Бына уның күршеһенең мәрхәмәтлек, изгелектәренә рәхмәте! Ләкин Зөлфәт башҡаса күршегә инмәҫ булды. Уның ҡарауы, Сәйҙә үҙенә урын таба алманы. Уға бер туҡтауһыҙ Гөлназ илай кеүек тойолдо. Көнөнә әллә нисә тапкыр ишек алдына сығып тыңлап та ҡараны. Шәмбегә ҡараған төн яҡынлашыуға бала илауы айырым-асыҡ ишетелде. Сәйҙә йоҡлай алмай туҡтауһыҙ бүлмәнең иҙәнен тапаны. Ахырҙа түҙмәй ал яҡка сыкты. Зөлфәт өнһөҙ ҡараш менән





ҡатынын күҙәтте. Сәйҙәнең күңелендә ниндәй ҡойон уйнағанын аңлай ине ул. Ҡатын уңлы-һуллы бәргеләнде лә, шәп-шәп аҙымдар менән Гөлнараларҙың өйөнә табан атланы. Бала илап, ярһыуҙан ҡып-ҡыҙыл булып, тимгел таптар менән ҡапланғайны. Сәйҙә Гөлназды тынысландырырға тырышып, күкрәгенә ҡысты:

- Гөлнара, бала ас бит?

Гөлнара һыңҡып илап ебәрҙе.

- Мин яңғыҙым ғына яфаланырға тейешме ни?

Икенсе бүлмәнән Ғәлиулла ағайҙың асыулы тауышы ишетелде.

- Ә кем өсөн таптың һуң? Зөлфәтте Сәйҙәнән айыртып алыр өсөнмө?

- Атай, ҡыҫылма! Һинән бер ни ҙә һорамайҙар бит.

Сәйҙә аптырап Гөлнараға ҡараны.

- Ысынлап та, бары тик шуның өсөн генә таптыңмы?

Ҡыҙ өндәшмәне.

Тағы ла аҙна-ун көндәй ваҡыт үтте. Бер көндө Зөлфәт иртәләп ҡайтты ла, Сәйҙәне алғы яҡҡа саҡырып сығарҙы.

- Гөлнара баланы йәтимдәр йортона бирергә ниәтләй, – тине ул. – Эшкә сығам, ти.

Сәйҙә уға моңһоу ҡарашын төбәне. Ир үҙенең иң яҡын, иң ҡәҙерле кешеһенә күпме ғазаптар килтереүенә, әрнеү уттарында янырға мәжбүр итеүенә әсенде. Шундай саҡта ла Сәйҙәнең кешелекле булып ҡала белеүенә һоҡланды. Уны ҡосағына ҡыҫып йыуаткыһы, ғәфү үтенгеһе килде.

Һүҙһеҙ ҡараштарҙа тойғолар тәрәнлеген аңлатҡан һағыш ята ине.

- Баланы әгәр ҙә минеке итеп юллай алһаң, барыһына ла ризамын, – тине Сәйҙә тынлыҡты боҙоп. – Һин уның атаһы, хаҡың бар, тик мин бында ҡала алмайым.

Зөлфәт менән Гөлнара араһында ниндәй һөйләшеү булғандыр – билдәһеҙ, ләкин улар ике аҙна эсендә йортйыһаздарын һатып, ауылдағы ғәйбәткә һуңғы нөктә ҡуйып, күсеп китте. Сәйҙә үҙе өсөн иң ҡәҙерле йәнгә әйләнгән сабыйҙы күкрәгенә ҡыҫып, артабанғы яҙмыштарын Зөлфәткә тапшырып, һуңғы мәртәбә үҙҙәренең өйөнә боролоп ҡараны ла, йәшле күҙҙәрен йүргәк араһына йәшерҙе.

* * *

...Зөлфәт иртә менән урман эше буйынса сығып китте, Гөлназ әле мәктәптән ҡайтмаған. Ҡыйыуһыҙ ғына ишек ҡағыуға туҡмас йәйеп торған Сәйҙә:

- Инегеҙ, асыҡ, – тип саҡырҙы. Үҙе инеүсене сәләмләргә тип боролдо ла, көтөлмәгән ҡунаҡты күреүҙән, уҡлауын төшөрөп ебәрҙе. Гөлнара! Гөлнара нимәнән һүҙ башларға белмәй, ә Сәйҙә осрашыуҙы яҡшыға-яманға юрарғамы тип, бер нисә минутҡа һүҙһеҙ ҡалдылар.

Ахыр Сәйҙә үҙен ҡулға алды.

- Уҙ әйҙә, – тине ул ҡоро ғына.

Үҙе иҙәнгә төшкән уҡлауҙы эйәләп алды ла табаҡтағы һыуҙа сайҡатты. Ҡоро сепрәк менән ҡоротҡансы һөртөп, он менән һыпырҙы. Гөлнара аяҡ кейемдәрен сисеп, өҫтөн һалғас, тәҙрә янындағы ултырғысҡа яҡынланы.

- Нисек йәшәйһегеҙ, Сәйҙә апай, – тине ул өй эсен күҙҙән үткәреп.

- Аллаға шөкөр, зарланмайым. – Ҡатын ҡабаланып туҡмасын йәйеп бөттө лә ашъяулыҡҡа киптерергә һалды. Сәйгүнгә һыу тултырып газға ҡуйҙы. Үҙе эске ҡалтыраныу менән Гөлнараның сираттағы һорауын көттө.

- Мин һеҙгә яуыҙлыҡ теләп килмәнем. – Тыныс ҡына әйтелгән әлеге һүҙҙәрҙән һуң Сәйҙәнең өҫтөнән ауыр йөк төшкәндәй булды. Ул, ниһайәт, күршеһенең йөҙөнә күтәрелеп ҡараны.

Ҡыҙҙың биттәре түңәрәкләнеп, ҡулбаштары, кәүҙәһе тулыланып матурланған, һылыу ҡатынға әүерелгән. Күҙ ҡараштарының Гөлназдыҡына оҡшаш булыуына Сәйҙә тертләп ҡуйҙы.

- Гөлназ мәктәптә, йәмғиәт эштәре буйынса йөрөй, – тине ул.

Гөлнара ҡарашын һыуыҡһыҙ башындағы фотоһүрәткә күсерҙе. Ҡара диңгеҙгә барған саҡта өсәүләп

төшкәйнеләр.

- Ҡайһылай ҙурайған, – тине ул көнсөл тауыш менән. – Урамда күрһәм, танымаҫ инем.

Сәйҙә өндәшмәй генә өҫтәл әҙерләне, үҙе йәш ҡатындан күҙен алманы. Ниндәй маҡсат менән килгән? Гөлназ ҡайтһа, кем тип таныштырыр? Башында бер-бер артлы һорауҙар ҡайнаны. Ул Гөлнараны өҫтәл янына саҡырҙы.

- Һеҙҙән һуң мин дә ауылды ташлап сығып киттем, – тип һүҙ башланы Гөлнара ҡайнар сәйгә өрә-өрә. – Ҡалала эшкә урынлаштым, кейәүгә сыҡтым. Улыма алты йәш була инде. Ирем һәйбәт, тик ғәрсел кеше. Гөлназ тураһында белмәй. Өс йыл элек атайым да донъя ҡуйҙы. Себерҙәге Юлай ағайым ҡайтып китте. Уның да үҙ ғаиләһе, үҙ тормошо. Ауылдағы өй буш тора хәҙер. Ә һеҙҙең йортто ҙурайтҡандар, ҡырҙан ғына ҡарап уҙҙым.

Гөлнараның һүҙҙәре элекке ваҡиғаларҙы хәтерләтте, күңелен һыҙлатты. Ул ваҡытта Зөлфәт ғаиләһен ауылдағы ғәйбәттән, мыҫҡыллы ҡараштан һаҡлап ҡалыр өсөн ҡабалан ғына өйөн һатты ла, яңы адресты иң яҡын кешеләренә генә әйтеп, ауылдан сығып киткәйнеләр шул.

- Беҙҙең адресты кем бирҙе?

- Журналда һине маҡтап яҙған мәҡәләне уҡыным. Унда районды да, ауылдың да исеме яҙылған.

Ысынлап та, бынан ике ай самаһы элек уның хаҡында журналға яҙғайнылар. Урман хужалығында эшләүсе Сәйҙәгә күптәр шылтыратып ҡотлау һүҙҙәре еткерҙе.

- Ошонан һуң үҙемә урын таба алмайым. Тәүәккәлләнем дә юлға сыҡтым. Иремә өй тураһындағы мәсьәлә менән үҙ ауылыма барам, тип ялғанланым. – Китәйем инде.

- Гөлназды көтмәйһеңме ни?

- Юҡ. Бәлки беҙгә осрашырға яҙмағандыр. Күрһәм, тыйыла алмам, илармын.

Гөлнара кейемен алды ла Сәйҙәгә табан боролдо.

- Сәйҙә апай, мин үҙем ғаиләле булғас ҡына һиңә ни тиклем ғазап килтергәнемде аңланым. Ғәфү ит мине, зинһар өсөн.

Уның күҙҙәрендә эркелгән йәштәргә ҡарап, Сәйҙә түҙмәне, ҡатынды ҡосаҡлап алды.

- Гөлназ ҡыҙым өсөн рәхмәтлемен һиңә. Мин һине күптән кисергәнмен.

Гөлнара күҙ йәштәре аша күңелһеҙ генә йылмайҙы.

- Борсолмағыҙ, нисек кенә йөрәгем әрнеһә лә, мин башҡаса һеҙҙең тыныслығығыҙҙы боҙоп йөрөмәйәсәкмен. Хуш, һау бул, Сәйҙә апай. Рәхмәт һиңә барыһы өсөн дә.

Сәйҙә Гөлнараны оҙата сыҡты ла, ул күҙҙән юғалғансы ҡарап торҙо.

- Әсәй, ниңә урамға сығып көтөп тораһың? Һуңлабыраҡ ҡайтам, тип әйттем дә инде.

Гөлназ әсәһен ҡосаҡлап битенән үпте.

- Киләһе аҙнала әҙәби кисә була. Миңә "Кеше тормошонда изгелектең әһәмиәте" темаһы эләкте.

Ул хәбәрен һөйләй-һөйләй әсәһен өй яғына ыңғайлатты. Сәйҙә ҡыҙының ҡыуаныслы-көйөнөслө һүҙҙәрен тыңлаған һайын, бөгөнгә көнгә тиклем оҙата килгән борсоулы уйҙарының аҡрынлап таралыуын, ҡурҡыу тойғоһоноң юғалыуын тойҙо. Гөлназ хаҡына ул Зөлфәтте кисерҙе, тыуған төйәген ташлап, бөтөнләй ят ергә килеп йәшәй башланы, барлыҡ туғандарынан, дуҫтарынан ваз кисте.

Дөрөҫ эшләнеме? Был һорау уны оҙаҡ яфаланы. Баланы әсәһенән айырып, үҙенә гонаһ алманымы?

Әммә Сәйҙә бөтә һөйөүен, әсәлек наҙын Зөлфәттең икенсе ҡатынынан тыуған балаһына бүләк итте. Бер ҡасан да иренә үткән ваҡиғалар тураһында һөйләмәне, үпкә һүҙҙәрен әйтмәне.

"Әсәй!" тигән һүҙҙе ишетеү өсөн уға күпме хурлыҡ, кәмһетелеүҙәр аша үтергә тура килде. Бөгөн Сәйҙә үҙенең ошо бәхеткә лайыҡлы булыуына инанды.

Ниндәй бөйөк көс икән ул – Әсәлек.



# ПРОЦЕНТҠА АҠСА АЛЫУ

## ЙӘКИ КИПМӘГӘН КҮҘ ЙӘШТӘРЕ ТУРАҺЫНДА

**– Әле яңыраҡ ҡына мул итеп аҡса ебәргәйнек, тағы һораған. Балаңды уҡытам тиһәң, аҡсаңды әҙерләп кенә өлгөр инде.**
**– Түләүле бүлеккә урынлаштырҙыңмы әллә?**
**– Юҡ та, сессия мәлендә зачетка араһына аҡса ҡыҫтырыу ғәҙәти күренешкә әйләнгән бит.**
**– Күпме кәрәк һуң?**
**– Биш меңдән кәм түгел.**
**– Хәҙер кешенән аҡса алыуы еңел түгел бит ул. Процентҡа ғына эҙләп ҡарамаһаң...**



Эйе, тормош якшыра тиһәк тә, заманға яраҡлашып йәшәү өсөн көндән-көн күберәк аҡса талап итәлә. Аҙык-түлеккә, кейем-һалымға, коммуналь хеҙмәтләндереүгә хаҡтарҙың көн һайын артыуына шаһит булғас, “сит илдә бай туғандарың табылмаҫмы?”, йә “бәхетле лотерея эйәһенә әүерелеп булмаҫмы?” тип йышыраҡ хыяллана башлайһың. Халыҡтың ошондай мәле менән файҙаланып ҡалырға ашыҡҡан мут әҙәмдәр ҙә йоҡлап ятмай. Былай ҙа эш хаҡынан эш хаҡына тиклем осон-оска саҡ ялғап йәшәгән кешеләрҙе кәкре ҡайынға терәтеп, кеҫә ҡалынайта.

Ямғырҙан һуң ҡалҡып сыҡҡан бәшмәктәр кеүек күбәйгән шәхси банкылар тураһында әйтеп тормайыҡ. Сөнки улар барыһын да закон буйынса эшләй. Хәйер, банкыларҙың ниндәй проценттар менән эш итеүҙәрен үҙ елкәһендә татығандар якшы белә. Утыҙ мең һум алып, етмешәр мең һум ҡайтарыуы еңелдән түгел шул. “Башҡаса кредит алмайым” тип ант итһәләр ҙә, күптәр, кәмәләре ҡомға килеп терәлгәс, ҡабаттан шуларға йүгергәнен һиҙмәй ҙә ҡала.

Шулай ҙа бөгөн һүҙем процентҡа аҡса биреүселәр тураһында. Ҡапыл ғына аҡса кәрәк

булған осраҡта ҡайҙа барырға белмәй аптыранып йөрөүселәргә ярҙам ҡулы һуҙған "мәрхәмәтле" кешеләр күбәйә хәҙер.

Кредитын түләй алмаған Таһир ағай ҙа процентка аҡса биреүсегә мөрәжәғәт итә. "Тиҙ арала ҡайтара алмайым", – тиеүенә, тегеһенең: "Ярай, хәҙер иктисади көрсөк – кешенең аҡсаһы юҡ. Ике ай көтөрмөн", – тигән һүҙҙәре күңеленә май булып ята. Унан теге кеше Таһир ағайға паспортын алып килергә ҡуша. "Мин һиңә хәҙер 20 мең һум аҡса бирәм. Әммә аҡсамды кире ҡайтарыу өсөн залог кәрәк. Хәҙер һинең исемгә кредитка телевизор юллайбыҙ. Уның тәүге түләүе өсөн аҡсаны ошо 20 мең һум эсенән алаҫаҡбыҙ. Сираттағы айҙа ла кредитты үҙең түләйһең. Был минең һиңә биргән аҡсаның проценты буласаҡ. Ике айҙан һуң аҡсаны ҡайтараһың һәм кредитты минең исемгә күсерәбеҙ", – ти процентка аҡса биреүсе.

Шул рәүешле Таһир ағайҙың ҡулына 20 мең һум урынына 15 мең һум аҡса килеп эләгә. Аҡса биреүсе ҡиммәтле телевизорҙы машинаһына тейәй ҙә, китеп тә бара. Ә Таһир ағай киләһе айҙан үҙенең кредитынан тыш, телевизор өсөн дә аҡса түләй. Унан процентка биреүсе менән осрашып 20 мең һум күләмендәге бурысын ҡайтара. Тик телевизор өсөн алынған кредит тураһында һүҙ сығыу менән, тегеһе: "Әйҙә, иртәгә төштән һуң осрашырбыҙ. Паспортым ауылда ятып ҡалған", – тип ҡабаланып китеп бара. Һәм юкка сыға. Уны эҙләү, телефонына шылтыратыу ҙа ыңғай һөҙөмтә бирмәй. Хәҙер инде Таһир ағайға үҙенең кредитынан тыш теге әҙәмдең телевизоры өсөн дә түләргә аҡса эҙләргә тура килә. Үҙ ҡулы менән имзаһын ҡуйып, паспортын күрһәтеп алған телевизорҙан ул хәҙер баш тарта ла алмай бит. Барыһы ла законлы рәүештә эшләнгән.

Ләлә апай улының туйына аҡса еткерә алмай аҙаплана. Балаһын атайһыҙ үҫтергән. Буласаҡ ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары алдында кәм-хур булғыһы килмәгәндер инде. Шуға күрә уға ла процентка аҡса биреүселәрҙе эҙләргә тура килә. "Банкыларға барып ҡараным. Унда көтөргә, документтар юлларға кәрәк ине. Ә миңә аҡса бына бөгөн үк кәрәк булды", – тип уфтана Ләлә апай хәҙер.

Ул үҙенең исеменә компьютер алырға ризалаша. Кешене кәкре ҡайынға терәүҙә шымарып бөткән әҙәмдәр апайҙы еңел генә алдап, барыһына ла күндерәләр ҙә 35 мең һум урынына 27 мең һум аҡса тоттороп китәләр. Ләлә апай, банк компьютер өсөн түләү талап итә башлағас, тәүҙә эштең етдилегенә төшөнөп етмәй. Унан ваҡытында түләмәгән өсөн штраф та һалынғас, барыһын да асыкларға була. Уның күҙ йәштәре аша: "Компьютер өсөн түләргә тейеш икәнлегемде белмәнем. Минең ғәйебем юҡ. Йортомдо барып ҡарағыҙ, минең компьютерым юҡ, ул миңә кәрәкмәй ҙә!" – тиеүен бер кем дә тыңларға теләмәй. Сөнки кредит уның исеменә юлланған, килешеүгә апайҙың ҡултамғалары ҡуйылған. Шуға күрә хәҙер Ләлә апайға туйға туғандарынан, таныштарынан йыйған бурысын ҡайтарыуҙан тыш, әллә ҡайҙа осҡан компьютер өсөн дә түләргә тура килә. "Ярай, баҡсала үҫтереп алған йәшелсәм, киптергән емеш-еләк бар. Иттең нимә икәнлеген онотторға тура килде. Ә бит шул кешеләрҙе яуапка ла тарттыра алмайым. Улар минең аҡсаһыҙлыктан аптыраныуым менән файҙаланып, тишек кәмәгә ултырттылар. Хәҙер туғандарым ҡунаҡҡа саҡырһа ла барырға тартынам, сөнки һәр береһенән бурыска аҡса алғанмын. Ул әҙәмдәр ошондай гонаһка батып нисек тыныс йәшәйҙәрҙер?!" – тип үҙенә тынғы тапмай Ләлә апай.

Ундай кешеләрҙең ояттың, выждан ғазабының нимә икәнен дә белмәүҙәрен ябай кешеләр, бигерәк тә ололар, аңлай алмай шул. Шулай, йәмәғәт, "процентка аҡса бирәм" тип халыкты алдаусыларҙың күбәйеүен онотмаһағыҙ ине. Ә иң ҡурҡынысы – хатта ҡан туғандарының да бер-береһен шулай итеп төп башына ултыртыуы, бурыска батырыуы. Шуға күрәләр инде "Үҙеңдән башка бер кемгә лә ышанырға ярамай!" тигән һүҙҙәр беҙҙең замандың девизына әүерелде.

Тағы бер ғаиләнең балаһын дауалау өсөн процентка аҡса алып, фатирһыҙ тороп ҡалыуы күңелде тетрәндерҙе. Операция яһатыу өсөн уларға Мәскәү йә Санкт-Петербург ҡалаһына юлланырға кәрәк була. Әммә аҡса таба алмайҙар. Операцияны тиҙ арала эшләтеү талап ителгәс, улар банкыға түгел, ә процентка аҡса биреүсегә мөрәжәғәт итә. Был кешенең үҙҙәренең алыҫ туғаны булыуы уларҙа ышаныс уята. Һөҙөмтәлә йәш ғаилә фатирһыҙ тороп ҡала. Әлбиттә, судтан судка йүгергәндә фатирҙы ҡайтарыу мөмкинлеге бар ине. Ошондай мәлдә урамда тороп ҡалған йәш әсәнең аҡылы, сабырлығы, таҙа, саф күңеле тетрәндерҙе. "Иң мөһиме – операция уңышлы үтте. Сабыйыбыҙ һауыға башланы. Бының өсөн фатирымды түгел, йәнемде лә бирергә әҙер инем. Аҡса табып биреүебеҙҙе көтмәй, фатирҙы тартып алған кешегә бер үпкәм дә юҡ. Уның аҡсаһы беҙҙең балабыҙҙы коткарырға ярҙам итте. Бәхетле йәшәһен", – тине ул.

Эйе, кемдеңдер ҡыйын хәлдә тороп ҡалыуы менән файҙаланған кешеләр бар. Шуға ла процентка аҡса алыуҙың ниндәй ҡурҡыныс эҙемтәләргә килтереүен онотмай, аҡыл менән эш итеп өйрәнһәк ине. Еңел рәүештә алып булған аҡсаны ҡайтарыуы ауыр икәнлеген аңларға ваҡыт, дуҫтар.

Процентка аҡса биреүселәрҙән отолған Ләлә апай һәм уның кеүектәрҙең әлегә кипмәгән күҙ йәштәре ҡасан да булһа онотолор, ә ояттһыҙ рәүештә кеҫә ҡалынайтыусылар барыбер тейешле яҙаһын алыр әле...

*Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.*

# «УЙЫНСЫҠ АҠСА»ЛАР ҠУРҠЫНЫСМЫ?

Бер ағай һөйләгән ваҡиға хәтерҙә. “Баҙарҙа ҡаҙы һатып торам. Оло йәштәге инәй килеп тауарымды һайлай. Тиҙерәк һатыу маҡсатында мин дә маҡтайым инде. Алырға булды. Биш йөҙ һумлыҡ сығарҙы, тик минең ҡайтарырға аҡсам тулыңҡырамаһы. Һөт, май тәҡдим итәм. Ҡалған аҡсаһына инәйем тағы бер ҡаҙы алырға ризалашты. Ҡыуанып киттем, рәхмәт әйтеп ауыҙ йырып тороп ҡалдым... Табышымды башҡа аҡсалар янына һалып торһам... бына һиңә, аҫтына ғына “ялған аҡсалар банкы” тип яҙылмаһынмы?! Киттем артынан йүгереп, тик таба алманым... Ҙур ҡалала мине көтөп тора ти... Тик ошонан һуң миңә һабаҡ булды”, – ти.



Беҙҙең менән дә булғайны шундай ҡыҙыҡ хәл. Әхирәтемдең туйында ҡыҙ һатабыҙ. Бер ишек өсөн 300 һум тотторҙолар, тик ул сувенир аҡса булғанын ҡараңғыла аңғармағанбыҙ ҙа. Иртәгәһе көнөнә генә белеп ҡалдыҡ. Истәлек итеп алып ҡайттым. Оҙаҡ йөрөнө ул кеҫәмдә, нимә эшләтергә белмәйем. Йөҙ һумын ҡустыма бирҙем, йөҙ һумын юғалттым, йөҙ һумы стенкала ятып ҡалды, ә мин уҡыуға киттем. Бер көн атайым Магнит ҡалаһына барырға йыйынғанда күҙе әлеге аҡсаға төшкән. Һалып алған. Сувенир икәнен белмәгән дә инде. Автобуста водителгә һонғас, ул алып ҡараған да кире ҡайтарған. Ярай әле тауыш ҡуптарып тормаған да, ярай әле атайымдың тағы аҡсаһы булған, тапҡан аҡсаһына ғына ышанып юлға сыҡмаған. Ҡайтҡас әсәйем менән миңә әҙерәк эләкте инде, тик беҙ көсләп бирмәгән бит, үҙе алған. Ҡустыма биргән аҡса менән дә шулайыраҡ хәл булған, был юлы атайым урынына инәйем автобуста “ялған аҡса” менән иҫәпләшергә йыйынған, тик насар ниәт менән түгел, ә белмәйенсә...

Эйе, тәү ҡарашҡа ысын аҡсанан ялғанын айырып та булмай. Бер үк ҙурлыҡта, бер үк һүрәт, тик “билет банка России” урынына “билет банка приколов” тип яҙылған, икенсе яғында, аҫта “түләүҙәр өсөн ҡулланылмай” тип иҫкәртелгән. Уларҙы һәр киоскынан теләгән кеше һатып ала: долларын теләйһеңме, евромы әллә һумлыҡтармы – барыһы ла бар. Был аҡсалар насар уй менән дә сығарылмаған, бары сувенирҙар ғына, банкнотта серия, номерҙар ҙа юҡ, шуға уйлап табыусыны яуаплылыҡҡа тарттырып та булмай. Әммә еңел юл менән генә байырға теләүселәребеҙ бында ла йоҡлап ятмағанын онотабыҙ шул.

Бер пенсионер әбейҙе лә аңһат ҡына төп башына ултырта еңел аҡса артынан ҡыуыусылар. Туҡталышта бер йәш егет ерҙән йомарланып бөткән биш меңлек “табып” ала. Эргәһендә торған пенсионер әбей бөтәһен дә күреп тора. “Уңайһыҙланған” егет уға бүлешергә тәҡдим итә. Әбей башта ризалаш-

маһа ла, нисектер көндәрә уны йәш кеше. Үҙе яҡындағы магазинға ваҡлатырға инеп китә. Тиҙ генә кире әйләнеп килә лә, магазинда ваҡ аҡса булмауына һылтана. Оло кешегә "йомро баш": "Яртыһын миңә бир ҙә, мин һиңә биш меңлекте бирәм", – тип тәкдим итә. Пенсионерҙың үҙе менән 1700 һум аҡсаһы ғына була. "Мәрхәмәтле" егет шуға ла ризалашып, тиҙ арала юкка сыға. Бәхетле ҡарсыҡ, байып, тәмлекәстәр алып һыйланырға хыялланып, магазинға килгәс кенә алданғанын белеп ҡала. Һатыусы аҡсаһын кире ҡайтарғас, бер тине лә ҡалмаған әбей хоҡуҡ һаклау органдарына мөрәжәғәт итә. Күрһәтмәләрендә егеттең тәпәшерәк буйлы, 25-30 йәштәр тирәһендә икәнлеген генә әйтә ала. Афериска РФ Енәйәт кодексының 159-сы статьяһы буйынса енәйәт эше асыла, тик һаман эҙенә төшә алмайҙар. Егетте ғәйепләмәй ҙә ҡарсыҡ, үҙен әрләй. "Буш сырҙың ҡапҡанда ғына икәнлеген һаман аңламайым", – ти ул.

"Уйынсыҡ" аҡсаларҙың иң беренсе ҡорбаны таксист була. Һуң ғына, ҡараңғы төшкәс бер ҡыҙ ултыра. Һораған урынына алып барғас мең һумлыҡ менән иҫәпләшә. Ҡалған аҡсаны алып, төшөп китә. Бары 2 сәғәт үткәс кенә таксист купюралағы яҙыуҙы күреп, алданғанын аңлай.

- Яҡында ғына милиция бүлексәһен күреп ҡалдым да инеп ғариза яҙҙым. Барыбер тапманылар, – ти ул.

Тотолғандары ла була икән. Үҙен социаль эшсе итеп танытып, пенсионер әбейгә 3000 премия бирергә ингән була ул. 5000 һумлыҡты һуҙғас, ҡарсыҡ ҡалған аҡсаны ҡайтара, тик ваҡытында аҡсаның сувенир икәнлеген күреп ҡала һәм хоҡуҡ һаклау органдарына мөрәжәғәт итә. Ҡыҙыу эҙҙәр буйынса аферисты ҡулға алалар. Әле уға ҙур күләмдә штраф ҡаралған.

Магазиндарҙа аферистар күберәк йөҙ һумлыҡтар менән эш итә икән. Сөнки эрерәк купюраларҙы һатыусылар тикшереп ҡарап ала, ә йөҙ, илле һумлыктарҙы йомарланған килеш тә башҡалары янына оҙата.

Бындай миҫалдарҙы әллә күпме килтерергә була. Кемдер ысынлап алдау маҡсатында ҡулланһа, кемдер белмәҫкә лә мөмкин. Иң мөһиме, аҡса менән эш иткәндә уяулыкты юғалтмаҫка кәрәк. Шулай ҙа аферистар тоҙағына эләктегеҙ икән, был аҡсанан ошо уҡ юл менән ҡотолғансы милицияға мөрәжәғәт итергә ашығығыҙ. Бындай шаярыуҙарҙы яраткандар өсөн дә 3 йылға тиклем иректән мәхрүм ителеү ҡаралғанын иҫкәртке килә.

*Альбина САДЫҠОВА.*



## шоңкар

- Һин миңә аҡсаны нимәгә тотонғаныңды әйт, мин һиңә ҡайҙан алғаныңды әйтермен.
- Кеше кеҫәһендәге аҡсаны һанау һәйбәт түгел, ә ҡыҙыҡ.
- Ялған аҡсаның ысынынан бер генә айырмаһы: тәүгеһе өсөн ултырталар.
- Кешене склероз иткең киләме — уға аҡса бир.
- Бөтәһенә лә оҡшарға мин аҡса түгел.
- Үҙемә осһоҙ машина алырға мин бай түгел.
- «Тарих ҡабатлана» тип дөрөҫ әйтәләр икән, бына минең тағы ла аҡсам юҡ.
- Бәлә килдеме — көшәлегеңде ас.
- Тормош һәм аҡса тураһында ул бөткәс кенә уйланабыҙ.

# ТОРМОШТОҢ ТӨП РОМАНЫ



ОСКАР УАЙЛЬДТЫҢ: "ҮҘЕҢӘ ҠАРАТА МӨХӘББӘТ – ҒҮМЕР БУЙЫНА ҺУҘЫЛҒАН РОМАН", – ТИГӘН ҺҮҘҘӘРЕ БАР. БЫҒА "ӘГӘР ҘӘ УЛ ТОЙҒО ҠАСАН ДА БУЛҺА УЯНҺА" ТИП ӨҪТӘРГӘ ГЕНӘ ҠАЛА. Ә ҮҘЕБЕҘҘЕ БӘХЕТЛЕ ИТЕП ТОЙОРҒА ҺӘМ ТОРМОШТАН ҠӘНӘҒӘТЛЕК АЛЫП ЙӘШӘРГӘ ТЕЛӘҺӘК, БЫЛ ХИС МОТЛАҠ БАШЛАНЫРҒА ТЕЙЕШ.

КҮП ҠАТЫНДАР ҮҘҘӘРЕН ЯРАТАБЫҘ ТИ, Ә ТӘЖРИБӘ КҮРҺӘТЕҮЕНСӘ, ЙЫШ ОСРАҠТА УЛАР ХАТАЛАНА.

ҮҘЕҢӘ ҠАРАТА БУЛҒАН ЫСЫН МӨХӘББӘТ ТОЙҒОҺОН КИСЕРЕР ӨСӨН СӘЛӘМӘТ ТОРМОШ АЛЫП БАРЫУ, ФИЗИК ӘҮҘЕМЛЕК, ДӨРӨҪ ТУҠЛАНЫУ ҺӘМ ҮҘЕҢДЕ ҠАРАП ҠЫНА ЙӨРӨТӨҮ, КЕШЕГӘ КӘРӘКЛЕ ТӨП ИХТЫЯЖДЫ ҠӘНӘҒӘТЛӘНДЕРЕҮ МӨМКИНЛЕКТӘРЕНЕҢ БУЛЫУЫ ҒЫНА ЕТМӘЙ. ӘММӘ БЫЛ ҺАНАП ҮТЕЛГӘНДӘР – ҮҘЕҢӘ ҠАРАТА МӨХӘББӘТ УЯТЫУҒА ТАБАН ӘҺӘМИӘТЛЕ АҘЫМ.

## ҮҘЕҢДЕ ЯРАТМАЙҺЫҢ, ӘГӘР:

- һирәкләп булһа ла һын-ҡиәфәтеңде, холкоңдо, ҡылыктарыңды тәнҡитләһәң (быға альтернатива – төплө анализ һәм хәлде якшыртыуға булышлыҡ иткән һығымталар);
- ваҡыттың күп өлөшөн күңел ятмаған, йөҙәткес эшкә бүлһәң;
- мораль һәм матди ҡәнәғәтлек килтереүсе эш менән шөғөлләнмәһәң һәм булмышыңды билдәләү өсөн көс һалмаһаң;
- йылдар буйы проблемалы мөнәсәбәттәргә түҙеп йәшәһәң;
- башыңда негатив уйҙарҙың өҫтөнлөк итеүенә юл ҡуйһаң (улар уңышка һәм сәскә атыуға бер нисек тә булышлыҡ итә алмай);
- башҡаларҙың (якындарыңдың, туғандарыңдың) уңышы өсөн үҙеңдең теләктәреңде, ҡыҙыҡһыныуҙарыңды ҡорбан итһәң;
- үҙкиммәтеңде һәм уникаллегеңде аңламаһаң;
- бүтәндәрҙән ваҡытыңды, иғтибарыңды һәм якшылығыңды артык файҙаланырға, үҙеңде кәмһетергә, тәнҡитләргә юл ҡуйһаң;
- үҙеңдең эшеңде, хеҙмәтеңде тейешенсә баһаламаһаң;
- көсөңә, мөмкинлектәреңә һәм үҙ-үҙеңә ышанмаһаң;
- талантыңды, ижади һәләтеңде, көслө яктарыңды үҫтермәһәң;
- ваҡытыңды бушҡа уҙғарһаң;
- үҙеңә иң ҡиммәтле йән эйәһе тип ҡарамаһаң;
- дәртһеҙ һәм ҡәнәғәтһеҙ йәшәһәң, йәшәү сифатын якшыртыу өсөн бер нәмә лә эшләмәһәң.

Үҙеңде һөйөү менән тулыландырһаң, ул тышка атылып сығып, тормошобоҙҙоң барлык өлкәһенә, эргә-тирәләгеләргә тарала, ә аҙаҡ артып, кире әйләнеп ҡайта. Шуға ла үҙеңде яратып, үҙеңә генә түгел, ә аралашкан кешеләргә, һине уратып алған донъяға яктылык өләшәһең.

Үҙеңә булған ҡарашыңды, фекерҙәреңде, ҡылыктарыңды яйлап ыңғай якка үҙгәртеү менән үҙеңә ҡарата хөрмәт тойғоһо, үҙбаһа барлыкка килә. Бер үк ваҡытта һине уратып алған донъя ла үҙгәрә. Әгәр кеше үҙен хөрмәт итә икән, уны башҡалар ҙа хөрмәт итәсәк. Был – ҡанун.

Бала, үҫмер сағыгыҙҙың нисек үтеүенә, хәҙерге мәлгә тиклем тормошоғоҙҙоң ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, үҙегеҙҙе хәҙер ятырға өйрәнергә мөмкин.

## НИСЕК ЯРАТЫРҒА ӨЙРӘНЕРГӘ?

Үҙеңде мотлаҡ яратырға кәрәк. **Әммә яратыуҙы ғорурлыҡ, һауаланыу, эрелек, тәкәбберлек менән бутарға ярамай.** Үҙ-үҙеңә ғашиҡлыҡ бүтәндәрҙе һанға һуҡмау, уларға кәмһетеп ҡарау менән бер, ә үҙеңде яратыу башҡаларға ихтирамлы булыу менән ярашып йәшәй.

Бүтәндәр тарафынан үҙ шәхесегеҙҙе хөрмәт иттереүгә ынтылығыҙ. Бының өсөн иң тәүҙә үҙегеҙҙе тәнҡитләүҙән тыйылығыҙ.

***Үҙегеҙҙе ҡыуандырығыҙ.*** Таныштарығыҙға ҡыҙыҡлы коллаж эшләргә яратаһығыҙмы? Төшөрөгөҙ! Ял көндәре оҙағыраҡ йоҡлағығыҙ килһә, рәхим итегеҙ, йоҡо туйҙырығыҙ. Әхирәттәрегеҙ, иптәштәрегеҙ менән осрашығыҙ, ял итегеҙ, үҙегеҙҙе ҡарағыҙ.

***Хаталаныуҙан ҡурҡмағыҙ.*** Башҡаларҙың хатаһына ҡарап фәһем ал тиһәләр ҙә, ғәмәлдә, үҙеңдең башыңдан үтмәйенсә аңламайһың. Хаталар – тормош тәжрибәһен туплауҙың айырылғыһыҙ өлөшө. Шуға ла, тәүәккәлләгеҙ!

Ҡылған ҡылыҡтарығыҙ өсөн ***үҙегеҙҙе ғәфү итегеҙ.*** Хата, үпкә, кәмһетелеү кеүек йөктәрҙе үҙегеҙҙә йөрөтһәгеҙ, алға китеш булмаясаҡ. Көн башында уҡ күңелегеҙгә ятҡан йыр-көйҙәр менән кәйефегеҙҙе күтәрегеҙ. Бәләкәй саҡтағы кеүек карауатта һикереп йә бейеп алығыҙ. Тормош – ул хәрәкәт.

***Көҙгө алдында һөйләшегеҙ.*** Иртән тороп, көҙгө алдына баҫаһың да: “Мин һине яратам. Һин бәхетле булһын өсөн мин нимә эшләй алам?” тигән һорау бирергә мөмкин. Бынан һуң эске тауышығыҙға ҡолаҡ һалығыҙ. Тәүҙә яуап ишетелмәҫкә мөмкин, сөнки һеҙ үҙегеҙҙе һәр саҡ әрләргә генә күнеккәнһегеҙ.

Көндөҙ, мәҫәлән, берәй күңелһеҙ хәл килеп тыуһа, көҙгөгә килеп: “Мин барыбер һине яратам” тиергә кәрәк. Әгәр яҡшы нәмә булһа, рәхмәт әйтергә онотмағыҙ. Көҙгөгә ҡарап шулай уҡ үҙегеҙҙе ғәфү итә, башҡаларҙан ғәфү үтенә алаһығыҙ. Үҙен ярата алмаған кешеләр, ғәҙәттә, ғәфү итә белмәй: тап шул ғәфү итеүгә һәләтһеҙлек үҙеңде яратыуға кәртә булып тора ла инде. Ә ғәфү итеп, ҡара уйҙарҙан арынғас, ауыр йөктән ҡотолоу менән бергә үҙеңә лә юл асыла.

Беҙ башҡаларҙы үҙгәртә алмайбыҙ, шуға ла уларҙы тыныслыҡта ҡалдырыу зарур. Уларға бүлгән энергияны үҙегеҙгә йүнәлткәндә, һеҙ үҙегеҙ үҙгәрәсәкһегеҙ, һәҙәмтәлә, эргә-тирәләгеләрегеҙ һеҙгә башҡаса мөнәсәбәттә буласаҡ. Әгәр бөтөнләй үҙгәрергә теләмәгән насар кеше осраһа, үҙегеҙҙе яратыуығыҙ аша ғына уның менән аралашыуҙан баш тарта алырһығыҙ.

Ҡыҫҡаһы, бөгөндән үк үҙегеҙгә ҡарата булған фекерҙәрҙе үҙгәртегеҙ, яҡшы мөнәсәбәт булдырығыҙ. Үҙегеҙ тураһында тик ыңғай уйҙа булығыҙ, сөнки уйҙар тормошҡа ашыусан.



**Чарли Чаплин:**

### «ҮҘЕМДЕ ЯРАТА БАШЛАҒАС...»

Ғазапланыу менән һағыштың намыҫыма ҡаршы йәшәүҙе иҫкәртеүсе билдә генә булғанын үҙемде ярата башлағас ҡына аңланым. Бөгөн мин беләм: ул **“ДӨРӨҪЛӨК”** тип атала.

Үҙемде ярата башлағас, кеше үҙе әҙер булмаҫ элек һәм ваҡыты етмәҫтән алда теләктәренең тормошҡа ашырыуын көсләп тағып, берәүҙе нык итеп үпкәләтергә мөмкин икәнен аңланым. Бөгөн мин уны **“АСЫЛЫУ”** тип атайым.

Үҙемде ярата башлағас, икенсе төрлө тормошҡа ынтылмай башланым һәм уратып алған барлыҡ нәмә мине камиллашырға саҡырғанын күрҙем. Был – **“ӨЛГӨРӨҮ”.**

Үҙемде ярата башлағас, ниндәй генә хәл булмаһын, үҙ ваҡытында дөрөҫ урында булыуымды һәм барыһы ла кәрәкле мәлдә килеп сығыуын аңланым. Шуға ла тыныс була алам. Хәҙер уны **“ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫС”** тип аңлайым.

Үҙемде ярата башлағас, ваҡытымды урлауҙан һәм киләсәккә ғәйәт ҙур пландар ҡороуҙан туҡтаным. Бөгөн мин тик шатлыҡ һәм бәхет алып килгән, күңелем ятҡан нәмәләр менән генә шөғөлләнәм, был үҙ сиратында яҡшы кәйеф алып килә. Уларҙы үҙемдең ысулдарым буйынса һәм өйрәнгән ритмда ғына эшләйем. Бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда был – **“ЯБАЙЛЫҠ”.**

Үҙемде ярата башлағас, мине аҫҡа һөйрәгән, һаулығыма зыян килтергән һәм үҙемдән алыҫлаштырған бар нәмәнән – аҙыҡтан, кешеләрҙән, әйберҙәрҙән, хәлдәрҙән ҡотолдом. Тәүҙә мин уны дөрөҫ (ғәҙел) эгоизм тип атағайным, бөгөн **“ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ ЯРАТЫУ”** тип ҡарайым.

Үҙемде ярата башлағас, хаҡлымын тиеүҙән баш тарттым, шунан алып аҙыраҡ хаталанам. Хәҙер беләм, ул – **“БАҪАЛҠЫЛЫҠ”.**

Үҙемде ярата башлағас, үткәндәр менән йәшәүҙән һәм киләсәкте ҡайғыртыуҙан туҡтаным. Бөгөн мин тик хәҙерге менән йәшәйем. Был **“ТОРМОШҠА АШЫУ”** тип атала.

Үҙемде ярата башлағас, аҡылымдың кәйефемде боҙа алыуын һәм шуның арҡаһында ауырып китеү ихтималлығына төшөндөм. Ә уны йөрәгем менән берләштергәйнем, зиһенем ҡиммәтле кәңәшсемә әүерелде. Бөгөн мин был берләшмәне **“ЙӨРӘКТЕҢ ТӘРӘН АҠЫЛЫ”** тип атайым.

Беҙгә башҡаса бәхәстәрҙән, үҙеңә йә бүтәндәргә осраған проблемаларҙан ҡурҡырға ярамай. Хатта йондоҙҙар ҙа бәрелешә, һәҙәмтәлә яңы донъя барлыҡҡа килә. Бөгөн мин беләм: **“БЫЛ – ТОРМОШ”.**

*Ләйлә ЗАКИРОВА әҙерләне.*

# «СӘСТӘРҘЕ СӘСКӘ БӘЙЛӘЙЕК»



Һөйгәненә тәҡдим яһауҙы ҡыҙҙың «ҡулын һорау» тип атау Көнбайыш Европала барлыҡҡа килгән. Имеш, кемдер ҡыҙға тәҡдим яһағанда уға бирсәткә бүләк иткән.

**«Ҡулды һорағанда»** элек-электән тәҡдим яһаған ир-егет үҙе һайлаған ҡатын-ҡыҙын мәңге яратырға, ҡыуанысында ла, йыуанысында ла бергә булырға һәм тоғро булып ҡалыуына ла ант итергә тейеш булған.

Әммә тәҡдим яһар алдынан, үҙенең, шулай уҡ ҡыҙҙың ысын мөхәббәт утында ҡайнауҙарына инанырға һәм дә тойғоларына ышаныу талап ителгән.

**ӨЙЛӘНЕҮ** – етди аҙым, уны яһар алдынан күп кенә йәшәйеш һорауҙарына ҡағылыу мотлаҡ булған. Бөгөн дә шулай.

Мәҫәлән:

*– ваҡытын дөрөҫ файҙалана беләме?*

*– һөйгәне өсөн барыһына ла әҙерме, барыһын да үтәйәсәкме?*

*– ҡыҙыҡһыныуҙары тураһында йәре менән бүлешәме?*

*– ҡыҙға ҡарата йылы ҡараштамы?*

*– ир-егет бәхәстән һуң беренсе булып ғәфү үтенерме?*

Әгәр ҙә көслө зат һорауҙарға “эйе” һүҙе менән яуапылаһа, тимәк һөйгән йәрен һис шикһеҙ бәхетле итәсәк.

Ҡатын-ҡыҙҙың тәҡдимде ҡабул итергә, кире ҡағырға, йә булмаһа бер аҙ уйланырға хаҡы бар... Ләкин ир-егет үҙ тәҡдименә ниндәй ҙә булһа яуап көтә. Ул шул уҡ ваҡытта тәҡдимдең кире ҡағылыуына ла әҙер булырға тейеш. Ысын ир-егет үҙенең кире хис-тойғоларына ирек ҡуймай, һөйгәненең ҡарашы менән килешә. Ә аҡыллы ҡатын-ҡыҙ бер ваҡытта ла ир-егеттең намыҫынан көлмәй, ысын дуҫҡа һанай. Шулай итеп, нескә зат уға тоғролоғононоң ныҡлығын һәм мөхәббәтенең сафлығын иҫбатларға тағы ла бер мөмкинлек бирә.

Төньяҡ Европала үткән быуаттарҙа үҙ һөйөүеңде белдереү, тәҡдим яһау иң мөһим төшөнсәләрҙең береһе булып һаналған. Егете һөйгән йәренә ата-әсәһе, туғандары, дуҫтары оҙатыуында килгән. Ҡыҙ менән егетте бер минутҡа ғына ҡалдырыу ҙа ҙур гонаһ һаналған. Егет тәҡдимен яһап, ҡыҙ ризалығын бирһә, башҡа кеше был ҡыҙҙы һоратырға килергә тейеш булмаған. Бөгөнгө көндә хәлдәр башҡасараҡ: ҡатын-ҡыҙ башта кейәүгә сығырға ризалыҡ биргән осраҡта ла һуңынан үҙ ҡарашын үҙгәртә ала.

Хәҙерге ваҡытта **«ҡул һорау»** йолаһы һәр халыҡта ғына түгел, ә төрлө кешелә төрлөсә башҡарыла. Һауала, һыу аҫтында... уға тик фантазия ғына кәрәк.

**Украина** һәм **Белоруссия** илдәрендә егет ризалыкты ҡыҙҙың атаһынан һорай.

Ә Азия илдәренә килгәндә, мәҫәлән, **Японияла** егеттең ата-әсәһе ҡыҙҙың ата-әсәһенә килеп ҡыҙҙарын биреүҙәрен һорай.

**Һиндостанда** иһә йола көслө. Унда улдарына тап килгән ҡыҙҙы егеттең ата-әсәһе һайлай. Шулай уҡ ҡыҙҙың да ата-әсәһе инициатива күрһәтә ала. Һиндтарҙа йәше етеп кейәүгә сыкмаған ҡыҙ нәҫеленә һәм дә ата-әсәһенә мәсхәрә килтерә тип һанала. Никахлашыу көнөн астролог төҙөй, ул ир-егеттең һәм ҡатын-ҡыҙҙың йондоҙнамәһенән сығып, тантана көнөн билдәләй. Ә инде никахлашыу мәжлесендә йәштәр булмай, уларҙың ата-әсәләре, йә булмаһа оло йәштәге туғандары араһында ғына үтә.

Латин Америкаһы илдәрендә «кул һорау» инициативаһын ҡатын-ҡыҙ күрһәтә. Мәҫәлән, **Мексикала** ҡыҙ кеше 13-15 йәштә үк кейәүҙе үҙе һайлап ҡуя. Туйға тиклем, күпме генә ваҡыт араһы үтмәһен, һайланғандан баш тартырға ярамаған.

**Бразилиялағы** ҡайһы бер һинд ҡәбиләләре ҡыҙҙары оҡшаткан кешеһенә һауыт менән бутка алып килә. Әгәр ҙә егет бутканан баш тарта икән, тимәк, ҡыҙ тәкдименә ризалашмауына ишаралаған, әгәр бер нисә ҡалаҡ ауыҙ итһә – уйланырға ваҡыт һорауы, ә инде бөтәргәнсе ашауы бер һүҙһеҙ «эйе» тигәнде аңлаткан.

**Филиппин утрауҙарында** ҡоҙалашыу – үҙенсәлекле көрәнеш. Унда иһә егет тәкдимен һеңгә аша белдергән, йәғни һеңгәнә һөйгәненең ҡәртәһенә ташлаған.

**Финджанда** «кул һорау» тәртибе беҙҙекенә окшашыраҡ. Егет ҡыҙҙың кулын атаһынан «һорай». Ата-әсәһенә киммәтле, йә затлы әйбер килтерелә.

Ә инде **Яңы Гвинеяға** килгәндә, тәкдим тәмәке тартыу аша яһала. Егет тәмәке әсенә үҙенең сәсен һалып, яртыһына тиклем тарткас, әсәһенә бирә, ә ул килененә тоттора. Ҡыҙҙың тәмәкене бөтәргәнсе тартыуы – ризалыҡ билдәһе.

*Азат ҒӘЛИУЛЛИН.*







## БАШКОРТТАРҘА
## ҡыҙ алыу йолаһы

Ҡыҙ баланы йәштән кейәүгә биреү башкорттарҙа борондан килгән йола. Йыш ҡына ул хатта ҡыҙҙың ризалығынан тыш башкарылған, күп осракта был хакта уның әсәһенә лә әйтелмәгән. Ырыусылык осоронда барлыкка килгән был йола ырыу-ҡәбиләләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе нығытыу максатында ла файҙаланылған. Шуға күрә үҙ ырыуыңдан ҡыҙ алыу ғәйепкә һаналған.

Бишек туйы үткәс, ир бала атҡа менерлек, ҡыҙ бала бәләкәй күнәктәр менән көйәнтә күтәрерлек булып, ун йәштәргә еткәс, "һырға-алка" туйы үткәрелә. Был туйға ир баланың ата-әсәһе килен буласаҡ ҡыҙ өсөн һырға-алка алып килә. Әлеге күркәм йола йылдар үткәс никах туйы – ике йәш йөрәктең өйләнешеүен рәсмиләштереү менән тамамланып ҡуя. Әммә ошо арала ике яктың да матди хәле башка тәҫ алһа, йәки егеттең ағаһы үлеп, ул еңгәһенә өйләнергә тейеш булһа, "бишек", "һырға" туйҙарындағы килешеүҙәрҙең үҙгәргән йәки бөтөнләй үтәлмәгән осрактары ла күҙәтелгән.



# Һорауҙарға юрист Гөлсәсәк ТУКТАМЫШЕВА яуап бирә



**Һорау: Телефон һатып алдым. Өс мәртәбә төҙәтергә бирергә тура килде. Уны нисә тапҡыр төҙәттерә алам? Мин әлеге телефонды яңыһына алыштырып биреүҙәрен талап итә аламмы? Гарантия ваҡыты үтмәгән.**

**Яуап:** Гарантия ваҡыты үтмәгән осраҡта һатып алынған тауарҙы төҙәтеү һанына сикләмәләр законда күрһәтелмәгән. Тимәк, был ваҡыт эсендә күпме төҙәтеү талап ителәһә, шул тиклем мөрәжәғәт итә алаһығыҙ.

Һеҙ түбәндәге хоҡуҡтарға эйә (*"Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау тураһындағы" РФ Законының 18-се статьяһының 1-се пункты*):

*– тауарҙы төҙәтеп биреүҙәрен йәки уны төҙәтеү өсөн сарыф ителгән аҡсағыҙҙы ҡайтарыуҙарын;*

*– үҙ хаҡынан түбән хаҡҡа һатыуҙарын;*

*– шул уҡ маркалы (модель, артикул) тауарға алыштырыуҙарын;*

*– хаҡын иҫәпләп (перерасчет цен) башҡа маркалы (модель, артикул) шул уҡ тауарға алыштырыуҙарын талап итә алаһығыҙ.*

Был хоҡуҡтарҙан тыш, һеҙҙең, тауарҙың сифатһыҙ булыуына һылтанып, һатып алыуҙан баш тартырға һәм тауар өсөн түләнгән аҡсағыҙҙы ҡайтарыуҙарын талап итергә хоҡуғығыҙ бар.

Булған хоҡуҡтарығыҙҙың тик береһен гарантия ваҡыты осоронда ғына талап итә алаһығыҙ. Бының өсөн тауарҙағы етешһеҙлектәрҙең һеҙ уны һатып алғанға тиклем булыуын иҫбатларға тура киләсәк.

**Һорау: Бер ай элек эштән китеү тураһында ғариза бирҙем, тик хужа уға ҡул ҡуймай һәм ҡул ҡуймауының сәбәптәрен дә аңлатмай. Ни эшләргә?**

**Яуап:** Һеҙ эш биреүсене ике аҙна алдан яҙма рәүештә иҫкәртеп, хеҙмәт килешеүен өҙә алаһығыҙ. Әгәр эш биреүсе һеҙҙең эштән китеү тураһындағы ғаризаға ҡул ҡуймай икән, ғариза яҙғандан һуң ике аҙна үтһә, һеҙҙең эшкә сыҡмаҫҡа хоҡуғығыҙ бар. Һуңғы эш көнөгөҙҙә эш биреүсе һеҙҙең хеҙмәт кенәгәгеҙҙе, эш менән бәйле башҡа документтарығыҙҙы бирергә тейеш. Быны өсөн ғариза яҙырға кәрәк була.

Әгәр ике аҙна эсендә ғаризаға ҡул ҡуйылмаһа, хеҙмәт килешеүе өҙөлмәһә һәм һеҙ эшкә йөрөүҙе туктатмаһағыҙ, хеҙмәт килешеүе үҙ көсөндә ҡала.

**Һорау: Күптән түгел атайыбыҙ яҡты донъянан китеп барҙы. Беҙ өс балаһы — вариҫтары ҡалдыҡ. Ике туған мираҫҡа дәғүә итмәйбеҙ, уның кесе туғаныбыҙға ҡалыуына ризабыҙ. Үҙебеҙҙең был ниәтебеҙҙе ниндәйҙер документ аша иҫбат итергә тейешбеҙме йәки бер нәмә лә эшләргә кәрәкмәйме?**

**Яуап:** Вариҫтарҙың береһе икенсе вариҫтың (әгәр ул үлгән атайығыҙҙың васыяты менән мираҫтан мәхрүм ителмәһә) файҙаһына мираҫ ҡабул итеүҙән баш тарта ала (*Гражданлыҡ кодексының 1158-се статьяһы*). Быны өсөн мираҫтың асылыу урыны буйынса нотариусҡа ғариза бирергә кәрәк (Гражданлыҡ кодексының 1159-сы статьяһы). Тимәк, мираҫтан баш тартыу тураһындағы ниәтегеҙ документта күрһәтелергә һәм нотариуста теркәлергә тейеш.

# «ҠАЛЪЯ» – ИТТЕҢ МАЙЛЫ ҒЫНА ӨЛӨШӨ УЛ

«ҠАЛЪЯ» БАШҠОРТ РОК-ТӨРКӨМӨН БӨГӨН БЕЛМӘГӘН, ИШЕТМӘГӘН ЙӘШТӘР БАРМЫ ИКӘН? БАРҘЫР, СӨНКИ УНҺЫҘ МӨМКИН ТҮГЕЛ. ИМАНЫМ КАМИЛ, АНА, БӨТӨН ДОНЪЯҒА БИЛДӘЛЕ КВАРТЕТ – ИНГЛИЗДӘРҘЕҢ «БИТЛЗ» ТӨРКӨМӨН ДӘ БӨТӘҺЕ ЛӘ БЕЛЕП БӨТМӘЙ. ӘЛБИТТӘ, БАШҠОРТТОҢ «ҠАЛЪЯ»ҺЫ МЕНӘН ЙЫЛДАР, БЫУЫНДАР ҺЫНАУЫ АША ҮТКӘН ДЖОН ЛЕННОН ҺӘМ УНЫҢ ЕГЕТТӘРЕН ТАП ОШО ЮҪЫҠТА САҒЫШТЫРЫУ БӨТӨНЛӘЙ УРЫНҺЫҘ. ӘММӘ, ӘЙТЕРГӘ ТЕЛӘГӘНЕМ, НИНДӘЙ ГЕНӘ ИЖАД ТӨРӨ БУЛМАҺЫН, ӘГӘР УЛ КҮҢЕЛ ТҮРЕНӘН УРҒЫЛЫП СЫҒА ҺӘМ УНЫ ҺӨЙӨҮСЕЛӘР БАР ИКӘН, ТИМӘК, ЙӘШӘҮГӘ, ҮҘ ИТЕҮСЕЛӘРЕН АРТАБАН ҠЫУАНДЫРЫРҒА ХАҠЫ ЛА БАР.

«ҠАЛЪЯ» РОК-ТӨРКӨМӨ ҠАПЫЛ ҒЫНА БАРЛЫҠҠА КИЛМӘНЕ. ҒӨМҮМӘН, ТӨРКӨМДӨҢ БЕР ӨРӨҮҘӘН ТУПЛАНЫУЫ ЛА МӨМКИН ТҮГЕЛ. УРТАҠ ЭШ АЛЫП БАРЫУСЫ ЕГЕТТӘРҘЕҢ БЕР-БЕРЕҺЕНӘ КҮНЕҮЕН, ДОНЪЯҒА, ИЖАДҠА ҠАРАШТАРҘЫҢ, ТУЛЫҺЫНСА БУЛМАҺА ЛА, ТАП КИЛЕҮ КӘРӘКЛЕГЕН ГЕНӘ ИҪӘПКӘ АЛҒАН ОСРАҠТА ЛА. ЯРАР, БЫЛ ТУРАЛА ЛА ҺҮҘ БУЛЫР. Ә ӘЛЕГӘ ЯҢЫНАН-ЯҢЫ БЕЙЕКЛЕКТӘР ЯУЛАЙ БАРЫУСЫ «ҠАЛЪЯ»НЫҢ ЛИДЕРЫ **ФӘНЗИЛ ӘҘЕЛБАЕВ** МЕНӘН ӘҢГӘМӘНЕ БАШЛАЙЫҠ.



***– Фәнзил, күптән танышбыҙ. Университетта бер курста уҡыныҡ. Әммә нисек кенә тиһәң дә, шул ваҡыттағы Фәнзилде бөгөнгөһө менән сағыштырыуы ауыр – икеһе ике төрлө. Һәм шул ваҡытта “Фәнзил “Ҡалъя” рок-төркөмөнөң лидеры буласаҡ!” тиһәләр, ышанмаҫ инем. Ғөмүмән, был даирә менән ҡыҙыҡһыныуың да тойолмай торғайны.***

– Юҡ, мин ул ваҡытта ла күберәк рок стилендәге йырҙарға өҫтөнлөк бирә инем. “Би-2”, “Сплин”, “25-й кадр” төркөмдәре башҡарыуындағы йырҙарҙы яратып тыңланым. Ҡыҙыҡһыныу көсәйә генә барҙы һәм беренсе курста гитараны ныҡлап үҙләштерергә тигән хыял менән яна башланым. Сөнки гитара ҡылдарын сиртә белеү кимәлем ҡәнәғәтләндермәй ине. Яҡшылап уйнарға, йырларға өйрәнгән тәүге йырым да “Би-2” төркөмөнөң “Серебро”һы булды.

***– Музыкаға һөйөү, йырсы булырға көслө теләк ҡайҙан килә? Аңлауымса, ғаиләгеҙҙән был юлды беренсе булып һин һайлағанһың.***

– Атай-әсәйем бер ваҡытта ла профессиональ музыка менән шөғөлләнмәне. Әммә атайымдың ҡулынан баян төшмәне, шәп уйнай ул. Сәхнә тормошона килгәндә, уның менән бәләкәстән танышбыҙ. Ниндәй генә йыр-моң конкурстары үтмәһен – бер ваҡытта ла ситтән ҡарап тороусылар ролендә булманыҡ. Мәҫәлән, “Ирәндек моңдары”, Өфөгә килгәс, ҡурай байрамдарында, сәсәндәр бәйгеләрендә лә ихлас ҡатнаша торғайныҡ. Ағайым Рөстәм менән әйтеш бәйгеләрендә әйтешкәнебеҙ булды. Һәм быларҙың барыһында ла атай-әсәйебеҙҙең роле ҙур, улар өгөтләмәһә, ҡыйыулыҡҡа өйрәтмәһә, бәлки, сәхнәне үҙ итмәҫ тә инек.

***– Юғары уҡыу йортона “вундеркинд” ҡушаматы менән килеп инеүең әле булһа хәтерҙә. Шул ваҡытта бергә уҡыған үҙеңдән өлкәнерәк студент егеттәр-ҡыҙҙар – бөгөнгө дуҫтарың менән ҡыйыныраҡҡа тура килмәнеме?***

– (Көлә). Бында вундеркиндлыҡ юҡ ул. Әгәр, әйтәйек, мәктәпте экстерн менән тамамлаған булһам, шул ваҡытта вундеркинд тип “үсекләргә” булыр ине. Ә хәл былай булды: ағайыма беренсе класҡа барыр ваҡыт еткәс мин дә, дүрт йәшлек бала, балалар баҡсаһына бармайым тип ныҡышҡанмын. Шул ҡәҙәр ныҡ илағанмынмы икән, кәмһетәләр тип, ҡыҫҡаһы, атай-әсәйемде “еңгәнмен”. Минең өсөн айырым имтихан ойошторолған, район мәғариф бүлексәһенән, мәктәптән килгәндәр. Һөҙөмтәлә, ағайым менән бер класта уҡыныҡ. Бөгөн иһә был күренеште яҙмыштың бүләге тип иҫәпләйем. Ҡыйынмы-юҡмы? Ул хаҡта уйланғаным да булманы. Барыбер бәләкәй сакта урамда гел тиҫтерҙәрем менән уйнаным, синыфташтарым ғына өлкәнерәк булды.

***– БДУ-ның Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын тамамланың. Бөгөн һине күберәген рок-йырсы тип беләбеҙ. “Их, сәнғәт юлын һайлаған булһам...” тигән уйҙар йонсотмаймы?***





– Уйланғаным булды, йәшермәйем. Сибайҙа йәшәгәндә биш йыл баян класына йөрөгәйнем. Әммә үкенгән юк. Әгәр кире ҡайтарып булған булһа, гитара класын һайлар инем, шул ғына. Быны һуңынан, йәғни гитара менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башлағас атай-әсәй ҙә таныны. Баян урынына һине гитара класына йөрөтөргә кәрәк булған тигәндәре бар.

***– "Ҡалъя". Йәш төркөм. Шуға ҡарамаҫтан, бөгөнгө йәштәр араһында танылғандарҙың береһе. Төркөмдөң лидеры – Фәнзил Әҙелбаев. Уның өсөн "лидер" һүҙе нимәнән ғибәрәт?***

– Лидерҙы төркөмдө туплап, уға йүнәлеш күрһәтеп тороусы кеше тип аңлайым. Дөрөҫмө-юкмы, әммә һәр эштә, шул иҫәптән музыкаль төркөмдәрҙә лә, яуаплы бер кеше булырға тейеш. Мин күберәген ойоштороу мәсьәләләре буйынса эш алып барам. Музыкаль йәһәттән гитарасыбыҙ Раян Хәснуллиндың кәңәштәренә ҡолаҡ һалабыҙ.

***– Әйткәндәй, уҡыусыларҙы "Ҡалъя"ның составы менән таныштырманыҡ. "Ғәҙәттәгесә" килеп сыҡмаһын өсөн, әйҙә, исемләп, вазифалап үтәйек.***

– Төркөмөбөҙ, минең менән бергә иҫәпләгәндә, биш кешенән тора. Соло-гитарала – Раян Хәснуллин, лидер-гитарала – Марсель Әмәкәсов, бас-гитарала – Айрат Рәхмәтуллин һәм барабандарҙа – Шәфкәт Овизов. Шәфкәтте күптән түгел Роберт Юлдашев үҙенә саҡырып алды.

***– Рок-музыка, сит илдәрҙә генә түгел, Рәсәйҙә лә үҙ янына хөкүмәт алып барған сәйәсәт канундары менән килешмәгәндәрҙе туплаусы көс, ағым булып торған. Бөгөн дә шундай күренеш бармы-юкмы?***

– Ысынлап та, тоторокһоҙлок ҡоторған замандарҙа халыҡ рок-төркөмдәрҙең ҡыйыу сығыштарын үҙ иткән. Сөнки, еңел-елпе һүҙҙәргә һалынған поп-музыка стилендәге йырҙар менән сағыштырғанда, рок-йырсыларҙың ижадында ғәҙел тормошка әйҙәү беренсе планда булған. Бөгөнгө көнгә килгәндә, сәйәси шарттар бер ни тиклем тыныс. Шулай ҙа рок-төркөмдәрҙең булмышына хас проблемалар элеккеһе кимәлендә. Әҙерлектәр, мәҫәлән, гараждарҙа башҡарыла. Ғөмүмән, рок-музыка менән шөғөлләнеүҙе, төркөм туплау эшен башлап ебәреүе генә ауыр. Ҡайҙан бергәләп уйнар урын, инструменттар табырға тигән мәсьәләләр, әлбиттә, еңел хәл ителмәй. Сөнки барабандар, гитаралар, бас-гитара, микшер пульты, колонкалар – барыһы ла сығым талап итә.

***– "Ҡалъя" был проблемаларҙы нисек хәл итә?***

– (Көлә). Өфөлә махсус рок-базалар (кирбестән төҙөлгән автомобиль гараждары), шөкөр, етерлек. Ҡуртымға биреләләр, сәғәтенә 150 һум. Гитараларыңды, барабандарыңды тейәйһең дә китәһең.

***– Төркөмдөң ғүмерен гараждарҙа үткәрергә иҫәп тотаһығыҙмы, әллә йокларға ла ирек бирмәгән идеялар менән янып йәшәйһегеҙме?***

– Хыялдар күп ул. Кешене шул йәшәтә лә. Иң теләгәнем – бөтөн башҡорт рок-төркөмдәрен, рок стилен үҙ итеүсе йәштәрҙе бер майҙанға туплап, барлыҡ проблемаларҙы уртаға һалып хәл итергә. Тейешле ойошмаларға берҙәм тауыш менән мөрәжәғәт итепме, нисек булһа ла, уртаҡ рок-база, музыкаль инструменттар кеүек ябай ғына күренгән проблемаларҙы хәл итеү юлдарын табырға ине.

***– Һуңғы һорау. Ни өсөн "Ҡалъя"?***

– "Ҡалъя" – боронғо башҡорт һүҙе, иттең иң тәмле, иң майлы өлөшө тигәнде аңлата. Яңғырашы ла рокерҙарса. Исем ҡушыуға килгәндә, башҡорт рогы клубында "Рок-төркөмөгөҙ булһа, уға ниндәй исем атар инегеҙ?" тигән тема аскайным. Тәҡдимдәр күп булды. Әммә араларынан нәк "Ҡалъя" тигәне окшаны.

***– Рәхмәт, Фәнзил. "Шоңҡар" журналы уҡыусылары исеменән "Ҡалъя" төркөмө егеттәренә ҡайнар сәләмдәребеҙҙе еткер. Ижадығыҙ һүрелмәһен һәм бар эшегеҙ, сәхнәгә сығышығыҙ башҡорт рок-йүнәлеше өсөн үҫеш булып әйләнеп ҡайтһын!***

– Үҙегеҙгә рәхмәт!

*Ш. ЯУБАҪАРОВ.*
*Автор фотолары.*

# РӘСӘЙ АВТОСӘНӘҒӘТЕНЕҢ КИЛӘСӘГЕ БАРМЫ?







**БАШТАН УҠ БИЛДӘЛӘП ҮТӘМ: БЫНДА ИЛЕБЕҘҘЕҢ ГИГАНТТАРЫ – "ВАЗ", "ГАЗ" ҺӘМ БАШҠАЛАРЫНА ҠАҒЫЛМАЯСАҠМЫН. ДӨРӨҪ ТӘ ТҮГЕЛДЕР, ӘММӘ УЛАРҘЫҢ ҮҪЕШ КИСЕРЕҮЕ ӨСӨН БӨГӨН НИНДӘЙ ГЕНӘ САРАЛАР КҮРЕЛМӘЙ? ДӘҮЛӘТ ТӘ ТӨРЛӨСӘ ЯРҘАМ ИТӘ, СИТ ИЛ МАРКАЛАРЫ МЕНӘН ДӘ ҠАТНАШТЫРЫЛА. БӘЛКИ, ИҢ ЕҢЕЛЕ, УЛАРҘЫҢ БАРЛЫҒЫ ТУРАҺЫНДА ОНОТОУ УҢЫШЛЫРАҠ БУЛЫР, БАРЫБЫҘ ӨСӨН ДӘ... ШУНҺЫҘ, МӘҪӘЛӘН, ШУЛ УҠ "ВАЗ"ОВСЫЛАР БЕР УРЫНДА ТАПАНЫУҘАН, ҺАМАН ДА КЕМДӘР МЕНӘНДЕР (ӘЛБИТТӘ, СИТ ИЛ МАРКАЛАРЫ МЕНӘН) КИЛЕШЕҮ ТӨҘӨҮ КӘРӘКЛЕГЕ ТУРАҺЫНДА, ВАҠЫТЫ МЕНӘН УН ЙЫЛДАН АШЫУ КОНВЕЙЕРҘАН АЛЫНМАҒАН МАШИНАЛАРЫНА ХАҠТАРҘЫ АРТТЫРАМ ТИП ЯНАУҘАН БУШАМАҪ ТА. ШУҒА КҮРӘ ҺҮҘ ҘӘ ЯҢЫ ПРОДУКТ – «Ё-МОБИЛЬ» ХАҠЫНДА. ӨМӨТ УЯТА УЛ.**

Үткән йылдың һуңғы айы урталарында уҡ илебеҙҙең баш ҡалаһы Мәскәүҙә үҙенсәлекле күргәҙмә үткәйне. Халыҡ өсөн ойошторолһа бер хәл, юҡ, яңы, заманса транспорт сараларын иң беренсе булып күреү бәхете сәнәғәттең төрлө тармаҡтарынан йыйылған белгестәргә тәтене. 2011 йылдың 2 ғинуарында ғына күргәҙмә халыҡ өсөн үҙ ишектәрен асты.

Унда "Ё-АВТО" проектының авторҙары эштәренең тәүге "емештәре" менән таныштырҙы. Ватаныбыҙ автосәнәғәте өсөн был вакиға ысынлап та мөғжизәле күренеш булды тип әйтеү хата булмаҫ. Ниһайәт, үҙ илебеҙҙә уйлап сығарылған, рәсәйҙәр ҡулы менән эшләнгән, заман шарттарына яуап бирерлек шәп дизайнлы өр-яңы машиналарҙың өс төрөнә һоҡлана алдыҡ.

"Ё-АВТО" компанияһы проектының техник етәксеһе Александр Синкевич машиналар менән яҡындан таныштырғанда, уларҙың барыһы ла экологик яҡтан таҙа һәм ҡала эсендә көндәлек файҙаланыу өсөн ҡулайлы булыуын – бензин һәм газ менән эшләйәсәген хәбәр иткәйне. Иң мөһиме шул: салонға инеп ултырған был ҙур проекттың тәүге өлгөләре – "Ё-микровэн", "Ё-кросс-купе" һәм ҡала эсендә ҙур булмаған йөктәрҙе ташыу өсөн тәғәйенләнгән "Ё-фургон" эшләтеп ҡаралған. Әммә, билдәләүҙәренсә, завод территорияһында ғына әлегә. Закон буйынса, ҡала урамдарына "тәгәрмәс баҫыр" алдынан һәр транспорт сараһының тейешле рөхсәт алыуы – сертификация үтеү кәрәк.

Әлбиттә, һәр эштә кешене ышаныс йөрөтә һәм тәүҙә проект авторҙары сертификация үтеү осоро тип 2011 йыл башын билдәләгән ине. Әммә, ваҡыт уҙыу менән, ҡарарҙары ла үҙгәреш кисерҙе. Күптән түгел был машинаны етештереүҙең төп идеологы – миллиардер Михаил Прохоров сертификациялауҙың 2012 йылдың яҙында буласағын хәбәр итте. Тик Рәсәйҙә түгел, Европала. Ни өсөн? "Еңелерәк булһын өсөн", – ти Прохоров.

### ЗАВОД...

Петербург ҡалаһы эргәһендә урынлашҡан Марьино ҡасабаһы янында төҙөлә башлаған. Әммә ысынбарлыҡ үлсәмдәренә һалып

баһалағанда, әлегә әкиәттәге кеүек тойола. Сөнки бында һүҙ тик бер Марьино ҡасабаһы тураһында ғына бармай, ә ил төбәктәре буйлап таралаsаҡ йыйыу предприятиелары селтәре хаҡында. Беренсе заводты быйыл төҙөп бөтмәкселәр. Ҡеүәте тәүҙә – 10-20 мең, бер аҙ һуңыраҡ – 50 мең берәмек машина тәшкил итәсәк. Ҡыҫҡаһы, яңы предприятие асырға ниәтләүселәрҙең маҡсаты – Ford Focus һәм Renault Logan кеүек киң билдәле тауар етештереү.

## «КИЛЕМҺЕҘ ПРОЕКТТАРҒА АҠСА ТҮКМӘЙЕМ», - ТИ ПРОХОРОВ.

**Миллиардер Михаил Прохоров үҙенең «сабыйы» — «Ё-мобиль» проектын коммерция йәһәтенән уңышлы буласаҡ тип иҫәпләй. “Прохоров аҡылдан яҙған, табыш килтермәгән проекттар менән булыша тигән ҡараштар йәшәп килә. Ышанығыҙ, мин килемһеҙ проекттарға тотонмайым, ҡомарҙан тыш, әлбиттә. Ҡыҫҡаса әйткәндә, был проект өҫтөндә эшләүсе төркөмдөң мөмкинлектәре, интеллектуаль ресурсы бик ҙур. Башҡалар иҡтисади кризис һөҙөмтәһендә алған «яраларынан» уңалғансы беҙ шундай проект эшләйәсәкбеҙ — хаҡ йәһәтенән дә, илгә файҙа килтереү буйынса ла алға китеш буласаҡ», — ти ул.**

**Йыл башында РФ Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы башлығының урынбаҫары Андрей Дементьев был проектҡа ҡарата яһаған баһаһында: «Дөрөҫөндә, миндә 2012 йылда вәғәҙә ителгән хаҡҡа машиналарҙың етештерелеренә, үкенескә ҡаршы, ышаныс тойғоһо юҡ. Барыһы ла матур, йәмле, тик ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Әлегә аҡ таптар өҫтөнлөк итә, күп һорауҙарға яуаптар юҡ», — тине. Халыҡта ла проекттың тормошҡа ашырына ышаныусылар аҙ түгел. Әммә бер генә нәмә: уларҙың күптәре «АвтоВАЗ» етештергән «Лада»ның иң популяр моделдәренең дә Рәсәйҙә сығымһыҙ бизнес булыуынан сығып фекерләй. Мәҫәлән, Тольятти предприятиеһы 2010 йыл буйынса әле булһа отчетын тапшырмаған, ә 2009 йыл буйынса иһә, ул 50 миллиард һумлыҡ юғалтыу кисергән.**

## ХАҠЫ, ДВИГАТЕЛЕ, КОМПЛЕКТТАРЫ...

Кәм тигәндә – 320 000 һум, иң юғарыһы 480 000 һум самаһы торасаҡ.

“Двигателгә ҡағылышлы, Себерҙән бер егет килде, үҙе менән роторлы-лопастлы двигатель дә тотоп алған ине. Ул нисек итеп цилиндрҙарҙы поршендәргә ҡағылмай ғына эшләтеп булғанын күрһәтте. Тимәк, майҙы ла бер тапҡыр ғына ҡойорға мөмкин буласаҡ. Аптыраныҡ, әлбиттә. Бөгөнгө көндә ул беҙҙең партнер һәм һатыуҙарҙан процентарға ла эйә буласаҡ. Әгәр керамик поршень эшләп булһа, май ҡойоу бөтөнләй кәрәк булмаясаҡ. Мөһим ваҡиға, тик әлегә әкиәттәгесә яңғырай. Конструкцияһында бер төркөм яңылыҡтар бар – барыһы ла патентланған”.

«Ё-мобиль» комплекттарының 90 проценты Рәсәйҙә етештереләсәк.

“Ни өсөн Рәсәй конструкторҙары ҡатнаш, йәғни гибрид – бензин һәм газ менән эшләүсе машинаға өҫтөнлөк биргән, ә, мәҫәлән, сит илдә киң популяр булған электромобилдәргә түгел?” тигән һорауға “Ё-АВТО” компанияһы тарафынан бойомға ашырылған проекттың техник етәксеһе Александр Синкевич “проект авторҙарының электромобилдәргә ҡаршы булыуын” билдергән. Уның әйтеүенсә, “әгәр бөтә донъя автопаркын электромобилдәр менән алыштырһаҡ, донъяла былай ҙа етмәгән электр энергияһын ҡулланыуҙы дүрт тапҡырға арттырырға кәрәк буласаҡ. Ҡыҫҡаһы, “киләсәк – гибридтар ҡулында”.

## СӘЛӘМ, ФРАНКФУРТ!

2011 йылдың сентябрендә Франкфурт автосалонында “Ё-Авто” компанияһы ё-мобилдең бөтөнләй яңы төрөн тәҡдим итмәксе. “Франкфурт автосалонына әҙерлек алып барабыҙ һәм унда бөтөнләй футуристик автомобиль тәҡдим итәсәкбеҙ. Әммә платформа, идеология үҙгәреш кисермәйәсәк. Үҙгәреш күберәген дизайнға ҡағыласаҡ”, – ти компанияның генераль директоры Андрей Бирюков.







# АВТОЯҢЫЛЫҠТАР:

## ИҪКЕҺЕ ҮҘ КӨСӨНДӘ ҠАЛА

1 марттан Дәүләт автоинспекцияһы шоферлыҡ танытмаһының яңы төрҙәрен бирә башланы. ЮХХДИ етәкселәре иҫке документтарҙы яңыһына алмаштырыу шау-шыу ҡуптарыр тигән фекерҙә түгел. Сөнки иҫкеләре ҡулланыу ваҡыты бөткәнсе ғәмәлдә буласаҡ. Шулай ҙа теләге булғандар иҫке танытмаһын яңыһына алмаштыра ала. Айырмалары ниҙә икән, тиһәгеҙ, яңы танытма – полиграфия йәһәтенән сифатлыраҡ, йәғни яҡшы һаҡланған, штрих-кодлы пластик карта формаһында. ЮХХДИ хеҙмәткәре өсөн дә күпкә уңайлыраҡ ул: водитель тураһында мәғлүмәттәрҙе махсус ҡорамал ярҙамында тикшереү һәм кәрәк булған осраҡта протоколға электрон рәүештә индереү мөмкинлеген бирә. Хаҡына килгәндә, яңы танытма алғанда түләнергә тейеш дәүләт пошлинаһы 800 һум торасаҡ.




## «ВОЛГА» ҠАЙТМАЯСАҠ

“ГАЗ” автозаводы вәкилдәре “Volga Siber”ҙың бынан ары сығарылмаясағы тураһында имеш-мимештәрҙең буш хәбәр булыуын белдерә. «Ваҡытлыса ғына туҡтатылып торҙо. Дилерҙарҙан заказдар килеү менән конвейерҙы “егәсәкбеҙ”, – ти улар. Шулай ҙа элекке «Волга»ларҙың кире ҡайтыуына үтә өмөт итергә лә кәрәкмәй. Сөнки предприятие киләсәктә “Volkswagen”, “Chevrolet” моделдәрен йыйыуҙы күҙ уңында тота.

Мәҫәлән, Түбәнге Новгородта урынлашҡан заводта Рәсәй автоһәүәҫкәрҙәренең һөйөүен яулап өлгөргән “Chevrolet Aveo” йыйыласаҡ. Йылына 30-40 мең автомобиль йыйырға ниәтләй “ГАЗ”овсылар. Бығаса “Aveo”лар Калининградтың “Автотор” предприятиеһында ҡул менән тигәндәй йыйыла ине. Икенсе төрлө әйткәндә, Рәсәйгә әҙер килеш тиерлек килтерелә һәм ҡороп ҡына ултыртыла. Горький автозаводында иһә тулы циклды етештереүҙе ойошторо күҙаллана.






Төп партнеры шулай ҙа “Volkswagen” буласаҡ. Германия компанияһы, Калугала йылына 150 мең машина йыйыу көсөнә эйә завод асһа ла, был ҡеүәт менән ҡәнәғәт түгел. Улар йылына тағы ла 100 мең самаһы машина сығарырлыҡ предприятие асыу тураһында хыял итә.

## ЗЫЯНДАН КИЛГӘН ФАЙҘА

Рәсәйҙең ЮХХДИ етәкселеге шоферҙарға аварияға осраған хәлдә инспекторҙарҙы саҡыртып тормай ғына, йәғни кәрәкле документты үҙ-ара килешеп төҙөү хоҡуғы биргән зыян күләмен 100 мең һумға тиклем арттырырға кәрәк тигән фекерҙә. Әле ул 25 мең һум тәшкил итә. Ләкин шоферҙар, зыяндың бәләкәй йә ҙур булыуына ҡарамаҫтан, инспекторҙарға мөрәжәғәт итеү яҡлы. Бындай күренеште машинаны йүнәтеүҙең ҡиммәтерәккә төшеү ихтималлығы менән аңлатырға мөмкин.

Белеү ҡамасауламаҫ: документтарҙы үҙ аллы төҙөү бер нисә шарт үтәлгән осраҡта ғына мөмкин. Беренсенән, юл-транспорт ваҡиғаһында ике автомобилдең генә зыян күреүе мотлаҡ. Өсөнсө машина “ҡатнашһа”, ЮХХДИ инспекторын саҡыртырға тура киләсәк. Икенсенән, аварияға эләккән кешеләрҙең һаулығына зыян килмәгән булырға тейеш. Өсөнсөнән, аварияла ҡатнашҡандарҙың кемдең ғәйепле булыуын үҙ-ара килешеп асыҡлауы, бер-береһенә дәғүә белдермәүе мөһим.

Әгәр документты үҙ аллы тултырғандан һуң машинағыҙҙы ремонтлау тейешенән ҡимммәтерәккә төшһә, страховка компанияһы 25 мең һумын ғына түләйәсәк. Ә зыянды ҡаплатыу маҡсатында аҡсаның ҡалған өлөшөн аварияла ғәйепле булған шоферҙан алыу өсөн уны судҡа биреүҙән башҡа сара юҡлығын иҫегеҙҙән сығармағыҙ.

*Р. СӘЛИМОВ,*
*Фото: www.auto.mail.ru*

# БЕЙЕК ҮКСӘЛӘ – ИР-ЕГЕТ

**ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫ ҒЫНА ҮКСӘЛЕ АЯҠ КЕЙЕМЕНДӘ КҮРЕРГӘ КҮНЕККӘНБЕҘ. УЛ МАТУРЛЫҠ, НӘЗӘКӘТЛЕЛЕКТЕ БИЛДӘЛӘП КЕНӘ ҠАЛМАЙ, Ә БЕЙЕК БУЛМАҒАН ҺЫЛЫУҘАРҒА БЕР НИСӘ САНТИМЕТРҒА “ҮҪЕРГӘ”, ҺОМҒОЛОРАҠ КҮРЕНЕРГӘ ЯРҘАМ ИТӘ. ТИК ЗАМАН МОДАҺЫНА КҮҘ ҺАЛҺАҢ, УНДА ИР-ЕГЕТТӘРҘЕҢ ДӘ ҮКСӘЛЕ ТУФЛИҘАРЫ УРЫН АЛЫУЫН КҮРЕРГӘ БУЛА. БЫЛ, ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРҘЫҢ КҮЛДӘК, САЛБАР, ГАЛСТУКТАРҘЫ УҢЫШЛЫ ҠУЛЛАНҒАН КЕҮЕК, ИРҘӘРҘЕҢ ДӘ ҮКСӘЛӘР МЕНӘН “ЭШ ИТЕРГӘ” ӨЙРӘНЕҮ ТЕЛӘГЕМЕ, ӘЛЛӘ КИРЕҺЕНСӘ, ҮҘ ХОҠУҠТАРЫН ҠАЙТАРЫУМЫ?**



## «KABLUK»

«КАБЛУК» ҺҮҘЕ ТӨРӨК ТЕЛЕНӘН ҮҘЛӘШТЕРЕЛГӘН. Ә УЛ ҮҘ СИРАТЫНДА ҒӘРӘП ТЕЛЕНЕҢ «КАВ» ТИГӘН ҺҮҘЕНӘН АЛЫНЫП, «ҮКСӘ» ТИГӘН МӘҒӘНӘГӘ ЭЙӘ. БЫЛ ТЕРМИН РУС ТЕЛЕНДӘ 1509 ЙЫЛҒЫ ЯҘМА СЫҒАНАҠТАРҘА ОСРАЙ.



Заман аяҡ кейеменең актуаль детале булған үксәләрҙең барлыҡҡа килеү тарихы Боронғо Мысыр иле менән бәйле. Тәүге аяҡ кейеме лә XII быуатта ошо уҡ илдә барлыҡҡа килә. Уны күн, замш (йомшаҡ күн) материалдан түгел, ә папирустан әҙерләйҙәр. Ҡулланыу хоҡуғына тик фараон һәм уның ярандары ғына эйә була (аңлауығыҙса, иң тәүге аяҡ кейеме ҡатын-ҡыҙ өсөн түгел, ирҙәр өсөн уйлап табылған). Фараондың ҡатыны ярандар иҫәбенә инмәү сәбәпле, ялан аяҡ йөрөргә мәжбүр була.

Ә беренсе үксәле аяҡ кейеме ябай халыҡ – ер һөрөүсе ҡолдар өсөн тәғәйенләнә. Бактиһәң, улар йомшаҡ ерҙән йөрөүҙе еңелләштерә, эшләгәндә өҫтәмә этәргес ролен үтәй икән.

Боронғо Грек илендә театрҙарҙа эллинист осорон һүрәтләү өсөн платформалар ҡулланыла. Ул королмаһың бейеклеген кәрәккән кимәлгә үҙгәртергә мөмкин. Трагик герой ролен башҡарған актер (улар мотлаҡ ир-егет була) шул платформаға баҫып, император юғарылығына – терһәк бейеклегенә күтәрелә.

Көндәлек аяҡ кейемдәре шыма табанлы була. Әммә улар һыбай йөрөүселәр өсөн үтә уңайһыҙ: аяҡтарҙың өҙәңгелә ныклы тороуын тәьмин итә алмай. Шуға күрә Урта быуаттарҙа һыбайлылар өсөн махсус бейек үксәле итектәр әҙерләнә башлай. Үксәләр аяҡтарҙы өҙәңгенән шыуып китеүенән һаҡлай. Барокко осоронда француз офицерҙары араһында ла үксәләр киң таралыу яулай. Улар ботфорттар – бейек үксәле күн итектәр кейә башлай.

Һуңғараҡ, һылашып торған трикотаж ойоҡтар модаға ингәс, ботфорттарҙы башмаҡтар алыштыра. Улар формаһы буйынса хәҙерге заман ирҙәр туфлийын хәтерләтә.

Шул уҡ осорҙа ҡатын-ҡыҙҙар 10 һәм унан да бейегерәк санти-



метрлы "цоколи" тип исемләнгән нәҙек бейек үксәле туфли кейә башлай. Гүзәл заттарға бындай аяҡ кейеменә өйрәнеү бик ауырға төшә. Шуға ла уларға махсус таяҡҡа таянып йөрөргә тура килә. Аҙаҡ ул таяҡ моданың айырылғыһыҙ бер өлөшөнә әүерелә.

Леонардо да Винчи был уңайһыҙ үксәне ябайлаштырырға тәҡдим итә. Уның ниәте буйынса, үксәләр хәҙерге традицион формаға окшаш булырға тейеш була. Ҡыҙғаныска ҡаршы, улар халыҡ тарафынан ыңғай ҡабул ителмәй.

Ир-егеттәр ҙә был яңылыҡтан ситтә ҡала алмай. Үксәләр йылдан-йыл бейегәйә бара. Хатта король үксәләр хаҡында махсус указ сығарырға мәжбүр була. Указға ярашлы затлы нәҫелгә ҡараған кешеләргә – бейек үксәлә, ә ябай халыҡҡа унан түбәнерәктәрендә йөрөргә рөхсәт ителә. Йәғни был указ социаль тигеҙһеҙлек күрһәткесенә нигеҙләнә. Әлбиттә, иң бейек үксә король һәм уның ғаиләһе ағзаларына "тәтей". Шул уҡ ваҡытта "Ҡыҙыл үксә" указы донъя күрә. Уның буйынса башҡа ҡатламдарҙан айырылыу билдәһе булған төҫлө үксәгә дворяндар ғына эйә була.

1789 йылғы француз революцияһы барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙы 50 йылға үксәнән мәхрүм итә. Европала стилде "ябайлаштырыу" күҙәтелә. Табип, доктор, философтар һаулыҡ өсөн зыянлы һаналған корсет һәм тар туфлиҙарға ҡаршы асыҡ сығыш яһай. Һәҙемтәлә, урамдарҙа өҫтәренә еңел күлдәк, аяҡтарына үксәһеҙ сандалиҙар кейеп йөрөгән кешеләр күҙгә салына башлай. Аяҡ кейемдәре хәҙерге балет тапочкаларына тартым була. Әммә был "мода" яңы император Наполеон Бонапарттың күңеленә хуш килмәй. Ул үткән моданы ҡабаттан тергеҙеү өҫтөндә эш башлай. Париж ҡатын-ҡыҙҙарына "корсет"ты ҡайтара, ә бына үксәле аяҡ кейеме иғтибарҙан ситтә ҡала. Сәбәбе шунан ғибәрәт: бактиһәң, һәр кем йәштән үк матур бейеү серҙәрен белергә һәм бал, кисәләрҙә күмәкләп күңел асырға тейеш булған. Ә бейек туфли аяҡтарҙы талдыра, был уңайҙан йоҡа күн табанлы ебәк туфли-тапочкалар өҫтөнлөк ала.

Шулай итеп, бөгөнгә тиклем ираттар 2-4 сантиметрҙан арткан үксәле туфли киймәй. Әммә заман модельерҙары быны менән хушһынмай. Улар ир-егеттәрҙең аяҡ кейемдәренә яңы һулыш өрә. Мәҫәлән, Марджан Педжоски төрлө атлас банттар менән биҙәлгән 10 сантиметр бейеклегендәге үксәле аяҡ кейемен тәҡдим итә. Уның фекеренсә, туфлиға бындай деталь өҫтәү ҡыҫҡа буйлы ир-егеттәрҙә үҙҙәренә ышаныс тойғоһо тәрбиәләргә ярҙам итәсәк. Руй Леонардес иһә көслө заттарҙың йөрөштәрен (походка) яҡшыртыу, буй-һынды дөрөҫ тотоу өсөн осло башлы шпилькалы туфли кейергә тәҡдим итә. Ә Рик Оуэнс, киреһенсә, ир затына тик ҡалын каблуктар ғына килешә тигән ҡараш менән йәшәй. Iceberg, Dolce & Gabbana и Жан-Поль Готье модаһы беҙҙең ир уҙамандарын ҡалын табанға (платформа) баҫтыра. Тик әлегә был үҙгәрештәр мода өлкәһендә генә күҙәтелә. Һуңғы осорҙа тик гүзәл заттарҙы ғына бейек үксәлә күрергә өйрәнгән күҙҙәребеҙгә был күренеш сәйер тойола. Әммә халыҡ психологияһы үҙгәрештәрҙе ауыр ҡабул итеүгә ҡоролған. Мода яңылығын да башта көслө кире тойғо менән ҡаршы ала, ә аҙаҡ өйрәнә. Тик әлеге моданы халыҡ нисек ҡабул итер? Ғөмүмән, ҡабул итә алырмы? Әлегә билдәһеҙ.



**Бөгөн ир-аттың классик стиленә ҡараған, үксәһе 2-4 сантиметр булған ғәҙәти туфли һәм ботинкалар киң ҡулланыла. Элек үксә күпселек ниндәй ҡатлам вәкиле икәнлегеңдең күрһәткесе булһа, әле иһә ул зауыҡлыҡ һәм бөхтәлек билдәһе. Матур костюм менән кейгән аяҡ кейеме лә тейешле кимәлдә булырға тейеш. Ә быға тик тәрбиә менән генә ирешергә мөмкин.**

# АЯҠ КЕЙЕМЕН ТӘРБИӘЛӘҮ БУЙЫНСА КӘҢӘШТӘР:

1. Аяҡ кейеме һатып алғас та, шунда уҡ кейеп сығып китмәгеҙ. Башта уны һыу, бысраҡ, ҡар, тап ултырыуынан һаҡлаусы ҡатлам менән тәьмин итергә кәрәк.

2. Иң тәүҙә аяҡ кейеменә ҡунған саңды һыулы сепрәк менән һөртөп алығыҙ. Аҙаҡ һеңеүенән туҡтағансы туфли төҫөнә тап килгән (!) крем яғығыҙ. Әгәр төҫтөң тура килеүенә шикләнәһегеҙ икән, уны күренмәгән ергә һөртөп ҡарағыҙ.

3. Аяҡ кейемен иртән урамға сығыр алдынан түгел, ә кистән таҙартырға кәрәк. Сөнки крем буяғандан һуң барлыҡҡа килгән һаҡлаусы ҡатлам яҡшылап кибеп өлгөрөргә тейеш. Быны өсөн кәмендә 10-12 сәғәт талап ителә. Аҙаҡ аяҡ кейемегеҙҙе даими таҙартып торорға онотмағыҙ.

4. Тиҙ арала таҙартып алыу өсөн етештерелгән экспресс-ялтыраткыстар менән файҙаланыу кәңәш ителмәй. Уларҙың нигеҙендәге силикон саң, бысраҡты үҙенә һеңдерә. Хеҙмәт итеү ваҡыты ла сикләнгән: 30 тапҡыр ҡулланғандан һуң алыштырырға кәрәк. Иң яҡшыһы – бал ҡорто балауыҙынан әҙерләнгән тиҙ һеңеүсе крем файҙаланыу. Уның да ҡатыларын һайлағыҙ, сөнки уларҙың балауыҙ һәм май күләме юғарыраҡ.

5. Һыуланған туфли эсенә тығыҙ итеп гәзит йәки йоҡа ҡағыҙ тултырығыҙ. Әгәр тиҙ генә коротоп алырға кәрәк икән, саң һурҙырғыс йәки фен менән файҙаланырға мөмкин. Әммә был ысул менән ныҡ мауыҡмағыҙ. Ә махсус аяҡ кейеме киптергестәр менән 3 сәғәттән дә артыҡ ҡулланмағыҙ.

6. Тар аяҡ кейеме киңәйһен өсөн шулай уҡ гәзит тултырырға була. Әгәр ул да ярҙам итмәһә, эсенә 3 процентлы һеркә һөртөп сығырға мөмкин.

7. Аяҡ кейеменең өҫтө ныҡ кибеп киткән осраҡта уға вазелин, глицерин, үҫемлек майы һөртөп йомшартырға була.

8. Ботинка формаһын юғалтмаһын тиһәгеҙ, ағас итек ҡалыбын ҡулланығыҙ, сөнки пластмассары дымды һеңдермәй.

9. Туфли, ботинкаларҙы мотлаҡ ҡалаҡса менән генә кейегеҙ.

10. Аҡ төҫтәге күн аяҡ кейемен губка йәки йомшаҡ щетка ярҙамында йыуыу порошогы менән таҙартығыҙ, аҙаҡ төҫһеҙ крем яғығыҙ.

11. Төҫлө аяҡ кейеменә ултырған тапты сығарыу өсөн уны һуған йәки лимон һуты менән һөртөү ҙә етә.

12. Ваҡыты-ваҡыты менән туфлиҙарға глассаж яһап торорға кәрәк. Был тәрбиә ысулына айырым туҡталып китәйек.





**ГЛАССАЖ – бармаҡ менән туфлиҙың осон ялтыратыу, полировкалау. Уны гуталин (составында балауыҙ бик күп булмаҫҡа тейеш) һәм һыу ярҙамында ҡул менән шымарталар. Туфли артын шымартыуҙың мәғәнәһе юҡ, сөнки ул салбарҙың балағына ышҡылып боҙола.**

**Глассаждың техникаһы аҙ ғына гуталин менән һыуҙы аралаштырып ышҡыуҙан ғибәрәт. Һыу күндең тигеҙ булмаған урындарын йомшарта, ә гуталин бөгөлөш, ҡырылған ерҙәрен тигеҙләй. Аҙаҡ күн тығыҙлана, төрлө сыйылыуға, һыуға, һыныуға бирешмәй.**

**Тауар кисәге менән бер тамсы гуталинды башта түңәрәк хәрәкәттәр менән, аҙаҡ буйлап 5-10 секунд самаһы ышҡығыҙ. Шунан һуң энә осо менән һыу тамыҙып, тағы ышҡып сығығыҙ. Һыуҙы артыҡ күп ҡулланырға ярамай, юҡһа, полировка тигеҙ килеп сыҡмай.**

**Ошо уҡ рәүештә бер нисә тапҡар ҡабатлағыҙ. Күҙ яуын алырлыҡ яңы аяҡ кейеме әҙер.**

*Филиә БУЛАТОВА әҙерләне.*

# УЛ ӘРУАХТАР МЕНӘН АРАЛАШҠАН



ТЕГЕ ДОНЪЯ, ҮЛГӘНДӘРҘЕҢ ЙӘНЕ, УЛАР МЕНӘН БӘЙЛӘНЕШКӘ ИНЕҮ... ТӘН ЗЫМБЫРЛАП КИТӘ. БЕР ҠАРАҺАҢ, БЫЛ ӘКИӘТ КЕҮЕК, ӘММӘ... СӘЙЕР ХӘЛДӘР ҘӘ ЙЫШ ҠЫНА БУЛЫП ТОРА БИТ ӘЛЕ. АНОМАЛЬ КҮРЕНЕШТӘР ӨЛКӘҺЕН МАХСУС ӨЙРӘНЕҮСЕЛӘР БАР. БӘЛКИ, ЮҠҠА ТҮГЕЛДЕР? БӨЙӨК КҮРӘҘӘСЕ ҺӘМ СИХЫРСЫ БУЛАРАҠ ДАН ЯУЛАҒАН ДӘНИЕЛ ЮМДЫ ҒЫНА АЛАЙЫҠ. БЕЛГЕСТӘР БЫНА НИСӘМӘ ЙЫЛДАР ИНДЕ УНЫҢ ИҪ КИТКЕС ҺӘЛӘТЕНЕҢ СЕРЕНӘ ТӨШӨНӘ АЛМАЙ.

Дэниел Юм 1833 йылдың 20 мартында Шотландияла донъяға килә. Ауырыу ғына бала була, уны Кук исемле инәһе тәрбиәләп үҫтерә. Улар 1842 йылда Америкаға күсеп китә. 10 йәшендә Дэн мистик әҙәбиәт менән мауыға башлай. Үҙенең иң яҡын дуҫы Эдвин менән “кемебеҙ алдан үлә, шул өсөнсө көндә икенсеһенә теге донъяның барлығын иҫбатларға килә” тип һөйләшеп тә ҡуялар. Оҙаҡламай Кук ғаиләһе икенсе ҡалаға күсенә. Көтмәгәндә яңы урында, төндә Дэн үҙенең карауаты эргәһендә Эдвиндың яҡтырып торған кәүҙәһен күрә. Ул өс көн элек үлгән булып сыға...

Һуңғараҡ Дэндың ата-әсәһе лә Америкаға күсеп килә. Бер ваҡыт, 1850 йылда, ауырып ятҡан мәлендә егет ниндәйҙер тауыш ишетә: “Сәғәт ун икелә”. Карауат өҫтөндә әсәһенең йөҙө лә күренеп ҡала. Ул ике тапҡыр аңлашылмаған һүҙҙәр ҡабатлай ҙа юҡ була. Дэндың әсәһе шул көндө сәғәт ун икелә үлеп ҡала...

Бер нисә айҙан һуң өйҙә ниндәйҙер сәйер туҡылдауҙар ишетелә, үҙенән-үҙе мебельдәр күсә башлай. Урындағы рухани “әруахтар өйҙә йәшәүселәр менән бәйләнешкә инергә теләй” тип белдерә. Шулай итеп Дэниел медиум булып китә. Йәндәр туҡылдауҙар аша уның һорауҙарына яуап бирә. Улар араһында егеттең үлгән әсәһе лә килә: ул улына ғүмеренең маҡсаты кешеләргә ышаныу, уларҙы дауалау һәм уларға йыуаныс алып килеүҙә икәнен аңлата.

Дэндың инәһенә уның был шөғөлө оҡшап етмәй һәм егет өйҙән сығып китергә мәжбүр була һәм спиритизм (әруахтар менән аралашыу) сеанстары үткәреү менән мауыға башлай.

Дэниел гел дә әруахтар менән һөйләшә. Бер заман, унда мөһим нимәлер булырға тейеш тип, уны икенсе бер ҡалаға саҡыралар. Уны бер ир ҡаршы ала ла ҡаланың иң күренекле ғаиләләренең береһенә ҡунаҡҡа алып китә.

Өйҙә уның иғтибарын эргәһенән үтеп киткән һоро күлдәкле әбей йәлеп итә. Тик һуңғараҡ өйҙә бер ниндәй ҙә әбейҙең булмауы асыҡлана. Ә төшкә аштан һуң ул янында ҡыштырлаған һәм шым ғына өндәшкән тауыш ишетә: "Мин һеҙҙе борсорға теләмәгәйнем, тик минең ҡәберем өҫтөнә икенсе ҡәбер ҡуйғандар һәм миңә хәҙер бик ауыр... Баҡсалағы ағасты ла бушҡа ҡырҡтылар!" Юм был хәлде өй хужаһы Уорд Чениға һөйләй. Ул иһә бынан әллә нисә йылдар үлеп ҡалған әбейҙең үҙенең туғаны булыуын һәм яңыраҡ ағаһының ағасты бысып ташлауын һөйләп бирә. Ә бына ҡәбер тураһында ул бер нәмә лә белмәй булып сыға...

Иртән медиум менән Чени зыяратҡа баралар. Зыярат һаҡсыһы әбейҙең ҡәбере өҫтөнә бәләкәй бер баланың ҡәберен ҡуйған булып сыға.

Рухтар Дэниел менән йыш ҡына үҙҙәре бәйләнешкә инә. Ҡайһы берендә улар хатта уның ярҙамы талап ителгән кешенең адресын да әйтәләр. Ул күп кешене трансҡа инеп һауыҡтыра.

Сеанстар мәлендә туҡылдауҙар һәм күскән мебелдән башҡа икенсе төрлө сәйер хәлдәр ҙә күҙәтелә. Бер ваҡыт ниндәйҙер көс медиумды өҫкә күтәреп, күпмелер ваҡыт баш түбән тотоп тора. Ҡайһы берендә баяғы күренмәҫ көстөң төрлө әйберҙәргә тейеүе, ҡыңғырауҙы шылтыратыуы, ҡәләм менән яҙыуы күҙәтелә һәм хатта музыкаль инструментта ла уйнауының шаһиты булырға тура килә кешеләргә...

Юм университетта тәүҙә теологияны, аҙаҡ медицинаны өйрәнә. Әммә, һаулығы ҡаҡшау сәбәпле, уҡыуын тамамлай алмай. Үҙе бәйләнешкә ингән рухтар уға Европаға китергә кәңәш итә. 1855 йылдың апрелендә ул Англияға килә һәм сеанстарын башлай. Бельгия, Голландия буйлап сәйәхәт ҡыла. Бүтән спириттарҙан айырмалы рәүештә, Юм үҙе дауалаған кешеләрҙән аҡса һорамай. Шулай ҙа уны яратмаусылар, көнләшеүселәр, шарлатан тип күрһәтергә тырышыусылар ҙа табыла. Хатта бер ваҡыт, йорто янында һағалап тороп, арҡаһына кинжал менән сәнсеп тә китәләр. Бәхетенә, яраһы үлемесле булмай, тиҙҙән һауыға.

1858 йылда ул графиня Александраны кәләш итеп алып Петербургка күсә, улдары Гриша тыуа. Әммә улар бергә оҙаҡ ғүмер итә алмай, ҡатыны ауырыуҙан үлеп ҡала. Вафатынан һуң, ҡатынының йәне Юмға йыш ҡына килә, кәңәштәр бирә, юғалған әйберҙәрҙе табырға ярҙам итә.

Ҡайһы бер "фокустарҙы" хатта парапсихология ла аңлата алмай. Мәҫәлән, ҡыҙған күмерҙе оҙаҡ ваҡыт ҡулында тотоп тора алған, шулай уҡ ул яндарында булғанда, башҡалар ҡыҙған күмергә тейһәләр ҙә, тиреләре янмаған... Тағы ла Юм үҙ тәнен теләге менән тән үлсәмен үҙгәртә алған: оҙонайып йә ҡыҫҡарып, йыуанайып йә нәҙегәйеп, мускулдарын ҙурайтып йә бәләкәсәйтеп.

Дэниел Юм 1886 йылда үлеп ҡала. Ул спиритуалистик темаға хеҙмәттәр яҙған, шуларҙың иң билдәлеһе – "Спиритуализмдың яҡтылығы һәм күләгәһе" (1877). Был кеше әруахтар менән генә һөйләшеп ҡалмай, шулай уҡ киләсәкте күрә, уй көсө менән генә әйберҙәрҙе күсерә, ауырыуҙарҙы һауыҡтыра. Һәм бер кем дә бер ҡасан да уның алдаҡсы булыуын иҫбатлай алмай. Теге донъя көстәре тәьҫире ярҙам итәме уға, әллә уникаль бүләктең хужаһы булыуымы? Үкенескә ҡаршы, был шулай уҡ сер булып ҡала...

***Лилиә МОСТАФИНА әҙерләне.***





# БЫЛ ҠАЛАЛАР ТИҘҘӘН БУЛМАЯСАҠ...



**ЦИВИЛИЗАЦИЯНЫҢ ҮҘӘГЕ БУЛЫП ТОРҒАН ҘУР-ҘУР ҠАЛАЛАРҘЫҢ БЫҒА ТИКЛЕМ ДӘ ЮҠҠА СЫҒЫП, ТАРИХТА ҒЫНА ТОРОП ҠАЛЫУ ОСРАҠТАРЫ БИЛДӘЛЕ. БЫНЫҢ СӘБӘПТӘРЕ ТӨРЛӨ: ОҘАЙЛЫ ҠАТЫ ҺУҒЫШТАР, ТӘБИҒӘТТӘГЕ КАТАСТРОФАЛАР (ТӘБИҒӘТТЕҢ АҘ ҒЫНА ВАҠЫТ ЭСЕНДӘ ЛӘ БАР ЕР ШАРЫН ЮҠҠА СЫҒАРЫРҒА ҺӘЛӘТЛЕ ИКӘНЛЕГЕН ЯҢЫРАҠ ҠЫНА ЯПОНИЯ МИҪАЛЫНДА КҮҘӘТЕРГӘ ТУРА КИЛДЕ ИНДЕ), ИҠТИСАДИ ХӘЛДЕҢ ҮҘГӘРЕҮЕ. ҮКЕНЕСКӘ ҠАРШЫ, ХӘҘЕРГЕ АЛҒА КИТКӘН ЗАМАНДА ЛА ЮҒАЛЫУ ҠУРҠЫНЫСЫ ЯНАҒАН БИЛДӘЛЕ ҠАЛАЛАР БАР ӘЛЕ.**

Миллиондан артыҡ кеше йәшәгән сал тарихлы һәм ярайһы ғына ҙур **Неаполь** – Италиялағы Кампания провинцияһының баш ҡалаһы. Матур бер көндә уның ҡапыл ғына юҡҡа сығыуы ихтимал. Был Неаполдең Везувий вулканы итәгендә урынлашыуына бәйле. Ә ул биш иң ҡурҡыныс вулкан исемлеге араһында. Яҡынса 100 йылға бер тапҡыр Везувий "уяна" һәм, һәҙәмтәлә, лава юлындағы бар нәмәне юҡҡа сығара. Һуңғы көслө вулкан 1944 йылда булған. Ул ваҡытта иҫ киткес күп халыҡ, өйҙәр ҡаза күргән. Шуға күрә берәй мәл лава тулыһынса Неаполде юҡҡа сығармаҫ, тип һис кем ышаныс менән әйтә алмай.





Мексиканың баш ҡалаһы **Мехиконың** халҡы яҡынса 9 миллион, ә бөтә алгомерацияның халҡы 19 миллиондан ашып китә. Шуның арҡаһында эсәр һыуҙы бик күп ҡулланалар, ә был ҡаланың әкренләп ултырыуына килтерә. Эксперттар билдәләүенсә, һуңғы 100 йыл эсендә ул 9 метрға ер аҫтына төшкән. Мексика төбәктәрендәге иҡтисади мөшкөллөк арҡаһында баш ҡала туҡтауһыҙ үҫә. Кешеләр эш һәм яҡшы тормош артынан Мехикоға ағыла. Был эсәр һыуҙы ҡулланыуҙың тағы ла артыуына һәм, әлбиттә, ҡаланың юҡҡа сыға барыуына килтерә.

Туристарҙың яраткан урыны – **Венецияның** да әкренләп һүнә барыуы бер кемгә лә сер түгел. Һаҙлыҡлы утрауҙарҙа урынлашҡан был ҡала йылдан-йыл һыу эсенә китә бара. Һуңғы 100 йыл эсендә генә 24 сантиметрға һыуға һеңгән. Өйҙәрҙең нигеҙҙәре серей, шунлыҡтан тарихи биналар юҡҡа сыға. Әлеге мәлдә Венеция янында диңгеҙ "яуынан" һаҡларлыҡ платиналар төҙөйҙәр. Әммә улар ярҙам итерме? Быны алдан күҙалларға һәм Италия инженер һәм архитекторҙарының талантына ышанырға ғына ҡала.





**Чикаго** – халыҡ иҫәбе буйынса АҠШ-та өсөнсө урында тора, илдең сәнәғәт һәм кәйеф-сафа үҙәге. Әммә был ҡаланың киләсәге хәүеф аҫтында. Йәйгеһен унда бик ныҡ эҫе, ҡоро һауа, ә көҙгөһөн мул ямғырҙар башлана. Улар үҙ сиратында йыш ҡына урамдарға, өйҙәргә, тимер юлдарына зыян килтерә. Бындай тәбиғәт күренештәре ҡала тормошонда эҙһеҙ үтмәй: инфраструктура боҙола, иҡтисад яфа күрә, туристарҙың килеүе һирәгәйә һәм унда йәшәүселәр яҡшыраҡ райондарға күсеү яйын күрә.

Таиландтың баш ҡалаһы **Бангкок** диңгеҙ кимәленән 2 метр бейеклектә генә урынлашҡан. Шул арҡала муссондар миҙгеле ваҡытында күп урамдар һыу аҫтында ҡала. Ә ҡала һаман өҫкә ҡарай үҫеүен дауам итә. Бейек-бейек йорттар төҙөлә, тимәк, халҡы ла арта, был грунт һыуҙарынан алынған эсәр һыуҙың күпләп талап ителеүен аңлата. Быларҙың барыһы ла Бангкоктың йыл һайын биш сантиметрға ултырыуына булышлыҡ итә. Етәксеlek ҡаланы ҡотҡарыу планы өҫтөндә уйланмаһа, уның да берәй заман юҡҡа сығыуы бар.





Әлеге теҙмәлә Америка ҡалаларынан бер Чикаго ғына түгел. **Детройт** та юғалыу ҡурҡынысы аҫтында. Әйләнә-тирә яҡтағы үҙгәрештәр, тәбиғәт катаклизмдары сәбәпсе түгел быға, уның әкренләп юғалыу юлына баҫыуы халыҡтың күпләп күсеп китеүендә. Ҡасандыр Детройт АҠШ-тың иң ҙур һәм иң бай ҡалаларының береһе булған һәм илдә генә түгел, бөтөн донъя буйынса автомобиль сәнәғәте үҙәге һаналған. 1950 йылдан башлап ҡала халҡының яртыһы кәмегән. АҠШ автомобиль сәнәғәтендә оҙаҡҡа һуҙылған иҡтисади көрсөк эшһеҙлеккә килтергән һәм халыҡ башҡа ҡалаларҙан эш эҙләргә мәжбүр булған. Шуға күрә Детройтты йыш ҡына "үле ҡала" тип атайҙар.

*Г. ҒӘЙЗУЛЛИНА әҙерләне.*

# МАЙ АЙЫНА ЙОНДОҘНАМӘ

## ҠУҘЫ



Барлыҡ уңыштарығыҙ айыҡ фекерегеҙгә һәм булдыҡлылығығыҙға бәйле. Проблемалар үҙенән-үҙе ыңғай хәл ителер тип көтөп ултырыу бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәҫ, инициатива күрһәтергә ваҡыт. Юлығыҙҙа ярҙам ҡулы һуҙыусылар ҙа осрар, тик улар һеҙҙе дөрөҫ юлға ғына алып сығыр, ә эште еренә еткереү һеҙҙең тырышлығығыҙҙан тора.

## БУҒА



Һеҙгә май айында күп кенә хәл-ваҡиғаларҙы кисерергә тура килер. Улар көсөгеҙҙе күп алһа ла, һөҙөмтәһе ҡыуандырмай ҡалмаҫ. Ниһайәт, күптәнге хыялығыҙ ҙа тормошҡа ашыр. Әммә үтә һауаланып, ғаиләгеҙ һәм туғандарығыҙҙы онотоп ебәрмәгеҙ. Һеҙҙең шатлығығыҙ менән ысын күңелдән нәҡ улар ғына уртаҡлаша ала бит.

## ИГЕҘӘКТӘР



Был айҙа Игеҙәктәр ғәйбәтселәр иғтибарынан ситтә ҡала алмаҫ, ахыры. Һеҙҙең турала һүҙҙәр бер-бер артлы таралып ҡына торор. Яман һүҙәрҙең сығанағын асыҡ билдәләүе, осона сығыу ауырға төшәр. Шуға күрә, йән тыныслығын һаҡларға теләһәгеҙ, кешеләр менән аралашҡанда артыҡ хәбәр һөйләүҙән тыйылығыҙ.

## ҠЫҪАЛА



Үҙегеҙҙең сәйер ҡылыҡтарығыҙ менән күптәрҙе хайран ҡалдырырһығыҙ. Хатта тирә-йүндәгеләр тарафынан аңлау тапмауынан да ҡурҡмаҫһығыҙ. Сөнки Ҡыҫалалар, ниһайәт, тормоштарына яңылыҡ индерергә ҡарар итте. Шуға уларҙы тәнҡитләргә, пландарына ҡыҫылырға ашыҡмағыҙ. Был һеҙҙең мөнәсәбәтегеҙгә ыңғай тәьҫир итмәҫ.

## АРЫҪЛАН



Барлыҡ хәл-ваҡиғаларға бармаҡ аша ҡарау хәлегеҙҙе мөшкөләйтер генә. Быға тиклем ситтә ҡалып, үҙегеҙҙе ғәйбәттән һаҡлап ҡала алһағыҙ, хәҙер был фекерҙәштәрегеҙҙе, дуҫтарығыҙҙы юғалтыу менән янай. Шуға битарафлыҡ битлеген сисеп, үҙегеҙҙе хәстәрләү сараларын күрергә кәрәк булыр.

## ҠЫҘ



Май айында абруйығыҙ бермә-бер артыр. Быға тиклем һеҙҙе иғтибарға алмаған "дуҫтарығыҙ" кәңәш артынан тупһағыҙҙы бер генә тапамаҫ. Үткән үпкәгеҙ ҡоллоғонан ысҡынып, һәммәһенә лә ярҙам итергә тырышығыҙ. Үҙегеҙҙә яңы өлкәлә һынау өсөн дә ыңғай осор. Бигерәк тә имтихан, тестарҙы еңел бирерһегеҙ.

ОЙОШТОРОУСЫҺЫ - БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ЭЛЕМТӘ ҺӘМ КИҢ КОММУНИКАЦИЯЛАР МИНИСТРЛЫҒЫ.
УЧРЕДИТЕЛЬ – МИНИСТЕРСТВО СВЯЗИ И МАССОВЫХ КОММУНИКАЦИЙ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН.

директор-баш мөхәррир
**АЗАМАТ ЮЛДАШБАЕВ**
директор-главный редактор

МӨХӘРРИРИӘТ:
**Гөлнур ҠОЛҺАРИНА**
**Зәһир ҠОТЛОСУРИН**
**Рәсүл СӘҒИТОВ**
**Зәки ӘЛИБАЕВ**
**Фирҙәүес ӘХМӘТЙӘНОВА**

**www.shonkar.ru.**

РЕДАКЦИЯ ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕ:
**Илшат ЗАРИПОВ –** баш мөхәррир урынбаҫары
**Гөлнара МОСТАФИНА –** яуаплы сәркәтип
**Гөлшат ҠАҺАРМАНОВА –** бүлек мөхәррире
**Ләйсән ШӘРИПОВА –** өлкән мөхәррир
**Шамил ЯУБАҪАРОВ –** өлкән мөхәррир
**Байрас ҠЫУАНДЫҠОВ –** биҙәлеш мөхәррире
**Гүзәл НОҒМАНОВА –** верстка буйынса оператор
**Милә БИЛАЛОВА –** корректор
**Филүзә СӘЛИХОВА –** йыйыу буйынса оператор

**Алина ЗӘЙҘУЛЛИНА –** баш бухгалтер
**Айрат ИСМӘҒИЛЕВ –** водитель

**БЕҘҘЕҢ АДРЕС:**
450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, "Шоңҡар" журналы редакцияһы.
**НАШ АДРЕС:**
450001, Республика Башкортостан, город Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала "Шонкар".
**ТЕЛЕФОНДАР:**
27-77-992 – баш мөхәррир,
29-27-763,
27-77-995 – бүлектәр,
29-27-762 – бухгалтерия.
E-mail: Shonkar@ufanet.ru.



## ҮЛСӘҮ



Пландарығыҙ тормошҡа аша башлар, әммә һөҙөмтәләре генә күҙаллауығыҙҙан бер аҙ тайпылыр. Был кәйефегеҙҙе ҡырмаҫ, ә киреһенсә, ниндәйҙер яңы асыш яһарға этәрер. Мәҫәлән, уйламаған өлкә менән ҡыҙыҡһына башлауығыҙ йәки мауыҡтырғыс шөғөлгә әүрәүегеҙ ихтимал. Тотонған эшегеҙгә башкөллө сумып, осона сығырһығыҙ.

## САЯН



Был айҙа әүҙем тормош алып барырһығыҙ. Көнөлегеҙгә яткан эш менән шөғөлләнә башларһығыҙ. Ташып торған көс-ғәйрәтегеҙ тирә-йүндәгеләрҙә лә дәрт уятмай ҡалмаҫ. Хатта көтмәгән кешеләр ярҙам ҡулы һуҙырға теләк белдерер. Тик уларға иғтибарлыраҡ булығыҙ: араларында яуызлыҡ ҡылыусылары ла осрауы мөмкин.

## УҠСЫ



Майҙы тыныслыҡ айы тип иғлан итһәгеҙ ҙә, барыһы ла уйлағанса ғына бармаҫ, күрәһең. Тынғыһыҙ дуҫтарығыҙ, коллегаларығыҙ һеҙҙе “тарткылауын” туҡтатмаҫ, моғайын. Улар яңы идеялар, пландар, тәҡдимдәр менән йыш мөрәжәғәт итеп торор. Шуға күрә һеҙгә ялығыҙҙы файҙалы эштәр менән аралаштырып, алтын урталыкты табырға тура килер.

## ЫЛАҠ



Һеҙгә был арала ҙур ғына килем төшөүе ихтимал. Тик ҡыуанысығыҙҙан уны шул уҡ көндө туҙҙырырға ашыҡмағыҙ. Бигерәк тә ғаилә ағзаларының фекерҙәренә ҡолаҡ һалыу ҡамасауламаҫ. Бәлки, улар яңы идея тәҡдим итер, һеҙҙе көтөлмәгән аҙымдарға этәрер? Ғөмүмән, был айҙа ҡабалан ҡабул ителгән ҡарарҙарҙан һаҡланығыҙ.

## ҺЫУҒОЯР



Әгәр май айында сәйәхәт ҡылырға ниәтләйһегеҙ икән, ул һис шикһеҙ хәл-ваҡиғаларға һәм ҡаршылыҡтарға бай булыр. Үҙ көсөнә ышанысын ҡайтарырға теләгән Һыуғоярҙар өсөн был иң яҡшы мөмкинлек. Ай аҙағында бик иғтибарлы булығыҙ: яңы һөнәр үҙләштерергә форсат сығыр, уны ҡулдан ысҡындырмағыҙ.

## БАЛЫҠ



Тәүәккәллерәк булығыҙ. Икенсе планда ҡалыуҙан ҡотолорға ваҡыт. Юғиһә, бөтә затлы, татлы нәмәләр сит ҡулдарға эләгер, ә һеҙгә булғаны менән ҡәнәғәтләнергә тура килер. Шуға ла көс туплап, яңы перспективалар эҙләргә, тормошоғоҙға үҙгәрештәр индерергә тырышығыҙ.


**БЕҘҘЕҢ РЕКВИЗИТТАР. НАШИ РЕКВИЗИТЫ:**
КП РБ Редакция журнала “Шонкар”
Р/с 40602810600010000123 в Филиале ОАО “УралСиб” в г. Уфа,
БИК 048073770,
К/С 30101810600000000770, ИНН 0278123157,
ОКОНХ 87100, ОКПО 32060535

*Башҡортостан Республикаһының “Өфө полиграфия комбинаты” дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.*
*Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.*

*Йыйырға бирелде 01.04.11. Баҫырға ҡул ҡуйылды 15.04.11.*
*Ҡағыҙ форматы 60х84 1/8. Офсет ысулы менән баҫылды.*
*Шартлы баҫма табаҡ 10. Учетн.-изд. таб. 12. Тиражы 7222 дана.*
*Заказ 2.0051.11.*
*Һатыуҙа хаҡы ирекле.*
*Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан теркәлгән.*
*Теркәү номеры: ПИ № ФС 77-30609.*

**Материалдарҙы ҡулланғанда журналға һылтанма яһау мотлаҡ.**

***Авторҙарыбыҙға гонорар түләү өсөн түбәндәге мәғлүмәттәр кәрәк:***
*– авторҙың тулы фамилияһы, исеме, атаһының исеме;*
*– почта индексы һәм тулы адресы;*
*– паспорт серияһы, номеры, кем тарафынан һәм ҡасан бирелгән;*
*– тыуған йылы, айы һәм көнө;*
*– социаль номеры;*
*– Дәүләт пенсия фондының страховка таныҡлығы номеры.*
*Әгәр ошо мәғлүмәттәр күрһәтелмәһә, авторҙарға гонорар түләнмәй.*
*Редакцияға тапшырылған материалдарға һәм ҡулъяҙмаларға рецензия бирелмәй, улар авторға кире ҡайтарылмай. Башҡа баҫмаларҙа донъя күргән йәки уларға тапшырылған материалдар ҡабул ителмәй.*

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.


1

Гимнастик снаряд
1
Тортилла
Дзюдо көрәшендәге балаҫ
2
Тымыҡ һәм Атлантик океан хайуаны
Билдәләнгән тәртип
3
Үлән тамыры ҡаҙыу өсөн осло таяҡ
Айғыр дейә


2

Сафра быҫағы
Суд менән хөкөм ителгәндәрҙе азат итеү
Башватҡыс
Небоскреб машинаһы
һум
Өйәр башлығы
Ниҙер йомошлау өсөн теҙелеү
Ялтылдап торған ут
Ҡош
«Тәнәфес!» - ти
Ҡорт
Йүкәнең йомшаҡ ҡабығы
Кавказ милләте
Эре ялан сиңерткәһе
Артыҡ шапырыныу
Деге
Эмиль Кио
4
Ауырлыҡ тағылған оҙон бау


3

Сүл бүреһе
Уға ҡыҙынырға кәрәкмәй
«Оҙон» автомобиль
Никах малы
Яҡты сатҡы
Исеме «осло, тиҙ» тигәнде аңлата
Беренсе көнө алдаҡсы
Кешенең көлкөлә һүрәте
Мәңге йәшел көньяҡ ҡыуағы
Цирк артисы
Морат Насыровтың милләте
Аҫтыртын этлек
Сәскә
Үлгән кеше
Йәй уртаһы
Спортсы
Лента
Бейеклеге - 50, диаметры 18 метрға еткән, 2 мең йыл йәшәүсе ағас
Бер ата-бабанан сыҡҡан быуындар теҙмәһе
КХЛ-да уйнаған «Карсыгалар» командаһы
Кейемдең мамығына эс яҡтан һалынған туҡыма
Үтә зирәк, ижади һәләтле кеше
Милләт
Ҡытай кесерткәне
Әй
һыу төбендәге шыйыҡ мәте
Иҫәп
Тәсбих


4

Ныҡлы ышаныс
Мәйетхана
Иртыштағы мегаполис
Әбйәлил районы гәзите
Хәрби карап
Яман эт иткә йәбешә, яман ... - яғаға
5


5

*Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнә.*

## ҮТКӘН ҺАНДАҒЫ СКАНВОРД ЯУАПТАРЫ:

**Горизонталь буйынса:** Турнепс. Ҡарағайлык. Осор. Таракан. Шоңкар. Балғалаҡ. Дага. Ҡарлуғас. Һандуғас. Тумыртка. Айыклык. Ҡобайыр. Арый. Ренегат. Санитар. Тал. Аран. Криптон. Лифт. Штраф. Аксарлак. Имза. Утар. Раунд. Ҡауҙы. Алма. Ҡәбер. Нона. Әҙәп. Ерек. Дегет. Әтәс.

**Вертикаль буйынса:** Акса. Биссектриса. Ылаҫын. Зык. Орлок. Импала. Ынйы. Ҡарта. Яран. Тауык. Арест. Әтәлге. Травматизм. Терпе. Рапорт. Алдыр. Нейлон. Фазан. Елкә. Баһа. Айран. Ҡарға. Ҡарсыға. Кейс. Рапс. Нукта. Агуна. Награда. Йогурт. Аҫаба. Ҡасыр. Трал. Ҡама.


ШАЯНИУМ

шоңкар

Индексы 73867

ISSN 2220-8437

9 772220 843026

